ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

28-3 июль - август (майай - урағай)

2018

№30 (812)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле


БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

"Һаҡаллы" темалар ҙа була...



4

Һуңғы сәсәндәрҙең береһе



7

Донъяның иң шәп күперҙәре...

улар беҙҙә, баш ҡалала



9

Нимә ҡәҙерле?



12-13

ТВ-программа 14


*Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! Эргә-тирәләге таныштарығыҙға, туғандарығыҙға иҫкәртегеҙсе: 2018 йылдың икенсе яртыһы өсөн 50665 индекслы "Киске Өфө"гә яҙылып өлгөрмәһәләр, әле лә һуң түгел - 20 августа тиклем яҙылһалар, гәзитебеҙҙе сентябрҙән алдыра башлаясаҡтар. Шулай уҡ июль-август айҙарында элекке хаҡ менән, йәғни 560 һум 82 тингә, 2019 йылдың беренсе яртыһы өсөн дә гәзитебеҙгә яҙылып була. Ошо арауыҡта гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәрҙең кемдәрелер, ғәҙәттәгесә, матур китапҡа өмөт итә ала.*

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Бөгөнгө йәш кеше ниндәй һөнәрҙе яҡшы тип иҫәпләй?

***Лилиә ҠАҺАРМАНОВА, Өфө ҡалаһы, абитуриент:*** Бөгөн техник вуздар популяр, сөнки техник һөнәр алып ҡына аҡса эшләргә була икәнен белә йәш кеше. Гуманитар һөнәр һайлаусылар ҙа байтаҡ, тик уҡырға инеү шарттары ҡатыраҡ: Берҙәм дәүләт имтиханы буйынса балдар ҙа юғары булырға тейеш, бынан тыш, ниндәйҙер ижади эш буйынса ла һынау тотоу кәрәк. Бөгөн йәш кеше һөнәрҙе унын күңеленә ятыу-ятмауына ҡарап түгел, ә киләсәктә икмәкһеҙ ҡалдырмаҫлыҡ, эш урыны табырлыҡ булыуына ҡарап һайлай. Мин үҙем табип һөнәрен үҙләштерергә ниәтләйем, сөнки медицина өлкәһендәге белгестәр һәр ерҙә, һәр ваҡыт кәрәк. Әлегә Өфө, Ҡаҙан, Волгоград, Екатеринбург ҡалаларындағы юғары уҡыу йорттарына документтарымды тапшырып, һөҙөмтәләрен көтәм. Шулай уҡ Өфө дәүләт нефть техник университетының бер нисә факультетына документ илтеп бирҙем, унда минең БДИ һөҙөмтәләрем буйынса уҡырға инеү мөмкинлегем бар. Әлбиттә, Башҡорт дәүләт медицина университетының дауалау факультетына уҡырға инә алһам, бик яҡшы буласаҡ. Сөнки был факультетта дөйөм курстар үткәндән һуң, артабан күңеленә ятҡан йүнәлештә белем алыуҙы дауам итергә була. Неврология йәки дерматология өлкәһен тәрәндән өйрәнер инем, вузда уҡыу барышында фекерем үҙгәреп китмәһә генә инде. Киләсәктә был өлкәләге белгестәргә эш урындары булыр, тип иҫәпләйем. Кешеләрҙең күңел торошона, нервылар системаһына бәйле сирҙәрҙе дауалау, ошо өлкәлә фәнни тикшеренеүҙәр алып барыу актуаль буласаҡ. Әлбиттә, яҡшы белгес булыр өсөн башта кәм тигәндә 10 йыл ғүмерен белем алыуға, һөнәри үҫешкә бағышларға тейешһең. Йәштәштәрем һөнәр һайлағанда был факторҙы ла иҫәпкә алалыр, тип уйлайым. Киләсәктә кем булып, ҡайҙа, күпме аҡса алып эшләрендә саҡ ҡына ла күҙалламай тороп, кеше кәңәш иткәйне йәки танышым шунда енел генә уҡып сыҡты, тип, юғары уҡыу йортон һайлап булмай. Статистик мәғлүмәттәргә күҙ һалып, баҙар хәлдәрен өйрәнеп хәл итергә кәрәк. Хатта әле әйткән дауалау факультетына уҡырға ингәндә лә анығ йүнәлеште һайлар алдынан статистиканы ҡарап, киләһе биш йылға бирелгән күҙаллауҙар менән танышып сығырға уйлайым. Сөнки талаптар үҙгәреүе бар, бәлки, башҡа йүнәлештәге табиптар кәрәк булыр ул саҡта.

(Дауамы 2-се биттә).

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# ИҪКЕ ЯҢЫ КҮПЕР АСЫЛДЫ

**26 июль иртәһендә, аныҡлап әйткәндә, таңғы 5-тә көньяҡ йүнәлештә Ағиҙел аша һалынған иҫке күпер ремонттан һуң асылды.**



Был эргәләге яңы күперҙәге хәрәкәткә үҙгәрештәр индерҙе, йәғни иртәнге сәғәттәрҙә унда ҡалаға ингән һыҙаттар - дүртәү, сығыу һыҙаты икәү буласаҡ. Кисен иһә ике яҡҡа ла өсәр һыҙат эшләйәсәк. Ремонтланған күпер аша ҡаланан сығыу ике һыҙат буйынса тормошҡа ашырыласаҡ. Әммә күперҙә ҙур күләмле транспорт, автобустар хәрәкәте тыйыла, шулай уҡ тиҙлек сәғәтенә 40 километрғаса сикләнә. Күпер алдына махсус сикләү ҡапҡалары һәм тейешле юл билдәләре ҡуйылған. Был талаптарҙың үтәлеше Дәүләт автоинспекцияһы хеҙмәткәрҙәре күҙәтеүендә. Шулай уҡ күперҙә, һауа температураһына бәйле, ҡулланыу буйынса ла сикләүҙәр буласаҡ. Улар ҡышҡыһын, сатлама һыуыҡтар ваҡытында ҡулланыласаҡ һәм был хаҡта кин мәғлүмәт саралары аша хәбәр ителәсәк.

12+

## ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишерелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәпләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгә еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# ҒАИЛӘГЕҘҘӘН АЙЫРЫЛМАҒЫҘ!

*Урал МОРТАЗИН, БР-ҙың атҡаҙанған артисы:* Беҙҙең заманда күп кенә башҡорт ир-егеттәре эш, ғаиләһен ҡарарлыҡ аҡса эҙләп, ситкә китергә мәжбүр. Үҙем бер ҡасан да, нишләптер, республиканан ситкә китеү юлын эҙләмәнем, ошода ғаилә ҡороп, йәшәү айын ҡараным. Бейеүсе булып эшләгәндә лә, әлеге көндә З. Исмәғилов исемендәге Өфө сәнғәт институтында уҡытҡанда ла, тәҡдимдәр булғыланы, әммә ғаиләнде ҡалдырып, ситкә китеп эшләп йөрөүҙе башыма ла индереп сығармайым.

Шуны аңлаһындар ине ир-егеттәр: илдәге сәйәсәт, иҡтисади хәлдәр ниндәй генә булмаһын, улар ғаиләһенән айырылмаҫҡа тейеш. Бигерәк тә малайҙар атаһын юҡһына. Бына мин әле ял ваҡытында эштәр буйынса сығып киттем, уландарым юҡһыныр, шылтыратып та тора. Башҡорт милләтенең киләсәген ҡайғыртҡан ир-егеттәргә шуны әйтер инем: Башҡортостанға ҡайтығыҙ! Бәлки, миңә был һүҙҙәрҙе әйтеүе еңелдер, билдәле кешемен, тормошта үҙ урынымды тапҡанмын, шуға кеше хәлен аңлап та етмәйемдер. Ләкин мин хеҙмәт юлын башлаған саҡта бер ҙә еңел булманы. Артист һөнәренең иң түбәнге баҫҡысынан башланым, эш хаҡы үтә лә бәләкәй ине. Йәйләп, үҙем һайлаған юлдан бара торғас, маҡсатыма өлгәштем. Советтар Союзында тәрбиәләнеп үҫкән кеше булараҡ, аҡсаға ла, донъяға ла ҡарашым бөтөнләй икенсе булды. Хәҙерге йәштәр беҙҙең быуын кешеләренән бик нығ айырыла, уларға бөтә нәмә бер юлы кәрәк. Яңы ғыны хеҙмәт юлын башлап торған йәш кеше барыһы ла бер ыңғай һәм мул итеп килеүен теләй хәҙер. Әммә кеше ниндәйҙер хеҙмәт баҫыстарын үтәмәйенсә тороп, дәрәжәләргә өлгәшә алмай. Тормошта миҫалдар күп, үҙемдең аҡсалы, вазифалы таныштар араһында ла балаларын иң түбән дәрәжәләге хеҙмәткәр буларак эшләргә күндергәндәр бар. Хеҙмәт юлын ябай эшсе буларак башлап, артабан тырышлығы етеп, үҙ аҡылы һәм оҫталығы, тәжрибәһе менән юғары баҫҡысҡа үрләй алырмы-юҡмы, атаһының ҙур фирмаһына хужа булырлыҡмы - ошондай һынауҙы үтергә тейеш ул балалар. Был дөрөҫ алым, тип уйлайым. Ысынлап та, беҙҙең балалар ҙа үҙ тырышлығы менән киләсәккә юл ярырға тейеш. Сыҙамлыҡ, яуаплылыҡ йөкләй алыу ҙа талап ителә. Тормош һынауҙарына ҡаршы тороп, теләктәребеҙҙе бойомға ашыра алабыҙ икән - шунда ғына уңыш килә. Ошо турала ир-егеттәр онотмаһын һәм ниндәй генә һынауҙар ваҡытында ла ғаиләһенән айырылмай, бөтә ауырлыҡтарҙы бергә үтеп, ҡанаттарын үҙ туған еребеҙҙә нығытып, милләтебеҙҙең киләсәген хәстәрләп йәшәһендәр ине.

**Камила ҒӘЛИЕВА яҙып алды.**

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Бөгөнгө йәш кеше ниндәй һөнәрҙе яҡшы тип иҫәпләй?

(Башы 1-се биттә).

*Ләйсән ҒИБАҘУЛЛИНА, Сибай ҡалаһы, абитуриент:* Бөгөн табип һөнәрен үҙләштергән йәш белгестәр кәрәкле, тип һанайым, бигерәк тә бәләкәй ҡалала. Тик үҙем, мәсәлән, шул уҡ Сибай ҡалаһына эшкә кире ҡайтҡым килмәй. Сөнки бындай бәләкәй ҡалаларҙа тормош талғын, һәүетемсә бер төрлө генә бара, мөмкинлектәр ҙә ниндәйҙер киммәлдә сикләнгән. Тиҫтерҙәрем нәҡ шуның өсөн дә ҙур мегаполистарҙағы юғары уҡыу йорттарына инергә ынтыла, артабан шунда эш табып, тороп ҡалырға теләй. Унда уҡырға ла, аҡса эшләргә лә мөмкинлектәр күберәк, үҫеш өсөн дә юлдар асыҡ. Ә бына ниндәй һөнәр үҙләштереү өҫтөнлөклө булыуына килгәндә, һәр кем үҙенең мөмкинлектәренән сығып киләсәген хәл итәлер, тип иҫәпләйем. Барыһы ла һинең уҡыу киммәлендән, Берҙәм дәүләт имтихандарын нисек тапшырыуыңдан, нимә менән шөғөлләнергә яратыуыңдан тора. Тиҫтерҙәрем хәҙер ата-әсәһе ҡушҡан өсөн генә иҡтисадсыға уҡырға барыуҙы йәки башҡа күңеленә ятмаған һөнәрҙе һайлай һалып бармайҙыр ул. Аҡыллы, мәктәптә уҡығанда уҡ киләсәген хәстәрләп, тырышып торған үҫмерҙәр күп. Иң мөһиме, йыр-бейеү, ижад эшенә ҙур таланты булмаған йәштәр тормошта кәрәк булғандай һөнәрҙе һайлауҙы хуп күрә. Ниндәйҙер хыял артынан барып, аҙаҡ шул өлкәлә уңыш ҡаҙана алмай, үкенеп йөрөгәнсе, баш менән уйлап, иң ҡулайлы юлды һайлауың яҡшы инде. Шуға ла мин башҡорт теленән олимпиадаларҙа ҡатнашып, призлы урындар алып йөрөһәм ҙә, филология өлкәһенә бармаҫмын ул, тип торам. Табип һөнәрен үҙләштерергә итәм, уға һәр саҡ эш урыны табыла бит.

*Динис ЮЛБИРҘИН, Бөрйән районы, абитуриент:* Мин Башҡорт дәүләт аграр университетының энергетика факультетына документтарымды тапшырҙым, хәҙер түҙемһеҙлек менән һөҙөмтәһен көтөргә ҡалды. Бынан тыш, Өфөләге теш табибы һөнәренә уҡытҡан уҡыу йорттарына ла документтарымды алып барып бирҙем. Ҡайҙа уҡырға инһәм дә, киләсәктә ғаиләне ҡарарлыҡ эш табып булһын. Әлбиттә, энергетика факультетында белем алып, инженер булып сыҡһам, яҡшыраҡ булыр ине. Сөнки атайым электрсы, мин был эште яҡшы беләм, ауыл ерендә лә, ҡалала ла үҙ урыныңды табырға була. Тиҫтерҙәрем шул техник вуздарға уҡырға инергә ынтылалар инде, бигерәк тә нефтҡә бәйле һөнәрҙәрҙе үҙләштерергә тырышалар. Сөнки ул осраҡта Себер тарафтарына эшкә китеп, күберәк аҡса табырға мөмкин. Ир-егет өсөн шул ғаиләнде ҡарай алыу мөһим бит инде.

**Сәриә ҒАРИПОВА яҙып алды.**

## ТОРМОШ АҠЫЛЫ

# УҪАЛ БУЛМА. БӘХЕТЛЕ БУЛ!

**Бер көн ҡыҙым һорай ҡуйҙы: "Әсәй, ни эшләп кешеләр уҫал була ул?" Баламдың ҡапылғара биргән һорауы алдында башта баҙап ҡалдым. Ерле-юҡҡа бирмәйҙер был һорауын, берәйһе күңелен китерлек һүҙ әйттеме лә, башҡа төрлө насарлыҡ ҡылдымы әллә?**

"Бары тик бәхетһеҙ кешеләр генә уҫал була ул", тинем балама. Ысынлап та, сиратта торғанда, транспортта һәм башҡа урында берәйһенең ғауғалап маташҡанын, ҡыҫҡырып-екеренгәнен күрһәм, үҙем шундай һығымтаға киләм. Ғөмүмән, тормоштан, үҙ-үҙенән ҡәнәғәт булмағандар тауыш сығара, кемделер рәнйетергә, түбәнһетергә маташа. Улар бер ҡасан да кеше күңелен аңламай, сөнки үҙ күңелдәре урынында түгел, тормош менән гармония урынлаштыра алмағандар. Тап шундайҙар бәхетле, уңышлы кешеләргә һөҡланып түгел, ә, кирелһенсә, асыуланып, көнләшеп ҡарай.

Арабыҙҙа етерлек инде ул уҫал кешеләр. Әммә мин уларға асыуланып түгел, ә йәлләп ҡарайым. Үҙемә насарлыҡ эшләһәләр ҙә, ихласлыҡ, алсаҡлыҡ менән яуап бирергә тырышам, сөнки улар былай ҙа китек күңелле, бәхетһеҙҙәр бит. Ә ҡараңғылыҡты иһә бары тик яҡтылыҡ ҡына еңә ала.

Башҡалар хаҡында ғәйбәт һөйләп, уларҙың тормоштарына ҡыҫылып йәшәгәндәр ҙә тап шулар рәтендә. Күңеле бөтөн, тормошонан ҡәнәғәт кеше бөтөнләй башҡа көйләнештә була, ул әйләнә-тирәһенә яратып баға, һөйөүен, наҙын бүлешергә әҙер, йөҙөнән йылмайыу китмәй, бар донъяны ҡосоп алырҙай булып йәшәй. Ундайҙар янында башҡаларға ла йылы, рәхәт була.

"Ә анау апай ҙур өйҙә йәшәй, һәйбәт урында эшләй, ә үҙе уҫал..." - ҡыҙым менән һөйләшеү дауам итә. "Тимәк, - тим, - ул барыбер үҙенсә бәхетһеҙ..." Сөнки бәхет төшөнсәһе күп осраҡта матди байлыҡҡа түгел, ә күңел байлығына бәйләнгән. Бәлки уның берәй бик ҙур хыялы тормошҡа ашмай ҡалғандыр ҙа, ғүмерлек үкенесенә әйләнгәндер. Яҡшы урында эшләү ҙә күп осраҡта үҙ урыныңда эшләүҙе аңлатмай. Хан һарайындай йорттарҙа ла бәхетһеҙ яҙмыштар булыуы ихтимал.

Тағы ла шуны күҙәткәнем бар: ғаиләһендә ата-әсә һөйөүе күрмәгәндәр тормошта уҫал, ҡаты була. Гел әрләнеп, туҡмалып йәшәгәндәр үҙҙәре лә киләсәктә шуны уҡ ҡабатлай башлай. Шуға күрә, ҡайһылай уҫал кеше, тигәндә ишетһәм, бәхетһеҙ, тип өҫтәп ҡуям.

Тормош булғас, кешенең төрлө сағы була: йә ҡәйефе юҡ, йә сирләп тора. Ундай мәлдәрҙә ҡатыраҡ ҡыланып, асыуланып ташлауҙан беребеҙ ҙә азат түгел, әлбиттә. Тик минең һүҙем улар хаҡында түгел, ә ғүмере буйы һөмһөрө ҡойолоп, ерле-юҡҡа асыуланып, әсе теле менән бүтәндәр күңелен яралап, ғәйбәт һөйләп, донъянан гел насарлыҡ эҙләп йәшәгәндәр хаҡында булды. Ошолайыраҡ итеп аңлатҡайным, "Аңланым, - тине ҡыҙым, - тимәк, уҫал булырға ярамай..."

- Эйе, - тинем мин дә. - Үҙең менән килешеп йәшә, донъя менән гармония урынлаштыр, уйҙарыңды ыңғайға көйлә, кешеләрҙе ярат һәм... уҫал булма. Бәхетле бул!

Ошо уҡ һүҙҙәрҙе гәзит уҡыусыларға ла төбәйем. Һәм, әлбиттә, уларҙың да был юҫыҡтағы фекерен белгем килә: мин хаҡлымынмы, әллә башҡа төрлө хәҡиҡәт тә бармы? Әйҙәгеҙ, фекерләшәйек!

**Лена ХӘЙРУЛЛИНА.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓ Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов төбәктә "Һаҡсыл хөкүмәт" пилот проектын ғәмәлгә ашырыу буйынса координация советы ултырышын үткәрҙе. Был турала проект офисы етәксеһе, Башҡортостан Республикаһы Башлығының Эштәр идарасыһы Ринат Шәғәлин һөйләне. Һаҡсыл етештереү философияһы эш процестарын даими камиллаштырыуға, даими рәүештә оптималләштереү һәм юғалтыуҙарҙы бөтөрөү юлдарын эҙләүгә нигеҙләнгән, тип билдәләне төбәк етәксеһе.

✓ Республика Хөкүмәте Премьер-министры Рөстәм Мәрҙәнов етәкселегендә Башҡортостандың рәсми делегацияһы эш сәфәре менән Ҡытай Халыҡ Республикаһының Цзянси провинцияһында. Былтыр Ҡытай Халыҡ Республикаһы менән тышҡы сауҙа әйләнеше 674,2 миллион АҠШ доллары тәшкил иткән, ул 2016 йылға ҡарағанда 69,9 процентҡа күберәк. 2018 йылдың башына Башҡортостан биләмәһендә Ҡытай капиталы ҡатнашлығында 22 предприятие теркәлгән.

✓ Үҙенсәлекле ландшафтар, тәбиғи һәм геологик парктар булған биләмәләр, атап әйткәндә, Башҡортостан өсөн халыҡ-ара статус алыу фәнде, белем биреү проекттарын, туризмды үҫтереү өсөн яңы мөмкинлектәр аса. Ошо хаҡта республика Башлығы Рөстәм Хәмитов Башҡортостан Башлығы ҡарамағындағы Фән буйынса совет ултырышында белдерҙе. Унда төбәктә геопарктарҙы үҫтереү һәм уларҙы ғилми оҙатыу мәсьәләләре тикшерелде.

✓ Башҡортостандың Ауыл хужалығы министрлығында ағымдағы йылдың тәүге ярты йылына төбәк хужалыҡтары араһында һыйырҙарҙың етештереүсәнлегенә йомғаҡ яһалды. Йыл башынан республика хужалыҡтары 357 мең тонна тауар һөтө (эшкәртеүгә ебәрелгән) етештергән. 139 мең һөтлө һыйыр иҫәпләнгән.

✓ Башҡортостан Финанс министрлығы мәғлүмәттәре буйынса, төбәк бюджетына тәүге ярты йылда 114 миллиард 182 миллион һум (2017 йылдың I ярты йыллығына ҡарағанда дүрттән бер өлөшкә күберәк) кергән. Уларҙан һалым һәм һалым булмаған килем - 97,2 миллиард. Дәүләт мөлкәтен файҙаланыуҙан табыш 3,65 миллиард һум тәшкил иткән. Түләүһеҙ керем (күбеһенсә федераль бюджеттан) 16,9 миллиард һум булған.

БЫЛ АЙҘА...

# ЙӘЙ МИҘГЕЛЕ - СӘСКӘ ҒҮМЕРЕ

**Йәй миҙгеле - сәскә ғүмере. Әле генә ер ҡарҙан әрселеп, тәүге йәшеллек менән ҡапланыуға шатланһаҡ та, йәйге көндәр күҙ асып йомғансы үтеп тә бара: урағайҙа ла аяҡ баҫабыҙ бына. Был инде йәйҙең һуңғы айы - көҙгә табан ауышыуы булыр.**



Шуға ҡарамаҫтан, быйылғы йыл холҡонан сығып, йәйге селлә урағайҙа ла сөлләтер әле, тип фаразларға нигеҙ бар, сөнки яҙ менән йәйҙең 2-3 аҙнаға һуңлап килеүе миҙгелдәр мөҙҙәтен дә шул самараҡҡа алғараҡ этәрҙе. Метеорологтар ҙа шундай уҡ фекерҙә. Августа уртаса һауа температураһы июлдәгесә 27-29 градус тәшкил итеп, эҫелектең ай ахырында ғына һүрелеүе көтөлә, ти һауа торошо белгестәре. Хәйер, уның тоғроһон ғына бер кем дә әйтә алмаҫ: һауа торошо тәүлек эсендә генә бишкә төрләнә хәҙер. Аралаштырып, ямғырҙар яуып үткән ҡалдә лә көндәр тиҙ генә һыуытмаҫтыр ҙа, буғай. Яҙ ахыры көҙгә көндәргә тартым һалҡынса килһә лә, йәйҙең йәйсә булыуы хәйерлелер. Тик бына артыҡ эҫе лә ярамай шул әҙәм балаһына. Иң яҡшыһы - Башҡортостан климатына хас уртасалыҡ нисбәте һаҡланып ҡалһа ине лә бит...

Атамаһы уҡ һөйләп тороуынса, был айҙа ауыл хужалығы эшсәндәре ураҡҡа төшә. Бесәндең дә ҡыҙған мәле. Өлгөргәне емеш-еләк тирә, дарыу үләндәре йыя. Ҡаланыҡылар ғына нужаһыҙ көн күреп, ҡояшта ҡыҙына, һыу инә, йә тағы ла эҫерәк илдәргә, диңгеҙ буйҙарына юллана. Шунан сығып, ауыл халҡының тырышлығы, эшсәнлегенә мәңге дан йырларлыҡ, сөнки һауа торошоноң нисек килеүенә ҡарамаҫтан, ауыл ҡала халҡының тамағын туйҙыра: иген үҫтерә, итен-һөтөн, башҡаһын етештерә. Икенсе төрлә әйткәндә, ауыл - илебеҙҙең ныҡлы тылы. Юҡҡа ғынамы ни, был айҙың тәүге көнө тап Тыл көнө тип билдәләнгән. Тулыраҡ итеп әйткәндә, **1 август** - РФ Ҡоралды Көстәре тылы көнө. Был датаның тарихы 1700 йылға барып тоташа. Ул саҡ император Петр 1 аҙыҡ-түлеккә, фуражға армия ихтыяжын тәьмин итеү маҡсатынан үҙенең провиант бойорого тигән атама алған указын сығара. Унан һуң бик күп йылдар үтеп, Бөйөк Ватан һуғышы башланғас, 1941 йылдың 1 августында СССР-ҙың Оборона халыҡ комиссариаты тарафынан "Ҡыҙыл Армияның тылын ойоштороу тураһында" тағы бер бойороҡ сығарыла. Ә инде был һуғышта тылдың ниндәй роль уйнауы һәр кемгә яҡшы мәғлүм. Тыл Бөйөк еңеү хаҡына бөтәһен дә бирә: атайҙарын, ирҙәрен, улдарын. Шуның өҫтәүенә, үҙҙәре аҫыланғас булһа ла, "Бөтәһе лә фронт өсөн, бөтәһе лә Еңеү өсөн!" тигән девиз менән көнө-төнө армияға икмәк, кейем, ҡорал, танктар эшләп, туҡтауһыҙ эшелондар оҙата. Ә тылда бит күпселек ҡатын-ҡыҙ, ҡарт-ҡоро һәм бала-саға, үсмерҙәр генә төп көс булып ҡала. Шундай фиҙаҡәр, ышаныслы, героик тыл булмаһа, еңеү яуланыр инеме икән? Хәҙер йыш ҡына шундай һорау ҙа бирәләр. Әйе, бик урынлы һорау... Тылда ла фронттағынан еңелерәк булмаған: баш остарында пуляләр һыҙғырмаһа ла, халыҡ аслыҡтан ҡырылған, туңған, ләкин бөгөлмәгән: һабанға егелеп, бураҙна ярған, боҙло һыу кисеп, елкәһендә орлоҡ ташыған, ҡара таңдан кискә тиклем станок артында торған... Рух көсө, еңеүгә ышаныс, ҡәҙерлеләренең әйләнеп ҡайтыуын тиҙләтеү теләге менән янған тыл, шул уға инде йығылдым тигәндә ҡеүәт биргән, еңеүгә әйҙәгән. Ул ваҡыттағы тыл эшсәндәрен шуға ла Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашыусылар статусы менән тигеҙләү уларҙың ҡаһарманлығын таныу һәм ғәҙел баһа бирәү булды.

Үкенескә, үлән ашап иҫән ҡалған тыл геройҙары - һуғыш фажиғәһенең тере шаһиттары ла һирәгәйә бара. Уның ҡарауы, шанлы йылдар традициялары бөгөн ышанысла ҡулдарҙа, тип әйтергә була. Һауа-десант ғәскәрҙәре көнө (**2**) был подразделение бөркөттәре үҙҙәренең теләһә ниндәй шарттарға һәм ваҡиғаларға ла һәр саҡ әҙер, уяу тороуҙары, кәрәк булһа, ватан хаҡына ғүмерҙәрен дә йәлләмәйәсәктәре хаҡында ант итә. Тик ватан да үҙ граждандары ғүмерҙәрен ҡәҙерләргә, уларҙың тормош ҡиммәттәрен һанларға өйрәнһен ине. Ана шул ҡиммәттәрҙең иң ҙуры - Рәсәйҙең күп милләтле халҡы, уның берҙәмлеге. Бөйөк Ватан һуғышында еңеүсе булып сығыуҙың да ҡеүәтле бер факторы ул. Ошо стратегик милли ресурсҡа ҡарата рус халҡы менән бер тигеҙ мөнәсәбәт йәшәп килгән саҡта, Рәсәйҙең ҡеүәте арта бына барасаҡ. Ғәмәлдә иһә күп милләтлектән екһеңеү, уларҙың проблемаларын диктат арҡылы "хәл итергә" ынтылыу йүнәлеше һиҙелә һуңғы йылдарҙа. Бөтөн донъя аҫаба халыҡтар көнө (**9**) айҡанлы ғына түгел, уйыбыҙҙан китмәҫ, телебеҙҙән төшмәҫ, ғәмәлдәребеҙҙә сағылыр көндәлек ғәмебеҙ булһын ине ул милләтебеҙ һәм туған тел яҙмышы. Донъя тыуғандан алып ата-бабалары төйәк иткән ерҙәргә ерекән башҡорт халҡына быуаттар буйына үҙенең аҫабалығын иҫбат итеп, йәндәй күргән ере менән азатлығын яҡлап йәшәргә, көрәшергә, ҡайнар ҡанын түгергә тура килә. Аҫабалыҡты һаҡлауҙың бөгөн дә үҙ хоҡуҡтарыбыҙҙы яҡлау булыуҙан туҡтағаны юҡ. Өҫтәүенә, туған телебеҙ яҙмышы ла беҙҙең намыҫта икәнде онотмайыҡ, онотһаҡ, тарих беҙҙе ғәфү итмәҫ. Әллә ниҙәр атҡарыу ҙа кәрәкмәй бының өсөн. Балаларың, ейән-ейәнсәрең менән башҡортса һөйләшеп, әсә телебеҙҙә сыҡҡан гәзит-журналдарыбыҙҙы алдырып уҡыу ҙа етә һәр кемдән. Был үҙе милләтебеҙ файҙаһына ҙур эш булыр. Үкенескә, бик аҙҙар аңына ғына барып етә был. Мәҫәлән, үткән быуаттың 70-се йылдарында мәктәп тамамлаған утыҙ-ҡырҡлап синыфташтан ("а" һәм "б" кластары) бер-икеһенең генә гәзит алдырып уҡығанын беләм. Ғаиләә аҫрау, донъя ҡыуыу, ашап-эсеү, күнел асыуҙар бер беҙҙән генә ҡалмаған, ә һуң рух, илһөйәрлек, телһөйәрлек, күңел тигән донъябыҙ ҡайҙа төшөп ҡалды, замандаштар? Аҫабалар нәҫеленән дә һуң үҙебеҙ!

Был айҙа күренекле даталар һәм һөнәри байрамдар байтаҡ: Физкультурниктар (**11**), РФ Хәрби-һауа көстәре, Төҙөүсе, БР Умартасылыҡ, Халыҡ-ара йәштәр көндәре бөтәһе бер датаға - **12** августҡа тап килә. Артабан Археолог (**15**), РФ Һауа флоты (**19**), Шахтер (**26**), Рәсәй киноһы (**27**), Халыҡ-ара ядро һынауҙарына ҡаршы ғәмәлдәр (**29**), Ветеринария хеҙмәткәре (**31**) көндәре билдәләнә. Мосолман донъяһында иң ҙур изге байрамдарыбыҙҙың береһе - Ҡорбан байрам иһә **21** август - шишәмбегә тап килә.

**Урағайҙа тыуғандар:**

**19** - тарих фәндәре докторы, БДУ профессоры, Башҡортостан һәм Рәсәйҙең атҡаҙанған фән эшмәкәре **Ирек АҠМАНОВҡа - 85 йәш** (1933).

**20** - тарихсы, археолог, йәмәғәт эшмәкәре, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетының тәүге рәйесе, Салауат Юлаев ордены кавалеры **Нияз МӘЖИТОВтың тыуыуына - 85 йыл** (1933-2015).

**27** - фольклорсы-ғалим, филология фәндәре кандидаты, Салауат Юлаев исемендәге премия лауреаты **Мөхтәр СӘҒИТОВтың тыуыуына - 85 йыл** (1933-1986).

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР




# КҮҘӘТЕҮҘӘР

***50-се күҙәтеүем.*** Йыш ҡына атаәсәләрҙең шундай һүҙҙәрен ишетергә тура килә: "Балаларыбыҙ менән өйҙә башҡортса аралашабыҙ. Балалар баҡсаһының башҡорт төркөмөнә йөрөтәбеҙ, башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытылған класҡа бирәбеҙ, әммә улар урамға сыҡһа, йәнәһе кенә дөйөм аралашыу теленә күсә..."

"Үҙ кимәлендә аралашыу мөхите булмаған саҡта һәр бер талант эйәһе юҡҡа сыға", тигән Флобер. Тел менән дә шулай. Тимәк барыһын да милли телдә аралашыу мөхите хәл итә, улай ғына ла түгел, ул мөхит баланың артабанғы яҙмышын да билдәләй. Ҡытайҙар юҡҡа ғына донъяның башҡа дәүләттәрендә үҙ кварталдарын ойоштороп йәшәмәй.

Шамонино ауылының балаларын күҙәткәнем бар. Улар, асылда, башҡортса аралаша, әммә ара-тирә дөйөм аралашыу телендә һөйләшкән төркөмдәргә лә осрап ҡуя. Тағы ла шуныһы: был балалар халҡыбыҙҙың бөрйән, үҫәргән, ҡыпсаҡ, ҡубәләк, түңгәүер ырыуҙары вәкилдәре. Ҡыҫҡаһы, был ауылда халҡыбыҙҙың бөтөн ырыуҙары вәкилдәре йәшәй. Тимәк, ғаиләлә, урамда, балалар баҡсаһында, мәктәптә уҡытыу-тәрбиә эшен дөрөҫ итеп ойошторғанда, 10-15 йылдан бының ыңғай һөҙөмтәләре күренәсәк. Был ауыл миҫалында бөтөн халҡыбыҙ сағыла.

***51-се күҙәтеүем.*** Бер дуҫымдың диуарында "Бәхет тынлыҡ ярата" тигән яҙыу уҡыным. Бик тәрән мәғәнәле һүҙҙәр. Ниңәлер, күп кенә кешеләр яңғыҙлыҡҡа дусар булыуҙарын, тормош иптәше менән айырылышыуҙарын, балалары үҫеп етеп, яңғыҙ ҡалыуҙарын бәхетһеҙлеккә тинләй. Ә бит ысын бәхет бәхеттең булмауында булыуы ла ихтимал. Хоҙайҙың ихтыярынан тыш япраҡ та һелкенмәй. Тап шуның өсөн, әгәр ҙә кеше яңғыҙ тороп ҡала икән, был да юҡҡа түгел. Йыш ҡына икенсе кешене артыҡ ныҡ яратһаң, уны юғалтаһың, тигәнде лә ишетергә тура килә. Халыҡ "Үтә ҡыҙыл тиҙ уңа", ти был осраҡта. Ошоларҙан сығып, шундай һығымта яһарға ла ла мөмкиндер: кеше яңғыҙ ҡалған осраҡта Хоҙайға яҡынлай. Ә инде Уның хозурына яҡынлашыу бәхеттең дә бәхете. Бер китапта уҡығайным: донъя ҡыуғандарҙы, Үҙен һанға һуҡмағандарҙы Хоҙай үҙенә ҡаратыр, ишеттерер өсөн һуҡыр йә һаңғырау итә. Бәлки мин яңылышамдыр?

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

**(Дауамы бар).**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓ Башҡортостанда яңы мәғариф министры урынбаҫарын тәғәйенләнеләр. Был эште Әлфиә Ғәлиеваға ышанып тапшырҙылар. Алдан ул ошо уҡ ведомствола юридик бүлекте етәкләне. Ғәлиева Әлфиә Закир ҡыҙы 1973 йылдың 18 июнендә Өфөлә тыуған. "Хоҡуҡ фәне" һөнәре буйынса Башҡорт дәүләт университетын тамамлаған.

✓ Яғыулыҡтың ҡиммәтләнеүе менән бәйле "Аэрофлот" төркөмө авиакомпаниялары үҙ рейстарына билетка хаҡтарҙың артыуы тураһында иҫкәртте. Бынан тыш, ҡайһы бер сит ил авиакомпаниялары ла халыҡ-ара рейстарға тарифтарҙы 28 июндән аҡрынлап арттырыу хаҡында иҫкәрткән.

✓ 2018 йылдың алты айында Башҡортостан ЗАГС-тарына дәүләт хеҙмәттәре сервисы аша 16 868 ғариза килгән, тип хәбәр иттеләр республиканың Мәғлүмәтләштереү буйынса дәүләт комитетында. Был хеҙмәт 2017 йылдың июль айынан эшләй. Бынан тыш, республикала йәшәүселәр электрон формала никахтарын ғына түгел, бала тыуыуҙы, уллыҡҡа йәки ҡыҙ итеп алыуҙы һәм башҡа хеҙмәттәрҙе теркәй ала.

✓ Граждандарҙың еңел автомобилдәрен, тәү сиратта, бөтә ерҙән үтә алған машиналарҙы, хәрби иҫәпкә ҡуялар, тип хәбәр итә "Известия" Оборона министрлығына һылтанып. Документҡа ярашлы, автомобилдәрҙең резервтар складынан яңылары килгәнсе армия кәрәк-яраҡтары өсөн ваҡытлыса йәлеп ителеүе мөмкин. Хужаларына автомобилдәр менән файҙаланған өсөн компенсация ҡаралған. Машиналар хәрби хәрәкәттәрҙә ҡатнашмаясаҡ.

✓ Башҡортостан дәүләт тәбиғәт ҡурсаулығында бесән сабыусылар араһында традицион ярыштар үтте. Унда Бөрйән районының төрлә ауылдарынан һигеҙ ҡатын-ҡыҙ һәм ун ир-егет ҡатнашты. Ир-егеттәр араһында беренсе урынды - Һарғая ауылынан Әсҳәт Хәмитов, икенсене - Әбделмәмбәтән Рафаэль Фәтҡуллин, өсөнсөнө Морат Ғәсимов алды. Ҡатын-ҡыҙҙар араһында Һарғая ауылынан Зөлфиә Фәхретдинова беренсе булды. Икенсе урында - Иҫке Собханғол ауылынан Зилә Ғайсина, өсөнсөлә - Әбйәлил районынан Лилиә Мөхәмәтғәлина, тип хәбәр иттеләр ҡурсаулыҡта.

✓ *Өфө иҡтисадында туризм индустрияһы айырым урын биләп тора һәм уны бөгөн илдең генә түгел, донъя баҙарына сығарыу - ҡаланың туриндустрия субъекттары алдында торған төп бурыстарҙың береһе.*



ТӨРЛӨҺӨНӘН

## БАЛАЛАР УЙЫНДАРЫНА...

**30 июлдә Иерусалим (Израиль) ҡалаһында 52-се Халыҡ-ара балалар уйындары башлана.**

Унда Өфөнән 13 йәш спортсы ҡатнаша. Дөйөм алғанда, барлыҡ ҡатнашыусылар һаны мең ярымдан ашып китә, уларҙы 4 меңдән ашыу тамашасы күҙәтәсәк. Ярыштар 9 спорт төрө буйынса үтәсәк: еңел атлетика, стритбол, баскетбол, фехтование, футбол, дзюдо, йөҙөү, теннис, волейбол. Өфө спортсылары дзюдо, еңел атлетика, фехтованиела көс һынашасаҡ. Әйткәндәй, Өфөлә 2013 йылда Ҡышҡы Халыҡ-ара балалар уйындары үткәйне, киләһе йылда баш ҡала йәйге Уйындарҙы үткәрергә әҙерләнә. Унда донъяның 35 иленең 90 ҡалаһынан 1500-ҙән ашыу йәш спортсының килеүе көтөлә.

## ӘБЕЙҘӘРҘЕ ҠЫУМАҒЫҘ!



**Ҡала хакимиәтендә үткән оператив кәңәшмәлә рәйеслек итеүсе мэрҙың беренсе урынбаҫары Салауат Хөсәйенов шәхси участкаларында үҫтергән йәшелсә-емеш менән һатыу итеүселәргә уңайлы шарттар тыуҙырыу зарурлығын белдерҙе.**

Ҡала буйынса күҙәткәндә, һатыу итеүселәр бик йыш был маҡсатҡа ҡулайлаштырылған урындарҙан түгел, ә ҡайһы ваҡытта хатта продукцияһын ергә нимәлер түшәп, шулай сауҙа йәйелдерә. Был иһә санитар талаптарға ҡаршы килеп кенә ҡалмай, ҡалала ҡулланыусылар баҙары мәҙәниәте булмауына ла ишаралай. Шуға күрә Салауат Сәхи улы Эшҡыуарлыҡ, ҡулланыусылар баҙары һәм туризм идаралығына ошо йүнәлештә эш алып барырға, граждандар уңайлы шарттарҙа һатыу итә алған майҙандар булдырырға ҡушты. Шулай уҡ ул алда торған ауыл хужалығы йәрминкәләренә әҙерлекте башлау, республиканың муниципаль райондары менән килешеүҙәрҙе яңыртыу, йәрминкәләрҙе алыпһатарҙар сауҙаһы урынына әйләндермәү бурысын йөкмәтте.

## БАЛЛЫ ЗЕФИР



**Башҡорт аграр университеты технологтары умартасылыкта мөһим продукттарҙың береһе - сәскә һеркәһе менән зефир эшләү ысулын уйлап тапҡан.**

Йәмәғәт туҡланыуы технологияһы кафедраһында аңлатыуҙарынса, зефир майһыҙ, әммә бөтөнләй тиерлек файҙалы матдәләр булмаған "еңел" десерт булып һанала. "Уны умартасылыҡ продуктын ҡушыу юлы менән төҙәтергә мөмкин. Һеркәне ҡулланыр алдынан тарттырабыҙ һәм уны зефир массаһына әсе сиропты ҡушҡандан һуң индерәбеҙ. Шулай иткәндә, файҙалы матдәләр термик эшкәртеүгә бирешмәй", - тип аңлатты технологтар. Файҙалы зефир - Башҡорт дәүләт аграр университетының сәләмәт туҡланыу өлкәһендә берҙән-бер асышы түгел. Университетта шулай уҡ файҙалы тундырма уйлап сығарғандар. Хәҙер яңы уйлап табылған "Умартасылыҡ продукттары һәм һоло талҡаны өҫтәлгән ондан кондитер изделиелары" теркәлә. Яңы ризыҡтарҙы етештереүгә индереү өсөн техник документтар әҙерләнә, тип хәбәр иттеләр Башҡорт дәүләт аграр университетында.

ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ



**Сираттағы оператив кәңәшмә уҙған аҙнала баш ҡалала Өфө ҡала хакимиәте менән Рәсәй парктар һәм аттракциондар эшләү ассоциацияһы берлектә ойошторған күңел асыу индустрияһы белгестәренең 7-се халыҡ-ара осрашыуына йомғаҡ яһауҙан башланды.**

# "ҺАҠАЛЛЫ" ТЕМАЛАР ҘА БУЛА...

Был форум йыл һайын илдең төрлө төбәгенән ошо өлкәләге белгестәрҙе йыя. Мәҫәлән, быға тиклемгеләре Воронежда, Ярославлдә, Ҡаҙанда, Түбәнге Новгородта, Белгородта, Минскиҙа үтә. Быйыл Өфө иһә рекорд ҡуя - сарала Рәсәйҙән һәм БДБ илдәренән 160 кеше ҡатнаша. Сараның төп маҡсаты - тәжрибә уртаҡлашыу, заманса парктар һәм күңел асыу өлкәһендә актуаль булған проблемалар буйынса фекер алышыу, белгестәрҙе күңел асыу индустрияһының заманса технологиялары менән таныштырыу, төрлө ҡалалар һәм төбәктәрҙең туристик ҡеүәтенә иғтибар йәлеп итеү. "Өфө юҡҡа ғына һайланмаған, - тип белдерҙе ҡала хакимиәте башлығының беренсе урынбаҫары Салауат Сәхи улы. - Беҙҙә мәҙәни-күңел асыу инфраструктураһы үҫешкән һәм был өлкә илдең күпселек ҡалаларында ҙур ҡыҙыҡһыныу тыуҙыра". Шулай уҡ форум ҡаланың туристик ылыҡтырыу ҡеүәтенә импульс биреүе менән дә отошло, сөнки ҡатнашыусылар ошо тармаҡ буйынса ла эшмәкәрлек алып бара. Өфө иҡтисадында туризм индустрияһы айырым урын биләп тора һәм уны бөгөн илдең генә түгел, донъя баҙарына сығарыу - ҡаланың туриндустрия субъекттары алдында торған төп бурыстарҙың береһе.

"Һаҡаллы" төҙөлөш булған кеүек, бәктиһең, "һаҡаллы" темалар ҙа була икән! Кәңәшмәнән-кәңәшмәгә күсеп йөрөүсе көнүҙәк проблема булып сыҡты был юлдарҙы ремонтлау. Дөрөҫөрәге, ремонт эштәре түгел, ә граждандарҙың тәкәбберлеге. Ысынлап та, ниндәйҙер проблема килеп сыҡһа, шунда уҡ гәйеплене эҙләй башлайбыҙ, ахырҙа, барлыҡ бәләләрҙең башын ҡала хакимиәте башлығына алып барып бәйләйбеҙ. Шул уҡ ваҡытта "Сифатлы һәм хәүефһеҙ юлдар" программаһы буйынса ремонт эштәре алып барылыуы, уларҙың аныҡ ваҡытта ниндәй урам-юл участкаһында барғанлығы тураһында интерактив картала һәр ваҡыт мәғлүмәт яңыртылып тороуына ҡарамаҫтан, автомобилселәр араһында ремонтсыларҙың эшенә төкөрөп ҡараусылар ҙа юҡ түгел. Улар участкаhistogram яртылаш ҡына ябылыуынан файҙаланып, яңы һалынған асфальт ҡатып та өлгөрмәҫтән, бондарҙы емереп, иҫкәртеү мәғлүмәтенә иғтибар ҙа итмәй, ҡатып өлгөрмәгән ҡатлам өҫтөнән үтеп китергә лә күп һорамай. Һөҙөмтәлә колея барлыҡҡа килә, юлдың сифаты юғала, уның ҡулланыу ваҡыты ҡыҫҡара. Ҡайһы берәүҙәр иһә газондар, тротуарҙар аша ла үҙенә юл яра. Һөҙөмтәлә ҡала хакимиәте ремонт барған участкаларҙы тулыһынса ябырға һәм "тура юл ярыусы" аҡыллы баштарҙы контролләү өсөн ЮХҠДИ хеҙмәтен дә йәлеп итергә мәжбүр. "Юлдарҙы сифатлы итеп ремонтлау менән бер рәттән, тротуарҙарҙы һәм газондарҙы юҡҡа сығарыуға, бордюрҙарҙы емереүгә юл ҡуя алмайбыҙ", - тине Салауат Сәхи улы.

Яңы ғына йәйге каникулдар башланған кеүек ине, тиҙҙән белем усаҡтары ҡабат ишектәрен асасаҡ. Шуға ла ҡала хакимиәтендә мәғариф учреждениеларының яңы уҡыу йылына әҙерлеге көн үҙәгенә сығарыла башланы ла инде. Был юлы Ленин районындағы 1-се һәм Совет районындағы 44-се дөйөм белем биреү мәктәптәрендәге реконструкция эштәре барышы тураһында "Фирма СУ-10" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәт директоры Владислав Сидоркиндың доклады тыңланды. Сығыш яһаусы белдереүенсә, 1-се мәктәп бинаһының габариттарын һәм төп диуарҙарының торошон үҙгәртмәйенсә, һыйҙырыш күләме 775 кешегә еткерeләсәк. Әлеге ваҡытта реконструкция эштәре тамамланған, тышҡы инженер коммуникациялары һалынған, бина йөҙләнгән, фасад һәм территорияны төҙөкләндереү эштәре тормошҡа ашырыла.

44-се мәктәп тулыһынса яңынан төҙөлә һәм ике этапта алып барыла. Һүтелгән спортзал урынында яңы 3-сө уҡыу корпусы төҙөлә һәм ул 2-се корпус менән тоташтырыла, 2-се корпуста реконструкция эшләнә. Икенсе этапта һүтеп алынған 1-се корпус, спорт залы (ике ангар) һәм склад урынында 1-се һәм 4-се корпустар төҙөлә. Әле 1-се, 4-се корпустарҙа электр, сантехника, вентиляция үткәреү эштәре тамамланған. Салауат Сәхи улы 1-се мәктәп буйынса, әгәр бер ниндәй ҙә етешһеҙлектәр юҡ икән, объект ваҡытында, барлыҡ төҙөкләндереү эштәре тулыһынса тормошҡа ашырылғандан һуң тапшырылырға тейеш, тигән талап ҡуйҙы. Йәғни инженер селтәрҙәре ваҡытлыса сығанаҡтарға түгел, ә төп сығанаҡтарға тоташтырылырға тейеш. Ә инде 44-се мәктәп буйынса ул техник талаптарҙы белгестәр менән, ентекле эшләү талабын ҡуйҙы.

Артабан һүҙ алған БР-ҙың Мәғариф өлкәһендә контроль һәм күҙәтеү буйынса идаралыҡ начальнигы урынбаҫары Тимур Кәримов белем биреү учреждениеларына лицензия биреү мәсьәләләренә асыҡлыҡ индерҙе. Бының өсөн, тәү сиратта, эшмәкәрлекте барлыҡ критерийҙарға тап килтерергә кәрәк. Талаптар РФ Хөкүмәтенең 2013 йылдың 28 октябрендә ҡабул ителгән 966-сы ҡарарында билдәләнгән. 2018 йылдың беренсе яртыһында Өфө ҡалаһы муниципаль округында булған 11 ойошма лицензияларын ҡайтанан эшләүгә ғариза биргән.

Әлбиттә, кәңәшмәлә күтәрелгән барлыҡ мәсьәләләрҙе бер мәҡәләгә һыйҙырып бөтөп булмай, сөнки ҡала - бәләкәй дәүләт, тиһәк тә, уның хәл ителергә тейешле ҙур һәм мөһим көндәлек проблемалары бик күп. Беҙгә бары тик үҙебеҙҙең вайымһыҙлығыбыҙ менән уларҙы арттырмаҫҡа ине.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓ 11-13 сентябрҙә Башҡортостандың баш ҡалаһында йәштәр өсөн Карьера төҙөү көндәре ойошторолаcаҡ. Хөкүмәттең тейешле ҡарарына ярашлы, 11 сентябрҙә йәштәр мәшғүллеге буйынса беренсе "Уңышлы һәм мәшғүл булыу - модала" ("PROFУСПЕХ" форумы) республика форумы үтә. 12 һәм 13 сентябрҙә "PROFФЕСТ" республика фестивален уҙғарыу күҙаллана.

✓ Өфөлә 2018 йылдың декабрендә II Рәсәй-Ҡытай йәштәр уйындары үтә. Июль айында Өфөлә физик культураны һәм спортты үҫтереү мәсьәләләре буйынса Рәсәй-Ҡытай ғилми симпозиумы, шулай уҡ гуманитар хеҙмәттәшлек буйынса Рәсәй-Ҡытай комиссияһының ултырышы үтергә тейеш.

✓ Башҡортостан Республикаһының Дәүләт хеҙмәт инспекцияһында пенсия алды йәшендәге граждандар өсөн консультация пункты асыҡ. Белгестәргә 50 йәштән өлкән ҡатындар һәм 55-те үткән ирҙәр мөрәжәғәт итә ала. Консультация үҙәге Өфө ҡалаһы, Оло Граждан урамы буйынса 24-се йорттағы 331-се бүлмәлә урынлашҡан. Граждандарҙы дүшәмбенән кесе йомаға тиклем көндәҙгә сәғәт 2-нән 4-кә ҡәҙәр, йома иртәнге 10-дан 1-гә саҡлы ҡабул итәләр.

✓ Өфөлә күсемһеҙ милек баҙары үҫә башланы. "Фатирҙар донъяһы" тигән федераль портал мәғлүмәттәре буйынса, яңы төҙөлгән йорттарҙа торлаҡҡа хаҡтар йыл башынан - 8 процентҡа, "икенсел" секторҙа 4,3 процентҡа үҫкән. Хәҙер даими баҙарҙа фатирға уртаса хаҡ - 3,85 миллион һум, төҙөлөп еткән торлаҡ баҙарында - 3,61 миллион.

✓ Башҡортостанда ураҡ эштәре ужым шипкәнен йыйыуҙан башланды. Республиканың Ауыл хужалығы министрлығынан хәбәр итеүҙәренсә, был майлы культура бөгөнгә 622 гектарҙан (бөтә сәсеүлектең 11 проценты) йыйып алынған. Бер гектарҙан 9,5 центнер уңыш алғанда, 109 тонна шипкән орлоғо һуғып алынған.

✓ Өфөнөң "Салауат Юлаев" хоккей клубы КХЛ-дың 11-се миҙгелендә 62 уйын уҙғара. Ошо хаҡта 5 июлдә 2018/19 миҙгелгә уйындар календары менән таныштырыу сараһында билдәле булды. Тәүге өс уйынды "юлаевсылар" ҡунаҡта (2, 6 һәм 8 сентябрҙә) уҙғара, аҙаҡтан үҙендә "Торпедо" (12 сентябрҙә), "Аҡ Барс" (14 сентябрҙә), "Нефтехимик" (16 сентябрҙә), "Себер" (18 сентябрҙә) һәм "Барыҫ" (22 сентябрҙә) менән уйнай.

*✔ Геопарк туризмды үҫтереү, музейҙар менән танышыу, сувенирҙар етештереү, бал һатыу һөҙөмтәһендә өҫтәмә килем дә килтерәсәк. Кемдер гид булып эшләйәсәк, кемдер ҡунаҡтарҙы өйөндә ҡабул итәсәк.*



БАШ ҠАЛА ҠУНАҠТАРЫ



**Уҙған аҙнала Өфөлә ЮНЕСКО геопарктары глобаль селтәренең халыҡ-ара эксперты, Грунт һыуҙары ресурстарын баһалау халыҡ-ара үҙәге консультанты Сурен ГЕВИНЯН булып китте. Республика Башлығы Рөстәм Хәмитов менән осрашыуҙа фекер алышыу темаһы булып Рәсәйҙә беренселәрҙән булып ЮНЕСКО статусын алыуға дәғүә итеүсе Янғантау геопаркы, шулай уҡ Рәсәйҙең беренсе "алтын ҡаҙау"ы - ғалимдар "геологик ваҡытты" сағыштырған эталон киҫелешен булдырыу мәсьәләһе торҙо. Шулай уҡ ҡунаҡ журналистар менән дә осрашты һәм уларҙың һорауҙарына яуап бирҙе.**

# ЯНҒАНТАУҒА...

## яңы мөмкинлектәр асасаҡ статус

**➔ Янғантауға был статус нимә бирә?**

- Был - халыҡ-ара кимәлдә танылыу. Һеҙҙең турала бөтөн донъя беләсәк. Сит ил халҡының барыһы ла Башҡортостандың ҡайҙа урынлашыуын картанан күрһәтә, башҡорттарҙы Рәсәй, тарих, археология, геология, тәбиғәт менән бәйләй алмай. Был - комплекслы статус: беренсенән, әгәр был урын ЮНЕСКО тарафынан ҡабул ителгән икән, тимәк, ул хәүефһеҙ; икенсенән, был реклама; өсөнсөнән, 10 төп критерий бар. Әгәр үтһәгеҙ, тимәк, критерийҙар үтәлгән була.

**➔ Һеҙҙеңсә, Янғантау был статуска лайыҡмы?**

- Әгәр минең генә фекеремдә белергә теләһәгеҙ, мин, эйе, тиер инем. Әммә ҡарарҙы ЮНЕСКО-ға бер ниндәй ҡағылышы булмаған бойондороҡһоҙ комиссия ҡабул итә. Эксперттар киләсәк һәм билдәле параметрҙар буйынса тикшерәсәк. Һығымтаны донъя илдәре советына тапшырасаҡ, улар үҙ сиратында статус биреү-бирмәү тураһында ҡарар ҡабул итәсәк.

**➔ Башҡортостандың мөмкинлектәрен нисек баһалайһығыҙ?**

- Һеҙҙә башҡаларҙа булмаған нәмәләр: һоҡланғыс тәбиғәтегеҙ, иҫ киткес тарихығыҙ бар. Геологияғыҙ бик ҡыҙыҡлы. Иң мөһиме - халыҡтың ғөрөф-ғәҙәттәрен һаҡлаған яҡшы кешеләрегеҙ бар. Фәнни мәктәбегеҙ үҫешә. Геопарк туризмды үҫтереү, музейҙар менән танышыу, сувенирҙар етештереү, бал һатыу һөҙөмтәһендә өҫтәмә килем дә килтерәсәк. Кемдер гид булып эшләйәсәк, кемдер ҡунаҡтарҙы өйөндә ҡабул итәсәк, кемдер кейем бесептегәсәк, белем бирәсәк, туристар һатып аласаҡ әйберҙәрҙе эшләйәсәк. Шулай уҡ яңы статус халыҡ-ара кимәлдәге сараларҙы үткәреүҙе күпкә еңелләштерәсәк.

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

# ПАРКОВКАЛАР... ТҮЛӘҮЛЕ




**Баш ҡалала түләүле парковка урындары булдырыу буйынса проект эшләнә. Муниципалитет проектты тормошҡа ашырыуҙа концессия килешеүенә мөрәжәғәттәр ҡабул итә.**

Яңы система автомобиль хужаларына нимә бирәсәк? Тәү сиратта, ул ҡаланың үҙәген бушатасаҡ, йәғни түләүле парковка урындары барлыҡҡа килһә, һәр граждани унда буш урынға иҫәп тота ала. Бындай система Рәсәйҙең 21 ҡалаһында ҡулланыла һәм уларҙың тәжрибәһе күрһәтеүенсә, парковка тәьҫире радиусында аварияләр күләме 25 процентҡа кәмей.

Йәйәүлеләр был проекттан нимәгә өмөт итә ала? Йәмәғәт транспортының ағымы шәбәйеүе һәм пассажирҙарҙың транспортҡа инеү-сығыу зонаһы бушауы күҙаллана. Йәйәүлеләр бер ҡаршылыҡһыҙ йөрөйәүлеләр зонаһы һәм үткәүелдәр менән ҡуллана аласаҡ. Параллель рәүештә муниципалитет ҡаланың заманса, уңайлы һәм хәүефһеҙ транспорт каркасын әҙерләү һәм булдырыу эшмәкәрлеген алып бара.

25 йыл дауамында тормошҡа ашырыласаҡ проекттың дөйөм хаҡы 1 миллиард 186 миллион һум тәшкил итә. Әлеге ваҡытта парковка киңлегенең администраторын - майҙансыҡты йыһазландырыу, паркоматтар ҡуйыу, парковка хеҙмәтен ойоштороу эштәрен үҙенә алған компанияны һайлау этабы бара. Ентекле мәғлүмәт түләүле парковка урындарын ойоштороу буйынса проектты тормошҡа ашырырға әҙер оператор асыҡланғас буласаҡ. Проектты инвестор иҫәбенә тормошҡа ашырыу күҙаллана.

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

## ҺАЛЫМ ДА АРТА...

**Дәүләт Думаһы 2019 йылдың 1 ғинуарынан башлап өҫтәлгән хаҡҡа һалымды (НДС) 18-ҙән 20 процентҡа тиклем күтәреү тураһында закон проектын икенсе уҡыуҙа ҡабул итте, тип хәбәр итә федераль киң мәғлүмәт саралары.**

Хөкүмәт уны Дәүләт Думаһына 16 июндә индерҙе, беренсе уҡыу 3 июлдә үтте, 16 июлдә закон проектын Дәүләт Думаһының бюджет һәм һалым буйынса комитеты икенсе уҡыуҙа хупланы. Закон проекты менән шулай уҡ мотлаҡ пенсия страховкаһына иғәнәләр тарифы билдәләнә. Хәҙер законда регрессив шкала беркетелгән - тариф эш хаҡына бәйле. Ул 85 мең һумдан түбән булһа, тариф - 22 процент, юғары икән - иғәнә артыуҙан 10 процент ставкаһы буйынса түләнә. Закон проекты нигеҙен башҡарған Финанс министрлығы иҫәптәре буйынса, НДС-ты 2 процентҡа арттырыу бюджетҡа киләсәктә артабанғы үҫеш менән йылына өҫтәмә 620 миллиард һум бирәсәк. Өҫтәлгән хаҡҡа һалымды 20 процентҡа тиклем арттырған хәлдә лә инфляция 2019 йылда 4-4,5 процент кимәлендә ҡаласаҡ, тип иҫәпләй Финанс министрлығы.

## АТҠАҘАНҒАН ЖУРНАЛИСТ

**Рәсәй Президенты Владимир Путин "Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған журналисы" һәм "Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған элемтә һәм мәғлүмәт хеҙмәткәре" тигән ике яңы маҡтаулы исем булдырҙы.**

"Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған журналисы" тигән маҡтаулы исем йөмғиәттә илебеҙ журналистикаһы абруйын күтәргән; граждандарҙа социаль яуаплылыҡ һәм граждандыҡ фекерен булдырған; Рәсәй Федерацияһының һәм башҡа илдәрҙең ижтимағи, сәйәси, мәҙәни тормошон, эске һәм тышҡы сәйәси проблемаларҙы, халыҡ-ара мәсьәләләрҙе объектив яҡтыртҡан; Рәсәй халыҡтары өсөн традицион рухи-әхлаҡи ҡиммәттәрҙе һаҡлаған һәм үҫтергән; журналистикала автор стилен булдырған; Рәсәйҙең мәҙәни һәм тарихи мираҫын һаҡлаған һәм популярлаштырған, шулай уҡ уҡ рус телен һәм Рәсәй Федерацияһы халыҡтарының телдәрен үҫтергән һәм һаҡлаған; Рәсәй киң мәғлүмәт саралары өсөн квалификациялы кадрҙар әҙерләгән өсөн киң мәғлүмәт саралары журналистарына һәм мөхәррирҙәренә бирелә. Кремль сайтында аңлатыуҙарынса, "Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған элемтә һәм мәғлүмәт хеҙмәткәре" тигән маҡтаулы исем, ҡағиҙә буларaҡ, һөнәри эшмәкәрлек алып барғандан һуң 20 йыл үткәс наградаға тәҡдим ителгән кешенең федераль дәүләт власы йәки Рәсәй Федерацияһы субъекттарының дәүләт власы органдарының һәм Рәсәй Журналистар союзының тармаҡ наградалары булғанда бирелә. "Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған элемтә һәм мәғлүмәт хеҙмәткәре" тигән маҡтаулы исем менән шәхси ҡаҙаныштары өсөн юғары профессиональ элемтә, киң мәғлүмәт саралары һәм киң коммуникациялар хеҙмәткәрҙәре билдәләнә.

Х А Л Ы Ҡ   Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, анығ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Иммунитет өсөн

❖ Иртән ғәҙәти сәй урынына корица ҡушылған сәй эсегеҙ. Ул организмды таҙарта һәм иммунитетты нығыта. Ҡайнар һыуға 1 киҫәк лимон һәм бер семтем корица һалырға, һыуы бер аҙ һыуынғас 1 ҡалаҡ бал болғатып эсәбеҙ.

❖ 2 лимондың тышын ҡырғыстан ҡырырға, 200 грамм шәкәр ҡушып болғатырға. 4 лимондың һутын һығырға, шәкәрҙе ҡушып, болғатырға. 4 йомортҡаны вилка менән күпертмәй генә туҡырға, һутҡа өҫтәргә һәм ярты сәғәтҡә ултыртып торорға. Һөҙөргә һәм кәстрүлгә ҡойорға, 40 грамм аҡ май өҫтәргә, талғын утта 3-5 минут ҡуйырғансы ҡайнатырға. Һыуытырға һәм һыуытҡысҡа ҡуйырға. Лимондың ҡабығында С витамины күп, ул капиллярҙарҙың торошон яҡшырта. Лимон бауыр эшен көйләй, йомортҡала холин бар, ул шулай уҡ бауырға файҙалы. Аҡ майҙа А витамины күп. Был лимонлы майҙы вирустар әүҙемләшкән мәлдә ҡулланыу тағы ла яҡшы.

### Ҡара торма

❖ Юғары ҡан баҫымынан: 1 стакан ҡыҙыл сөгөлдөр һутына 1 стакан ҡара торма һуты ҡушырға, 200-өшәр грамм бал, мүк еләге һуты өҫтәргә. Ашарҙан 1 сәғәт алда 1-әр ҡалаҡ эсергә.

❖ Бөйөр сирҙәренән: ҡара торма һутын бал менән ҡушып болғатып, көнөнә 3 тапҡыр 2-шәр ҡалаҡ эсергә.

❖ Һалҡын тейгәндә: ҡара торма һутын бал менән ҡушып, бөйөр сирен дауалағандағы схеманы ҡулланып эсергә. Шулай уҡ ҡара торманың уртаһын алып, уға шәкәр йәки бал тултырып, бүленеп сыҡҡан һутты 1-әр ҡалаҡлап һәр сәғәт һайын эсергә була.

### Хәтерҙе нығытыу

❖ Ҡан тамырҙарын таҙартыу һәм хәтерҙе нығытыу өсөн дауа: 6 лимон һуты, 1 баш иҙелгән һарымһаҡты ҡушып болғатырға ла, марля салфетка менән ҡаплап, 2 көнгә ҡараңғы урынға ҡуйырға. 1 балғалаҡ төнәтмәне 1 стакан һыуға болғап, иртән ас ҡарынға эсергә.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

✓ *Кондуктор үҙенең ихласлығы, ягымлы тауышы менән үҙенә ҡарата ыңғай мөнәсәбәт тыуҙырып, ошо ҡыҫҡа ваҡыт арауығына булһа ла, бер-берененә сит булған кешеләрҙе бер ғаиләләй ойоштороҙо һәм туғандарса мөхит булдырҙы.*



*ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...*



# БӘЙҒӘМБӘРҘӘР

## Әйүптең тарихы

Әйүп бер ваҡытта ла инаныуын юғалтмай, ләкин һәр ваҡыт Аллаға таяна. Аллаға һәм Уның вәғәҙәләренә таянған Алла бәйғәмбәренә хас булғанса, иненә төшкән һынауҙарҙы лайыҡлы кисереүе менән өлгө күрһәтеүсе ысын мәғәнәһендә бөйөк бәйғәмбәр була.

Кешеләр уның ауырыуы йөгор тип, ҡатынын эшкә алмағандар. Ә ҡатыны тәғәм ризыҡ табыр өсөн өйҙәге бөтөн затлы әйберҙәрҙе һатып бөтә. Һатыр нәмә ҡалмағас, тәүҙә бер толомон, һуңынан икенсе толомон да һатырға мәжбүр була. Әйүп, ҡатыны ҡайҙан аҡса табып туләүен әйтмәйенсә, ризыҡты ҡапмаҫҡа ант иткәс, тегеһе яулығын сисә. Уның матур толомдарын ҡырҡыуына бәйғәмбәр ҡайғыра һәм: "Эй, Хоҙайым! Башыма төшкән бәлә мине сикһеҙ интектерҙе, һин миһырбанлының да миһырбанлыһы", - тип Уның мәрхәмәтле булыуын үтенә. Ә һауыҡҡас, толомдарын ҡырҡып һатҡаны өсөн ҡатынына сыбырҡы менән 100 тапҡыр һуғасаҡмын, тип ант итә. Ләкин һауыҡҡас түҙемле һәм тоғро ҡатынына һуҡҡыһы килмәй. Тик анты үтәлһен өсөн, Алла сыбыртҡы урынына йөҙ үлән һабағы менән ауырттырмай ғына берҙе һуғып алырға ҡуша. Шулай итеп, Аллаһы Тәғәлә бәлә килгәндә ҙур түҙемлелек күрһәткән, Уға ғына ышанған, Уға ғына һыйынған иң тоғро, һоҡланғыс ҡоло Әйүптең сабыр, динсел ҡатынын ҡотҡара. Ибн Асакир әйткәнсә, Алла Әйүпте Хөкөм көнөндә донъялыҡта ғазап сигеүселәргә өлгө итеп ҡуя.

## Юныс бәйғәмбәр тарихы

Ҡөрьәндә аңлатыусылар, халҡын Аллаға ышанырға саҡырһын өсөн, Юныс Ниневия ҡалаһына ебәрелгән, тип раҫлай. Ләкин Юныс күпме генә тырышмаһын, ҡала кешеләре уның саҡырыуҙарын инҡар итеп, күп аллалыҡҡа, таш һындарға табыныуын дауам иткән.

Юныс уларҙы ташлап китергә ҡарар итә һәм Аллаһы Тәғәләгә ос көн үткәс, уларға ҡәһәрендә төшөр, тип ялбара. Юныс кешеләрҙең үҙ һүҙләнеп, бер Аллаға ышанырға теләмәүҙәренә ярһып, ҡаланы ташлап китергә йыйынғас, халыҡ бына-бына өҫтәренә Аллаһы Тәғәләнең ҡәһәре яуасағын аңлай һәм Юныстың саҡырыуҙарын һанға һуҡмауҙарына бик үкенә. Улар бөтөн ғаиләһен, мал-тыуарын алып, сүллеккә китә. Халыҡ илай-илай, үҙҙәрен түбәнселеккә төшөрөп, Алланың ярлыҡауын үтенеп ялбара. Бөтөн ир-ат, ҡатын-ҡыҙ һәм балалар Аллаһы Тәғәләнең үҙҙәренә ҡарата мәрхәмәтле булыуын һорап һәм Миһырбанлы, Бөйөк Алла уларға яза ебәрмәй. Алла (Уға дан!): "Әгәр һәр ауыл халҡы ла дин тотһа, иманлы булыу уларға файҙа ғына килтерер ине. Ләкин беҙ хурлыҡтан, ыҙа сигеүҙән ҡотҡарған һәм Ҡайтанан тыуыу көнөнә тиклем донъялыҡта бөтөн рәхәтлектәр менән файҙаланып йәшәргә мөмкинлек биргән Юныстың халҡынан башҡалар дингә ышанмаһы", - ти.

Юныс карапҡа ултырып, алыҫ юлға сыға. Ауыр йөк тейәлгән карап көслө дауылға юлыға. Юлсылар, батмаһын өсөн карапты йөгөн еңеләйтеү маҡсатында йәрәбә һалып, кем отола - шуны диңгеҙгә ташларға уйлай. Йәрәбә һалғанда Алланың ҡушыуы менән Юныс отола. Алла: "Юныс беҙҙең саҡырыуҙарҙы еткерер өсөн кешеләр янына оҙатылған илселәрҙең береһе ине. Халҡын Хоҙайҙың рөхсәтенән тыш ташлап китте. Дауылда ул ултырған карапҡа хәүеф янағас, йәрәбә һалғанда отолған Юнысты, шул замандағы йолаға ярашлы, диңгеҙгә ташлағас, ҙур кит йотто. Ул лайыҡлы рәүештә шелтә һәм яза алды", - ти.

Юнысты йотҡас, Аллаһы Тәғәләнең ҡушыуы менән кит уны ашамай, донъялағы бөтөн диңгеҙҙәр буйлап йөҙөп йөрөй. Киттың ашҡаҙанында ятҡан Юныс үҙенен тере булыуын аңлағас: "Эй, Аллам! Мин Һинә шундай урындан табынам, быға тиклем бер кем дә былдай ерҙән табынмағандыр. Һинән башҡа табыныр башҡа Алла юҡ. Дан Һиңә! Һин барыһынан да саф һәм өҫтөн. Һинең ихтыярыңа ҡаршы сығып, хаҡһыҙлыҡ ҡылыуымды танамым" тип, көнө-төнө доға ҡыла. Алланың ҡөҙрәте киң, Ул миһырбанлы, мәрхәмәтле.

**(Дауамы бар).**

*ӘЙҘӘГЕҘ...*

# ОСРАШАЙЫҠ!

## Ҡырҡ йылдан һуң да

**Мәктәп, юғары уҡыу йорттарында уҙған мәлдәр, бергә уҡығандар ғүмерлеккә иҫтә ҡала. Йәшлек, бөрөләге хыялдар, мәңгелектәй тойолған алдағы йылдарға бәйле ҡоролған уй-ниәттәр... Был тойғоларҙы йөрәк түрендә йөрөтөүселәр араһында рәсмиләштерелмәгән, әммә киң таралған бер бик күркәм йола бар - ваҡыты-ваҡыты менән осрашып алыу, хәтирәләрҙе яңыртыу, йәшлеккә ҡайтып ураҡ. Ә иң мөһиме - һинең уҙаллы тормошҡа тәүге аҙымдар яһауыңа шаһит булған, һине яҡшы белгәндәр, яҡын кешеләреңә әйләнгәндәр алдында һөнәреңә, эшеңә бәйле хисап тотоу.**

Башҡорт дәүләт университетының (ул замандарҙа Башҡортостанда университет берәү генә ине!) филология факультеты башҡорт-урыҫ бүлеген 1978 йыл тамамлаусылар (ҡырҡ йылдан һуң!) осрашты быйыл. Төркөмдәштәр Рәмилә Йомағужина-Буләкованың ҡала ситендәге егәрле хужаларса ҡаралған оло баҡсалы күрмәлекле йортона йыйылды. Хужабикә - республикана билдәле шәхес. Филологиянан тыш, БАГСУ-ҙа юридик белем алғас, баш белгес буларак, Дыуан район башҡарма комитетында, республиканың Конституция судында ла эшләне, юстиция министрлығының ЗАГС идараһығын да етәкләне. Ғөмүмән, бик емешле булды был сығарылыш (осрашыуға килгәндәрҙе генә барлап үтәйек). Әлшәй район хакимиәте башлығы урынбаҫары булып әлегәсә эшләп йөрөгән Зәкуан Зөфәр улы Әхмәтовты кем белмәй! Йәиһә, туҡһанынсы йылдарҙа, суверенитет даулашып, уны ныҡытыуҙа, үткер ҡәләмле публицист буларак, иң алдыңғылар рәтендәге Зәйтүнә Хановаңы ал!..

Шулай ҙа күпселек, беҙҙең милләткә хас булғанса, баш баҫып, сабыр ғына үҙенең төп бурысын атҡарған икән: ғаилә усағын һаҡлаған, балалар үҫтергән, туған телебеҙгә йәш быуында һөйөү тәрбиәләгән. Роза Илһамова-Абдуллина, мәҫәлән, ун ете йыл әүәл тормош иптәшен юғалтыуына ҡарамаҫтан, өс балаһын да аяҡҡа баҫтыра, ғүмере буйы башҡорт телен уҡыта, шәжәрәһен юллап, тыуған ауылының тарихын яҙа, китап сығара. Буйға иң ыҡсым Рафиҡова Лилиәбеҙ уҡытыусы ла, директор ҙа була (өлкән ҡыҙының, кейәүе менән аварияға осрап, фажиғәгә тарыуҙары тетрәндерҙе - мәңгелек урындары йәннәттә булһын. Лилиә бөгөн, етемлектәрен тоймаҫлыҡ итеп, ейән-ейәнсәрен ҡарай). Лида Нәбиева, Алһыу Йосопова, Фәнүзә Арыҫланова, Суфия Абдуллина уҡытыусы ла, класс етәксеһе лә, конкурстарҙа ҡатнашып, йөҙәр меңлек грант яулаусылар ҙа. Әминә Уразаева иһә район-республика ваҡытлы матбуғаты редакцияларында алыштырғыһыҙ хеҙмәткәр. Үҙҙәре генә түгел, улар менән башҡалар ҙа ғорурланырлыҡ...

Милләтте тап шундай шәхестәр алдыңғы милләт итешә. Осрашыуға килә алмағандар ҙа күпселек осраҡта оҡшаш яҙмышлы. Ғүмерҙең үтелгән тиклеме еңелдән булмаған, заяға ла уҙмаған. Башлыса, илебеҙ-көнөбөҙ тип, тормош уртаһында ҡайнашҡанбыҙ бит, һабаҡташтарым. Артабан да йөҙөбөҙ яҡты, дауамлы юлыбыҙ маҡтаулы булһын!

**Фәнил КҮЗБӘКОВ.**

*ӘЙҘӘГЕҘ...*

# ИЗГЕЛЕК ТАРАТАЙЫҠ!

**Ҡала кешеһенең иң яратмағаны, моғайын, йәмәғәт транспортылыр. Ундағы пассажирҙарҙы мин әнәле, утлы йомғаҡтарға оҡшатам. Кешеләр бер-береһенә саҡ ҡына ҡағылһа, улар араһында осҡондар осоп китә. Бер аҙҙан инде бөтөн автобус утлы шарға әүерелә. Бер маршрутта милләттәр араһында бәрелешеүҙең шаһиты ла, ике наркомандың ыҙғышын да күрергә тура килде. Ә бер иҫеректе халыҡ автобустан этеп төшөргәс, тегеһенең аяғы ишеккә ҡыҫылып, бар тауышҡа ҡысҡырыуын һис онотторлоҡ түгел.**

Бер көн иртән 110-сы маршрут автобусына ултырырға тура килде. Тиҙ генә тәҙрә янындағы буш урынға ҡунаҡлай һалдым. Кондуктор ҡаҡса ғына, мөләйем йөҙлө, етмеште уҙған мосолман әбейе салон буйлап йүгереп йөрөп билет һата. Һәр бер кешегә ягымлы итеп "ҡыҙым", "улым", тип өндәшә. Матур һүҙҙәр менән иркәләп, һәр кешегә иғтибар бүлә. Мин уны ауылда йәшәүсе изге күңелле өләсәй һымаҡ күрҙем. Иң аптыратҡаны - уның кешеләргә ышаныслы булды. Ҡулындағы бер ус аҡсаны беренсе тапҡыр күргән кешеһенә тоттороп, сдачаны үҙенә һанап алырға, йәки билетты йыртып алырға, кәрәкле сумманы уның ҙур эш сумкаһына һалырға ҡуша. Әгәр ҙә пассажирҙың аҡсаһы эре булһа, ул уны ваҡлатыуҙы һорап, бөтөн салонға мөрәжәғәт итә. Халыҡ уны, нисектер, сәйерһенеп ҡабул итә, кемдер мыйыҡ аҫтынан йылмая, кемдер иҫәр, тип уйлай. Моғайын, был әбей аҡсаһы етмәгәс, аптырап, эшкә сыҡҡандыр ҙа, әлегә яңы эшенә төшөнөп етә алмай йонсойҙор, тигән фекергә килдем һәм йәлләп ҡуйҙым. Ошо рәүешле эшләһә, уның эш хаҡы елкәһенә сыҡҡан аҡсаны ҡаплатырға етерме икән?

Сәйер кондукторға һәр кем үҙенсә ҡараш белгертте: йә уның кеүек ягымлы һөйләште, йә ҡойолған аҡсаларын алып биреште, билетын йыртышты. Ә бер ҡатын, күрәһең, былдай мөнәсәбәттә ҡурҡыныс тойҙо: инәйгә буштан-бушҡа асыуланып, алама һүҙҙәр әйтеп әрепләште. Кондуктор был юлы ла үҙ асылында ҡалды: "Асыуланма, ҡыҙым, эшем шундай бит. Ҡуй, бушҡа кәйефеңде боҙма, алда көн башланмаған. Әйҙә, арып киткәнһеңдер", - тип, ғауғасыл ҡатынды үҙенең урынына ултыртып ҡуйҙы. Автобустың эсе йәмләнгәндән-йәмләнде, кешеләр иртә менән бер-береһенә йылмайып ҡараны, юл һорағандарға ихласлап, бер-береһен уҙып аңлата башланы. Кондуктор әбей бөтәһен дә берләштереп, дуҫлаштырҙы ла ҡуйҙы. Кешеләр араһында йылы хистәр, үҙ-ара бәйләнеш хасил булды. Кондуктор үҙенең ихласлығы, иғтибары, ягымлы тауышы менән үҙенә ҡарата ыңғай мөнәсәбәт тыуҙырып, ошо ҡыҫҡа ваҡыт арауығына булһа ла, бер-береһенә сит булған, төрлө яҙмышлы, төрлө холоҡло кешеләрҙе бер ғаиләләй ойоштороҙо һәм туғандарса мөхит булдырҙы.

Мин һаман да әбейҙең елкәһенә сығасаҡ аҡса өсөн ҡайғырып ултырғанда, ҡапыл әбейҙең үҙе йәшендәге ҡатын менән һөйләшеүе ҡолаҡҡа салынды: "Ни тиһәң, дә эш ауыр инде ул. Ә элекке ваҡытта бынан да ҡыйынраҡ була торғайны. Кондуктор булып 40 йылдан ашыу эшләп ташланым, ауырлығы ла уның хәҙер рәхәт кеүек тойола", - тип, йылмая ине ул. Бына һиңә кәрәк булһа! Мин уның өсөн борсолоп ултырам, ә ул профессионал, үҙ эшенең оҫтаһы булып сыҡты. Ярты быуатҡа яҡын ошондай ауыр эштә халыҡ менән эшләп, нисек ялыҡмаған да, нисек кешеләрҙән күңеле ҡайтмаған? Күрәһең, ул үҙен ошо эштә бик бәхетле тоя, эшен дә ярата.

Үҙ туҡталышыма килеп еткәс, автобустан тәүге тапҡыр төшкөм килмәне. Сихырланған кеүек, бер талай һоҡланыулы ҡараштарымды кондукторҙан ала алмай йонсоном. Ишек тупһаһына баҫҡас, уның исемен һорап, рәхмәт әйтәм, тип уктаддым. Уның пассажир егеттең арҡаһынан һөйә-һөйә, билет һатҡанын күреп, ҡыйманым. Бүлдергем килмәне.

Автобустан төштөм дә, эшемә йүнәлдем. Күңелдә шундай еңеллек, рәхәтлек тойҙом. Мин, ысынлап та, шундай мөғжизәле автобуста килдемме, әллә көндә ҡабатланған ығы-зығынан арыған мейем хыялда йөрөгән уйҙырмаһын бүләк иттеме? Бәлки, бөгөн генә үсал кондуктор изге күңелле инәйгә әйләнгәндер? Бәлки, күктән ебәрелгән Тылсым көсө кешеләр ошондай итәғәтле, яҡшы мөғәмәле булып, бүтәндәрҙе яратһа, йәшәүҙе ни тиклем яҡты, күңелле, еңел буласаҡ икәнен көндәлек тормошта иң ябай миҫал аша күрһәтергә теләйҙер? Быны бит ишара: иң тәүҙә күңелеңде таҙала, тирәйүнгә изгелек орлоктары сәс, насар уйҙарыңдан ҡотол!

Әйҙәгеҙ, һәр иртәне ошо кондуктор кеүек, яҡшы кәйеф, йылы тойғолар, тулайым бер көнгә етерлек көсдарман бүләк итеүсе серле билеттар таратыуҙан башлайыҡ, ҡәҙерле замандаштарым!

**Ләйсән ИСҠУЖИНА.**

КҮҢЕЛ МӨҺӨРӨ

# ҺУҢҒЫ СӘСӘНДӘРҘЕҢ БЕРЕҺЕ



**Ғафури районында тыуып үҫеп, башҡорт әҙәбиәтендә яҡты эҙ ҡалдырған, ырыуҙаштарын данлаған яҙыусылар бихисап. Урындағы халыҡ араһында ихтирам ҡаҙанған сәсәндәр ҙә эҙ булмаған әүәл: Вәлиулла Ҡоломбәтов, Сәйфулла Сәғитов, Жәлил Кейекбаев кеүек сәсәндәр инде һүҙ сәнғәтен юғары кимәлгә еткереүселәр. Телгә алынған тәүгә сәсән һәм арҙаҡлы ғалимтелсе тураһында күптәр белә. Ә кем һуң ул Сәйфулла Сәғитов?**

Уның тураһында "Башҡорт энциклопедияһы"нда шундай юлдар бар: "Сәғитов Сәйфулла Төхвәтулла улы 1893 йылда Өфө губернаһы Стәрлетамаҡ өйәҙенең Оло Үтәш ауылында тыуа. 1957 йылда мәрхүм була. Шағир-импровизатор. 1907-1910 йылдарҙа Һарт-Наурыз ауылы мәҙрәсәһендә (хәҙер Ҡырмыҫҡалы районы) ғилем эстәй, артабан тыуған ауылында мөғәллимлек итә. 1914 йылда ҡаты сирләп китеп, күҙҙән яҙа. Артабанғы йылдарҙа ижад эше менән мәшғүл була. Ул "Башҡорт халыҡ ижады" китабына индерелгән ике мулланы һәмәйткән наҙан крәҫтиән тураһындағы "Өс аусы" әкиәте, тәкәбберлек һәм баҫалҡылыҡ хаҡындағы "Суйын сүлмәк менән балсыҡ сүлмәк" мәҫәле, "Совет баҡсаһы", "Колхоз" кеүек шиғырҙар авторы. С. Сәғитовтың әҫәрҙәре Рәсәй Фәндәр академияһының Ғилми архивында һаҡлана".

Ғалим-фольклорсы Салауат Галин "Башҡорт халҡының ауыҙ-тел ижады" китабында Сәйфулла сәсәндең ижады хаҡында ла бер ни тиклем һүҙ алып бара. Юғарыла телгә алынған энциклопедияға мәғлүмәтте нәҡ ул әҙерләп биргән.

Сәйфулланың атай-инәйе бик иртә донъя ҡуя. Етемлек ыҙаларын күп кисергән, Хатип хәҙрәт Халиҡовтың мәҙрәсәһендә шәкерттәргә белем биргән һәләтле егеткә яҙмыш тағы ауыр һынау ебәрә - 21 йәшендә тома һуҡыр ҡала. Әммә Сәйфулла төшөнкөлөккә бирелмәй, киреһенсә, сәмләнеп ижад эшенә тотона. Бәләкәйҙән әкиәттәр уйлап сығарыуға әүәҫ булған зирәк егет тора-бара шиғырҙар тыуҙыра башлай. Әҫәрҙәрен яҡын-тирәләге ауыл халҡы алдында ихлас яттан һөйләр булған. Бөйөк Аҡмулла кеүек, ул да бына шулай ырыуҙаштары күңеленә аң-ғилем, мәғрифәт орлоҡтары сәсеп йөрөгән.

Еҙем-Ҡаран урта мәктәбенең элекке уҡытыусыһы, мәғариф ветераны Флүрә Хәмит ҡыҙы Хәлилова хәтирәләренән: "Мин Оло Үтәштә йәшәгән Сәйфулла сәсәнде яҡшы хәтерләйем. Ул беҙҙең ауылға гел килеп йөрөй торғайны. Миңә ул саҡта 9-10 йәш самаһы ине. Бөгөнгөләй күҙ алдымда: һуҡыр булыуға ҡарамаҫтан, бөхтә кейенгән, таяҡ тотҡан ҡара күҙлекле, мыҡты кәүҙәле сәсән бабай өй беренсә шиғыр һөйләп йөрөр ине. Үҙе менән Мәрфуға исемле ейәнсәрен дә эйәртеп йөрөтә торғайны. Кемдәрҙер ҡайғы-хәсрәт кисерһә, уларҙың үтенесе буйынса сәсән бабай шунда уҡ бәйет сығарыр ине".

Өфө федераль тикшеренеү үҙәгенең ғилми архивы мөдире Луиза Ғиниәтуллина әйтеүенсә, сәсәндең мирасы Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында 3-сө фондтың 2-се яҙмаһында урын алған. Уның ярҙамында беҙгә Сәйфулла Сәғитовтың бер шәлкем әҫәре һәм ҡайһы бер документтар менән танышып сығырға насип булды. 1949 йылдың 30 сентябрендә төҙөлгән актта яҙылыуынса, ул саҡтағы Ә. Усманов етәкселек иткән Тел, әҙәбиәт һәм тарих ғилми-тикшеренеү институтының ғилми хеҙмәткәрҙәре Ә.Д. Еникеева менән Р.Н. Тереғолова Ғафури районының Оло Үтәш ауылында фольклор экспедицияһында булған ваҡытта, импровизатор Сәйфулла Сәғитов менән осрашып, сәсән үҙе ижад иткән әҫәрҙәрҙе һәм халыҡ ижады өлгөләрен аҡ ҡағыҙға теркәп ҡуя.

Һөҙөмтәлә ғалим-фольклорсылар тарафынан сәсәндән 43 әҫәр, шул иҫәптән 24 шиғыр, өс йыр, ике мәҫәл, 6 бәйет, өс мөнәжәт, ике шиғри әкиәт һәм 23 битлек бер прозаик әкиәт яҙып алына (уйлап ҡарағыҙ: ошо хәтлем ҙур күләмле әҫәрҙәрҙе нисек иҫтә тотмаҡ кәрәк!). Сәйфулла сәсән барлыҡ әҫәрҙәрен дә институт ҡарамағына тапшырырға ризалыҡ бирә. Әҙәби мираҫты ҡағыҙ битенә төшөрөүселәр шундай яҙыу теркәгән: "Сәйфулла Төхвәтулла улы Сәғитов 1893 йылда тыуған (тик тыуған көнөн ни өсөндөр теркәмәгәндәр - **Авт.**), Крупская исемендәге колхоз члены. Уҡый-яҙа белһә лә, һуҡырлығы сәбәпле, уҡый ҙа, яҙа ла алмай. Әҫәрҙәр 1949 йылдың 29 сентябрендә яҙып алынды".

Ҡыҙғаныҫҡа күрә, Сәйфулла сәсәндең күп ижад емеше яҙып алынмаған, уларҙың бер өлөшө генә һаҡланып ҡалған. Шағир-импровизаторҙың барлыҡ әҫәрҙәре лә тиерлек совет ысынбарлығын яҡтырта. Мәҫәлән, "Азатлыҡ" шиғырында ул Октябрь түңкәрелешенең иҙелеп йәшәгән ябай халыҡ өсөн "азатлыҡ таңы" булыуын тасуир итә. Сәсән "Октябрҙең донъяны яңыса ҡоророна" ышана. Ошо юҫыҡта ижад ителгән "Колхоз" шиғырында автор тракторҙар, комбайндар менән тулған ауылдың яңы тормошона дан йырлай. "Совет баҡсаһы" шиғырында ла яңы ҡоролоштоң элекке дәүер менән сағыштырғанда күпкә өҫтөнөрәк икәнен күрһәтә.

Сәйфулла сәсән мәҫәлдәр ижад итеүгә лә оҫта була. Юғарыла телгә алынған "Суйын сүлмәк менән балсыҡ сүлмәк" мәҫәлендә ике ҡараш хаҡында һүҙ бара. Ике көршәк дуҫлашып алғас, арбаға менеп ултырып, баҙарға китә. Ләкин тейешле ергә имен генә барып етә алмайҙар: балсыҡ көршәк соҡорсаҡлы юлда сатнап ватыла. Һығымта шул: тормошта ла, юлда ла үҙеңишеләрҙә һайларға кәрәк.

БАССР-ҙың халыҡ сәсәне Фәррәх Дәүләтшинға (1887-1956) арнап яҙылған шиғырҙан күренеүенсә, иртә күҙҙән яҙып, бер уҡ яҙмышҡа дусар булған, бер-береһе менән бер ҡасан да күрешмәгән ике шағир-импровизаторҙы рухи яҡынлыҡ, тормошто яратыу һәм нәфис һүҙгә һөйөү берләштерә:

*Әй, һәйкәлә Фәррәх иптәш,*
*мин һиңә сәләм яҙам,*
*Сәләм һуңында танышып мин дә*
*үҙ хәлем яҙам.*
*Газеталар аша ғына мин*
*һинең барҙы беләм,*
*Мин дә шулай гәрип булғас,*
*мин һинең зарҙы беләм.*
*Ҡай сағында мин дә шулай*
*моңланып йырлап ҡуям,*
*Яҡты донъя күрмәгәнгә зарланып*
*илап ҡуям...*

Бөгөнгө көндә Сәйфулла сәсәндең ике балаһы иҫән-һау: 91 йәшлек Шәкирә әбей Стәрлетамаҡ ҡалаһында гүмер итә, Чернобыль ветераны 74 йәшлек Салауат улы Ишембайҙа йәшәй. "Атайым 20 йәшендә Еҙем-Ҡарандың хәлле генә бер кешеһен, ҡаты һыуыҡ төшкән саҡта (ноябрь тирәһендәрәк), ат менән Өфөгә алып бара, - тип хәтирәләре менән бүлешә беҙҙең менән сәсәндең ҡыҙы. - Башына эшләпә генә кейгән була. Шул сәфәрҙән һуң күп тә үтмәй, атайым күҙҙән яҙа. Мейеһе өшөгәндер, тип уйлайым, шунлыҡтан, тома һуҡыр ҡала. Уның күп әҫәрен миңә ҡағыҙға төшөрөргә тура килде. 1946 йылда беҙгә Шәриф Биҡҡол килеп, атайымдан байтаҡ шиғыр-бәйет яҙып алып китте. Бик зиһенле, белемле ине ул. 1951 йылда мәғариф бүлеге мине Ҡунаҡбай (Байымбәт) ауылына уҡытыусы итеп ебәрергә булғас, атайымды үҙем менән алырға тура килде. Уның күҙҙәре асыҡ булһа ла, бер нәмә лә күрмәй ине. "Сәйфулла бабай күрәләр ул", тип ҡатын-ҡыҙ уның эргәһенән оялып ҡына үтеп китә торғайны. 1957 йылда мәрхүм булғас, атайымды ошо ауыл зыяратына ерләнек..."

Үҙе иҫән сағында уҡ халыҡ шағиры, тарихсы, мәғрифәтсе булып танылған Сәйфулла сәсәнде хәтерләүселәр районыбыҙҙа бик аҙ ҡалған. Башҡорт фольклорында яҡты эҙ ҡалдырған йор һүҙле шағир-импровизатор тураһында башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары, мәктәп уҡыусылары хәбәрҙар булһын ине тигән ниәттән яҙылды был мәҡәлә. Иң мөһиме - Сәйфулла Сәғитов тураһында күберәк мәғлүмәт тупларға, уның аныҡ тыуған көнөн билдәләргә (бәлки, фотоһүрәттәре лә табылыр), шәжәрәһен, йәғни нәҫел-нәсәбен өйрәнергә, мәктәптәрҙә уның ижадына диҡҡәт итергә ине.

Даны алыҫтарға таралған Оло Үтәш мәҙрәсәһе хужаһы - быйыл тыуыуына 160 йыл тулған данлыҡлы дин әһеле Хатип Халиҡов (1858-1910), уның улы - 1921-1923 йылдарҙа БАССР мосолмандарының Диниә назараты рәйесе, мөфтөй булып эшләгән Мансур Халиҡов (1886-1934), Сәйетбаба мәсетенең имам-хатибы, ошо ауыл мәҙрәсәһенә нигеҙ һалған күренекле дин әһеле, әүлиә Мөхәмәтсабир Халиҡов (1854-1931) кеүек Табын ырыуының бөйөк шәхестәре тыуып үҫкән был бәрәкәтле төйәктә Ҡорбан байрамын уҙғарған ваҡытта сәсән Сәйфулла Сәғитовты иҫкә алыу кисәһен ойоштороу бик тә сауаплы ғәмәл булыр ине.

**Нияз СӘЛИМОВ,**
**филология фәндәре кандидаты.**

---

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Хәмит АЛҒАР*

## ҺУҢҒЫ БӨЙӨК ШӘЙЕХ

Шәйех Зәйнулла Рәсүлевтың күренекле вариҫтарының береһе - фән менән шөғөлләнеүҙе ҡаҙый (мосолман хөкөмсөһө) карьераһынан өҫтөн күреп, мәғрифәтсе һәм ҙур әҫәрҙәр авторы булараҡ танылыу тапҡан Ризаитдин Фәхретдинов. Татар һәм башҡорттар араһынан сыҡҡан арҙаҡлы ғалимдар һәм эшмәкәрҙәр, шулай уҡ ҡайһы бер дағстандар һәм Урта Азия вәкилдәре тураһында библиографик белешмә рәүешендә яҙылған "Аҫар" китабы уның иң әһәмиәтле әҫәрҙәренең береһе булып тора. Ошо әҫәрҙең байтаҡ ҡына урындарында Ризаитдин Фәхретдиновтың шәйех Зәйнулла Рәсүлевҡа ҡарата ихтирамлы мөнәсәбәте сағылыш тапҡан. 1917 йылдың декабрендә Өфөлә мөфтөй урынбаҫары итеп ҡуйылғас, Р. Фәхретдиновтың ижтимағи эшмәкәрлеге янынан әүҙемләшә, һәм ул 1922 йылдың башында, Ғәлимйән Барудиҙың вафатынан һуң, мөфтөй вазифаһына тәғәйенләнә. Шул уҡ йылда ул Мәккәлә үткән Халыҡ-ара Ислам конгресында совет делегацияһы етәксеһе була. 1931 йылда Совет власы етәкселәре уға Советтар Союзында намыҫ азатлығы булыуын халыҡ алдында раҫларға тәҡдим итә. Был тәҡдимдән баш тартыуы арҡаһында ул ҡалған ғүмерен төрлө ыҙалар күреп, яфа сигеп уҙғара. Р. Фәхретдинов 1936 йылдың апрелендә ҙур мохтажлыҡ һәм ярлылыҡ шарттарында донъя ҡуя. 1984 йылда "Советтар Союзы мосолмандары" журналында уның тураһында маҡтаулы биографик очерк баҫылып сығыуы Р. Фәхретдиновты үлгәндән һуң реабилитациялау тип баһаларға була.

Үҙенең мәҙрәсәһендә ике йөҙләп шәкерт уҡытҡан мөғәллим, билдәле төрколог һәм тарихсы Зәки Вәлиди Туғандың атаһы ла Зәйнулла шәйехтең мөрите һәм хәлфәһе булған шәхес. Атаһы ла, улы ла, суфыйҙарҙы ике йөҙлө, тип ҡылыҡһырлап, бигүк өнәп бөтмәүҙәренә ҡарамаҫтан, Троицкиға Зәйнулла шәйех ҡырына йыш барып йөрөй торған булған. Зәки Вәлиди, башҡа бер нисә шәйех менән бер рәттән, Зәйнулла ишанды ла хөрмәт итеп, уны саф күңелле инсан, изгелек һәм әхлаҡлылыҡ өлгөһө, тип иҫәпләгән. Зәки Вәлидиҙең атаһы Зәйнулла Рәсүлев ҡулынан Хәлидиә-Нәҡшбәндиә туғанлығына алыу хоҡуғы биргән иджазнамә (рөхсәт ҡағыҙы) алһа ла, был хоҡуҡты ғәмәлдә бер тапҡыр ғына ҡуллана. Улы яҙғанса, уның атаһы суфыйсылыҡ заманы уҙған, тигән фекерҙә булған.

Зәйнулла шәйех 1917 йылдың февралендә, батша режимының батып барыуы мәлендә вафат була. Ул 84 йәшендә донъя ҡуя, һәм үлеменә тиклем бер нисә йыл элек мөғәллимлек итеүен тамам ҡылһа ла, һуңғы көндәренә ҡәҙәр үҙенең күп һанлы эйәрсәндәренә әүҙем һәм эшлекле рәүештә етәкселек итә. З. Рәсүлевтың шәхсән ниндәй үҙгәрештәр индереүен беҙ белеп бөтмәһәк тә, ул яһаған йөғонтоноң бер һөҙөмтәһе - ишандың мөриттәре Баруди һәм Ризаитдин Фәхретдиновтың 1917 йылдың 22 июлендә Рәсәй һәм Себер мосолмандары автономияһын иғлан иткән Мосолман Милли Йыйылышының идараһы эшмәкәрлегендә ҡалдырған һиҙелерлек эҙе ул.

**(Дауамы бар).**

✓ *Әйләнә-тирәләгеләр саф кешене боҙоуы ла ихтимал, йә насар холоҡлоно ниндәйҙер кимәлдә төҙәтә ала. Тик мин барыбер кешегә тәбиғәт орлоҡ ҡына һала, ә йәмғиәт унан кеше яһай, тигән фекерҙәмен.*



**Һәр гәзит-журналды, һис шикһеҙ, рубрикалар төрлөлөгө биҙәй. Яңынан-яңы рубрикалар күренеүе матбуғат баҫмаһының бәҫен арттыра, әүҙемлеген күрһәтә. Был йәһәттән "Киске Өфө" үрнәк булырҙай гәзиттәрҙең береһе, был баҫмала яңы рубрикалар йыш "тыуа". Тыуыуҙың дауамы - йәшәү, ғүмерле булыу. Әхмәр Ғүмәр-Үтәбай менән Әбйәлил сәсәниәһе Вәсилә апай Садиҡова "ролдәрен алыштырып" барлыҡҡа килгән "Уҡыусынан ун һорау" рубрикаһы ғүмерле булырға оҡшай. Иншаллаһ, шулай була күрһен! Ни тиһәң дә, тормош үҙе һорау-яуаптарҙан тора һәм һәр һорау үҙенең яуабын эҙләй. Тик шуныһы, яуап табыу һуңғы нөктә түгелдер, Хаҡлыҡҡа ынтылыуға хәрәкәт итеүҙер. Матбуғат баҫмалары шул вазифаны үтәп хәрәкәт ҡыла, йәшәй түгелме ни? Был - беренсенән. Икенсенән, гәзит уҡыусы ауыл кешеһе булып, яуап биреүсе ҡала кешеһе булһа, был ике аралағы күҙгә күренмәгән, уйлап табылған сиктәрҙе юйыуға сәбәпсе лә булыр, бәлки? Ҡаланыҡыларҙың һорауҙарына ауылдыҡылар ҙа яуап бирер ул - утын, бесән, мал ҡарап ҡына йәшәмәйбеҙ, шай.**
**Иҫләйһегеҙҙер, Василий Шукшиндың "Срезал" хикәйәһендәге төп герой Глеб Капустин ҡаланан ауылға ҡунаҡҡа ҡайтҡан билдәле кешеләрҙе шаҡ ҡатырғыс һорауҙар биреп һемәйтә һәм шунан ләззәт таба. Ауыл ирҙәре уны ошо холҡо өсөн хөрмәт итә, сөнки күп уҡыған, мәкерле Глеб ҡалаға күсеп, ауылды оноҡандарға үҙенсә һабаҡ биреп маташа... Оҙаҡ уйламай, һорауҙарымды яҙыусы, шағир Дамир Шәрәфетдиновҡа төбәп бирмәксе булдым. Әммә һемәйтер өсөн түгел. "Һемәйтерһең Дамирҙы!" тиер уны белгәндәр. Мин дә шул фекерҙә булғанға күрә ҡыҙыҡһынам. Сөнки беләм: Дамир "башҡаларҙың фекеренә ҡушылып..." тигән һүҙбәйләнеште бөтөнләй белмәй шикелле.**

# ӨФӨ МИНЕ ҠАБУЛ ИТМӘНЕ...



**Һүҙҙе ауыл менән ҡала араһындағы мөнәсәбәттән башлаҡас, һорайым әле: һин "ауылға ҡайтам", тип һөйләйһеңме, "барам", тиһеңме? Ғөмүмән, ауыл-ҡала төшөнсәһен нисек аңлайһың?**

- Дуҫтар менән әңгәмәләрҙә ҡайсаҡ үткәндәрҙе барлап та алаһың бит. Ана шунда мин уҙған ғүмеремә байҡау яһайым да, Өфө мине ҡабул итмәне, тигән һығымтаға киләм. Йәшерен-батырыны юҡ, һәр кеше лә барған еренә таш булып батмай, ҡай берҙә төпләнәм тигән урынын һинең өсөн ят булып ҡала. Өфө минең өсөн, әле Себер яҡтарында йөрөгәндәргә һымаҡ, эш урыны ғына булып ҡалды. Пенсияға тиклем йәшәлһә, барыбер ауылға ҡайтырмын, тим. Тәбиғәтендән әллә ҡайҙа ҡасып булмай, булмышым менән мин барыбер ҙә ауыл малайы.

**Әҙиптәр араһында компьютерҙы "ауыҙлыҡлаған" беренсе кеше һиндер ул. Бөгөн социаль селтәрҙәргә, виртуаль донъяға ҡарашың нисек? Һин унда үҙ кешеме, әллә ҡунаҡмы?**

- Башҡорт яҙыусыларын алып ҡараһаҡ, был ысынлап та шулай. Иң тәүҙә мин сайтымды булдырҙым һәм унда үҙ әҫәрҙәремде ҡуя башланым. Ләкин ул сайтты ябырға тура килде - алып барырға ваҡыт етмәй башланы. Яңыртылып тормаһа, ул береһенә лә ҡыҙыҡ түгел. Әле лә Фейсбукта һәм Бәйләнештә биттәрем бар, тик уларға ла кергәнем юҡ. Виртуаль донъя минең өсөн замана ҡаҙаныштары булған телефон, банк картаһы кеүек, уңайлы ярҙамсы ғына. Кәрәк нәмәне йә кешене тиҙ генә эҙләп табыр өсөн кереп сығам. Шуға ул донъяға әллә ни ылыҡмау яғындамын. Төрлө проекттарға саҡырыуҙар булды, әммә әүрәмәҫкә тырышам - ваҡытты күп "ашай" ул дарья.

**Кешеләрҙең аҡсаға мөнәсәбәте тураһында бөгөн йыш һөйләнелә. Дамир, һин аҡса ҡоломо, әллә аҡса һинең ҡолоңмы? Һеҙҙең ғаиләлә "финанс министры" кем? Ғөмүмән, аҡсаға мөнәсәбәтең ниндәй?**

- Аҡса, тип, бер ҙә иҫем киткәне юҡ. Булғанда - бар, булмаһа ла аптырамайым, сәй-шәкәрлеккә лә ризамын. Йомартмын тип маҡтанмайынса әйтә алам, һуңғы ун тәңкәне лә мохтаж бәндәгә сығарып тоттора алам. Аҡса ул - донъя малы, миллиардерҙар ҙа ике ҡолас ергә ята.

**"Ваҡыт етмәй" тигәнде йыш ишетергә тура килә. Ваҡыт төшөнсәһен нисек аңлайһың? Ваҡыт етәме һиңә, артһа, нимәгә ҡулланаһың?**

- Хәҙер, олоғая төшкәс, ваҡыттың үтә наҡыҫ ҡалғанлығын тоя башлайһың икән. Аптырап та ҡуйыла: йәш саҡта нисек көн үткәрергә белмәй йонсоған саҡтар ҙа бар ине бит. Шул ваҡытты бөгөнгә күсерергә ине ул. Ваҡыт минә бер ҡасан да етмәй, төндәр һәм йылдар иҫәбенә ижад итергә тура килә. Иң һәйбәте - поезда барғанда яҙышыу. Ә яҙаһы һәм эшләйһе тигән ниәт-пландар бихисап, мин бер юлы әллә нисә эште алып бара алам, шуға ла башлап ҡуйылған әллә нисә китабым ята. Уларҙы ҡабаландырмайым, үҙ яйҙары менән яҙылырҙар һәм сығырҙар әле.

**Имсәк бала ҡарашын күҙ алдына килтереп әйт әле: усаллыҡ, асыу, яуызлыҡ, икейөҙлөлөк, эскерлек, һаранлыҡ, нәфрәт, һауалылыҡ, тиҫкәрелек, алдашыу, боҙоҡлоҡ, эгоизм кеүек сифаттар тыумыштанмы, әллә социум ғәләмәтеме?**

- Кеше үҙ тәбиғәте менән тыуа ла, артабан мөхит һәм туғандары тәрбиәһендә үҫә башлай. Әйләнә-тирәләгеләр саф кешене боҙоуы ла ихтимал, йә насар холоҡлоно ниндәйҙер кимәлдә төҙәтә ала. Тик мин барыбер кешегә тәбиғәт орлоҡ ҡына һала, ә йәмғиәт унан кеше яһай, тигән фекерҙәмен.

**Бөгөн беҙ мәғлүмәт донъяһына сумып йәшәйбеҙ. Ер шарының һәр тарафындағы мәғлүмәт һәр кем өсөн яҡынайғандан-яҡыная. Күптәр белгән мәғлүмәтте һөйләү, яҙыу, күрһәтеү өсөн (әгәр ул алдаҡ булмаһа!) яуаплылыҡ тойғоһо борсомай. Ә бына фекер әйтеү яуаплылыҡ талап итә. Матбуғатта мәғлүмәт менән фекер нисбәте нисегерәк булыуы тәүшарт? Һин үҙең мәғлүмәт донъяһындамы, әллә фекер алышыу аша йәшәйһеңме?**

- Бөгөн мәғлүмәтте табыу һәм таратыу өсөн техник шарттар күп. Шуға ла хәбәр таратыу алданыраҡ йөрөй. Бөтә каналдар өҙләкһеҙ бер үк нәмәне тылҡый башлаһа, ялҡытып та китә. Ә бына фекерле кешеләр һирәк һәм уларҙың һәр ҡайһыһына ла һүҙ әйтергә мөмкинлек тә бирелмәй әле. Матбуғатта цензура көслө, радио-телевидениеға бөтөнләй барырлыҡ түгел - унда сеткалар һәм форматтар хөкөм һөрә. Мин ихлас бәхәстәр, түңәрәк ҡорҙар яҡлы. Демократия шулай булырға тейеш һымаҡ та, тик беҙҙең йәмғиәт был төшөнсәнән би-иик йыраҡта шул әле. Матбуғат ул ниндәйҙер төркөмдөң (яҙҙырып уҡып барыусыларҙың) ураҡ трибунаһы булырға тейеш тә бит, тик беҙҙә кемгә һүҙ биреүҙе нәшер итеүсе хәл итә. Мин элек-электән көндәлектәр алып барам, уға мине Булат ағай Рафиҡов өйрәткәйне. Ана шунда ғына ихласлап бөтә уй-фекерҙәремде яҙып барып була. Ә башҡа ерҙәрҙә ауыҙыңды һәр ваҡыт үлсәп асырға тура килә.

**Гётенең үҙ шиғырын уҡып илап ултырыуы тураһында бер шиғыры бар. Баҡтиһәң, ул үҙ шиғырының тәржемәһе икән. Шағир ҡыуаныстан илаймылыр, әллә ризаһыҙлыҡтанмы - уныһы билдәһеҙ. Һинең тәржемәгә ҡарашың нисек?**

- Мин тәржемә менән күп шөғөлләнәм: башҡортсаға ла, руссаға ла. Башҡорт теленә ауҙарыу ҡыҙыҡ өсөн, йә үҙеңде һынап ҡарау өсөн генә инде. Йә берәй таныш-дуҫың русса әҫәрен матбуғатта башҡортса ла күрергә теләп китә. Асылда бит русса белгәнең бер башҡорт та юҡ. Ә русса тәржемәләр кәрәк - улар аша беҙ башҡорт әҙәбиәтен, халҡын, йәшәйешен бөтә донъяға сығарабыҙ. Европа, Көнсығыш әҙәбиәте өлгөләре лә беҙгә рус теле аша килгән бит. Был эште ҡалдырырға иҫәбем юҡ. Мин үҙемдең әҫәрҙәремде лә башта башҡортса, аҙаҡ русса яҙам. "Көн башы һуҡмаҡтары" тигән повесым башҡортса-русса китап булып сыҡты. Ҡыҙғаныска күрә, тәржемәгә лә ваҡыт етмәй, шуға бик үтенгән дуҫтарға ғына ризалашырға тура килә.

**Көтөү кирегә боролғанда аҡһағы алға сығыуы тураһында бер шиғырың бар. Көтөү-көтөүсе төшөнсәһен нисек күҙ алдына килтерәһең? Шулай уҡ көтөүсегә мохтаж халыҡмы беҙ?**

- Әйҙә, тураһын әйтеп һөйләшәйек: кеше - тәбиғәте менән өйөр затынан. Тимәк, шуның ҡанундарына ярашлы, әйҙәүсе көтөүсе лә, тыңлаусан ғына эйәреүселәр ҙә бар. Һәм һәр өйөрҙәге кеүек үк, беренселек өсөн ауыһыҙ ярыш бара. Йүнлелешен үҙгәрткәндә, әлбиттә, аҡһаҡтары ла алға сыҡҡылай, тик барыбер, өйөр ҡанунына ярашлы, улар беренсе була алмаясаҡ. Бында беренселек тәбиғи һайлау буйынса билдәләнә.

**Һин шағир ҙа, прозаик та, публицист та. Ысынында һин кем?**

- Тәбиғәтем менән шағирмын, тим. Ҡалғандары икенселдәр. Барыбер шиғриәт яҡынырaҡ. Журналистикаға осраҡлы килеп юлыҡтым, хикәйә, повестар ҙа кәрәк булған өсөн генә яҙыла, буғай. Роман һәм драматургияға тотонғо ла килмәй, бәлки, улары ла килеп сығыр ине. Егет кешегә етмеш төрлө һөнәр ҙә аҙ, тигән ҡараштамын мин. Йөҙ булһа, тағы ла яҡшыраҡтыр.

**Үҙем мәктәптә эшләгәс, һорайым әле: белемде бирәләрме, әллә алалармы? Үҙең нисек уҡының, атай булараҡ, белем биреүгә ҡарашың нисек?**

- Биреүсе булмаһа, уны ҡайҙан алаһың? Биргәнде лә ала белмәгән кешеләр күп бит әле. Кем әйтмешләй, үҙ хаталарында өйрәнгәнсе, кеше хаталарын күреп, ҡабатламаҫҡа тырышыу аңһатыраҡ бит ул. Мәктәптә мин бик еңел уҡыным, әллә ни тырышлыҡ та күрһәтмәнем, буғай. Малайҙар менән ҡумаҡлап дәрестән ҡасыуҙар ҙа, матур яҙҙарҙа мәктәпкә тип сығып китеп, тау башында уйнап көн үткәреүҙәр ҙә булды. Хәтеремдә, дәреҫкә әҙерләнеп килмәһәм, таҡта янына сыҡҡансы уҡ мәсьәләне сисеп өлгөрә инем. Аттестатымда "өслө"ләр ҙә бар. Урта балл 4,5-кә етмәне, шуға институтҡа ингәндә икәү урынына дүрт имтихан тапшырырға тура килде. Ләкин дүртәүһе лә "бишле" ине.

Уҡыуға килгәндә, минең ҡарашым шундай: уҡый алған бала була, күпме хитланһа ла, хәреф тә таный алмаған бала була. Ундайҙарҙы этләргә кәрәкмәйҙер ул. Беҙҙең класта алтынсыға тиклем уҡый белмәгән малай булды, барыбер ебәрҙеләр аҙаҡ. Законға ярашлы һигеҙенсегә тиклем ыҙалаттылар бахырҙы. Ғөмүмән, мотлаҡ урта белем тигән нәмәне үҙе иҫәр уйлап сығарғандыр ул. Әгәр һин юғары белем алырға иҫәп тотмайһың икән, нимә тип 11 йыл мәктәпкә йөрөп, БДИ тип баш ҡатырырға? Беҙҙең Инйәр мәктәбенән өс параллель кластан өс кеше генә институтҡа керҙе, ҡалған етмеше урта белем менән ҡалды бит. Ләкин тормоштары бына тигән, күрешеп йөрөйбөҙ, күреп торам. Шулай уҡ һигеҙ йыллыҡ белем менән дә йәшәрҙәр ине. Ә атайым ике класс ҡына белемле ине, ләкин бөтә әҙәбиәтте уҡып барҙы. Әле һаман күҙ алдымда: ҡышҡы кистәрен шәм яҡтыһында ижекләп кенә "Ағиҙел" журналын уҡып ултыра... Ул беҙҙең һымаҡ күҙ йүгертеп кенә сыҡмай, ә йәйләп, тәмләп, ҡысҡырып уҡый ине.

Ҡыҙым мәктәпте алтын миҙалға тамамланы, ул минең һымаҡ һәлкәү түгел, бар нәмәгә бик яуаплы ҡарай. Уҡыуға булған ҡараш тотош тормошта ла сағыла бит ул, шуға мин уның тырышлыҡтарын өнһөҙ генә хуплау яҡлы. Әлбиттә, бәләкәй сағынан үҙемә өлгө күрһәтергә тура килде: китаптар, журналдар менән өй тулы, үҙем дә ҡулдан китап төшөрмәнем. Армиялағы закон буйынса, "минеңсә эшлә" була инде был. Баланы китапҡа, әҙәбиәткә ылыҡтырыу мотлаҡ, юғиһә, мин өйөндә бер китап, гәзит киҫәге булмаған ғаиләләрҙе беләм. Бер тапҡыр ауылға ҡайтҡанымда күрше килеп: "Ҡағыҙ менән ҡәләм биреп тор әле", - тип аптыраҡҡайны. Ә беҙ "мотлаҡ урта белем" тип яр һалабыҙ, 21-се быуат ургаһында. Уҡый белмәгән кеше юҡ илебеҙҙә, тигән булабыҙ. Ай-һай, тип шикләнергә баҙнат итәм! Тиҙҙән, уҡыу уҡ булмаһа ла, яҙыу тигән төшөнсә онотолоп ҡалмағайы... Бөгөн "Ағиҙел" журналына килгән "әҙәби" әҫәрҙәрҙе күрһәң, ҡот осмалы: ошоно юғары белемле кеше яҙғанмы, тип аптырата. Һәм шуларҙы 16 йыл буйына уҡырға һәм яҙырға өйрәткәндәрме?

**Һорауҙарҙы Әбйәлил районы Хәлил ауылы мәктәбе уҡытыусыһы Радик ӨМӨТҠУЖИН йүнәлтте.**

✓ ***20-се мәктәптә уҡығанда ла ундағы милли мөхитте тәбиғи тип ҡабул итә инем, шуға ла миндә милләткә бәйле комплекстар булманы. Провинция кешеһе, тигән комлекс та юҡ миндә, мин бит баш ҡалала тыуған кешемен.***



# ДОНЪЯНЫҢ ИҢ ШӘП КҮПЕРҘӘРЕ...

## улар беҙҙә, баш ҡалала

**Замандаштарыбыҙ араһында төрлө өлкәләрҙә берҙәй уңыш яулағандар күп. Бөгөнгө геройыбыҙ ҙа шундайҙар рәтенән. Проза әҫәрҙәре, фильмдар өсөн сценарийҙар, пьесалар - быларҙың барыһы өсөн дә ҡасан өлгөрә икән тип уйлайһың уның хаҡында ҡайһы саҡта. Яҙыусы, драматург, сценарист, М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театрының әҙәби бүлеге етәксеһе Шәүрә Рәшит ҡыҙы ШӘКҮРОВА менән бөгөнгө әңгәмәбеҙ Өфө тураһында.**



➔ **Һеҙҙең бала сағығыҙҙағы Өфө ниндәй ине?**

- Беҙ Октябрь проспектының 11-се йортонда йәшәнек. Ул ваҡытта Өфө ихаталары балалар тауышынан гөрләп торор ине. Иртәнән кискә тиклем иркендә йүгереп йөрөй, әхирәттәрҙе балкон төбөнән ҡысҡырып саҡырып сығара инек. Ғөмүмән, һәр кем бала сағын иң бәхетле мәл тип хәтерләйҙер, әммә беҙҙеке айырыуса мөғжизәле ине кеүек. Ҡараңғы төшкәнсе уйнайбыҙ, бер ниндәй хәүеф булмаған кеүек, атай менән әсәй 5-се ҡаттағы тәҙрәнән генә күҙ һалып алған була. Әлбиттә, ул ваҡытта ла булғандыр хәүефле ваҡиғалар, әммә интернет юҡ саҡта рәсми хәбәрҙәр генә билдәле булған заман булғас, белмәй ҡалғанбыҙҙыр, күрәһең. Хәҙер иһә, берәү ҙә балаһын яңғыҙын урамға сығармай тиерлек.

Ҡайҙалыр уҡығайным, Өфө - ул ҡатлы-ҡатлы бәлеш кеүек, һәр төркөм, милләтме, мәҙәни, профессиональ йәки тағы ла бер төрлө берләшмәме, үҙаллы тормош менән йәшәй һәм бербереһенә ҡамасауламай. Һәм һин, теләһәң, бер ҡатламға барып аралашаһың, теләһәң, икенсеһенә. Бында хаҡлыҡ бар. Әйтәйек, беҙ башҡортса уйнай инек, әхирәттәрем дә башҡорт ине һәм Өфө ихатаһында ошондай башҡорт мөхите булыуы шул тиклем тәбиғи ине. Башҡортса уйындар уйнай инек, мәҫәлән, "Тотам-тотам", "Йәшенмәк" һ.б. Сафуан Әлибаев менән Динис Бүләковтар беҙгә яҡын йәшәне, атайымдар ҡунаҡҡа йөрөшә ине. Динис Бүләковтың ҡыҙы Ләйсән менән уйнағаным хәтеремдә. Бала саҡтан кемде күрәһең, шул һиңә яҡын була икән. Бала сағым тураһында ҡыҫҡа ғына хикәйәләр яҙғанмын. Улар "Бельские просторы", "Аманат" журналдарында, "Уфимский вокзал" һәм "Пусть ветер унесет мои слова" китаптарында баҫылып сыҡты.

20-се мәктәптә уҡығанда ла ундағы милли мөхитте тәбиғи, шулай булырға тейеш икән, тип ҡабул итә инем, шуға ла миндә милләткә бәйле комплекстар булманы. Провинция кешеһе, тигән комлекс та юҡ миндә, мин бит баш ҡалала тыуған кешемен, ниндәй комплекс булһын инде. Ә Мәскәүҙәге курсташтарым миңә аптырай торғайнылар.

➔ **Ижадсы ҡомары ла бала саҡтан тәрбиәләнәләр. Яҙыусы булып китеүегеҙгә нимәләр йоғонто яһаны, тип уйлайһығыҙ?**

- Китап араһында үҫтем. Өйҙә атайымдың китаптары күп булды. Атай менән әсәй эштә саҡта уҡый инем. Әсәй китапҡа текәлеп ултырыуҙы, нисектер, ялҡаулыҡ тип һанаған кеүек ине, шуға, бер аҙ тыя ла ине. Шуғалыр ҙа, мин уны әҙәбиәттән йыраҡ кеше тип уйлай инем, хаталанғанмын. Әсәйем шәп прозаик була алыр ине, хатта бер әҫәрҙе яҙа ла башлағайны. Үкенескә күрә, тамамламаны, ул детективтың аҙағын һаман да белмәйем. Яҙыусылыҡ эше бит ҙур тырышлыҡ талап итә, йөҙ тапҡыр күсереп яҙырға тура килә. Мин үҙем шулай, ҡабат-ҡабат яҙам, нимәләр өҫтәйем, камиллаштырам.

Йәйгеһен ауылға, атайымдың атаһы менән әсәһенә ҡайта инек. Ҡартатайымдың ҙур быяла шкафы китаптар менән тулы ине. Өй башына менеп, аулаҡта уҡығаным хәтерҙә. Ҡартатайым бик белемле кеше ине, Бохарала уҡыған. Ул да, нәнәйем дә тыныс, тыйнаҡ булдылар. Нәнәйем үҙ артынан эйәртеп йөрөтә ине мине. Сөнки балалар күп кенә булып йыйылып китәбеҙ йәйҙәрен, ә мин бер аҙ ҡыйыуһыҙыраҡ. Өҫтәлгә йомортҡа ҡурылған таба ултырталар икән, мин вилка тотҡан ҡулымды күтәреп тә өлгөрмәйем, башҡалар ашап та бөтә. Минән 6 йәшкә бәләкәй Гөлдәр һеңлем тамағын туйҙырып өлгөрә. Шуға ла мин тоҙло иттең түмен әле булһа ла тел осонда тоям, сөнки ишек артында ит ҡаҡлана ине. Шунан өҙөп алам да, өй башында китап уҡығанда һурып ултырған була торғайным. Нәнәйем күргәндер инде минең асыҡ ауыҙ булғанды, ипләп кенә саҡырып алып ашата торғайны. Туғандарым әле лә, осрашҡанда, шул саҡтағы хәлдәрҙе хәтерләп, көлөшөп алабыҙ.

➔ **Ә театрға һөйөү ҡайҙан килә?**

- Тәүге пьесаны мин 4-се класта яҙҙым. Уны мәктәптә әхирәтем менән икәүләп ҡуйҙыҡ, класташтар ҡарап ултырҙы. "Шайтандар" тип атала ине ул. Яҙғанда күп һымаҡ булһа ла, уйнай башлағайныҡ, бөттө лә ҡуйҙы пьеса. Класс тып-тын, был бүлмәлә бындай тынлыҡты мин бер ҡасан да ишеткәнем юҡ ине. Бөттө, тип әйтә алмайбыҙ бит, артабан импровизация китте. Ә шулай ҙа театр донъяһы менән күпкә бәләкәйерәк саҡта танышҡанмын икән. Йорт ихатаһында эскәмйә, өҫтәл, хатта сәхнә була торғайны. Кем ойошторғандыр инде, шунда беҙ балалар театр уйнай инек. Золушканы уйнағанымды хәтерләйем, миңә көмөш төҫтәге күлдәк, туфлиҙар табып килтерҙеләр. Мин киноны ла ярата инем. Ул заманда киоскыларҙа кино актерҙарының фотолары һатыла ине. Автобусҡа тип бирелгән аҡсаны йыйып, ошо открыткаларҙы һатып ала инем. "Советский экран" тигән журнал бик популяр ине. Атайым фән өлкәһендә эшләгәнгә һәм күберәк шул мөхит менән таныш булғанға күрәме, мин, нишләптер, беҙҙә сәнғәт институты бар икәнен дә белмәй инем. Иң ҡыҙығы, ВГИК барлығын да белмәй инем. Белһәм, моғайын, һөнәр һайлағанда үлсәүҙең шул яғы нығыраҡ тартыр ине.

➔ **Өфөнән башҡа берәй ҡалала йәшәй алыр инегеҙме?**

- Мин ситкә китеп йәшәп ҡарап, дүрт тапҡыр Өфөгә кире ҡайттым. Әлбиттә, шул уҡ Мәскәүҙә эш тә күп, тимәк, матди хәлеңде лә яҡшыртырға була. Тик минең үҙ халҡыма файҙалы булғым килә. Тәүге тапҡыр БДУ-ның тарих факультетынан һуң аспирантураға Бөтөн донъя әҙәбиәт институтына (ИМЛИ) киттем. Әхиәр Хәкимов тәржемәселәр өсөн курстар үткәрә ине, ул миңә лекцияларға йөрөргә рөхсәт итте. Тәүге әҫәремде мин шунда яҙҙым. Тик миңә диссертация өҫтөндә эшләргә кәрәк ине. Диссертация яҡлағандан һуң, бөтөн Рәсәйҙә һайлауҙар ойоштороу менән шөғөлләнгән ҙур компанияла эшләнем. Унан атайымдың теләге менән Өфөгә ҡайттым. Рияз Исхаҡов минең "Урал батыр" эпосы буйынса ғилми эш яҡлағанымды белә ине. Ул миңә 4 сериянан торған "В поисках Акбузата" тигән фильмға сценарий яҙырға тәҡдим итте. Минең, нимәләр эшләйһең икән, сифатлы итеп эшләргә кәрәк, тигән принцибым бар. Сценарий яҙыу ҡыҙыҡлы булып китте лә, тағы ла Мәскәүгә, ВГИК-ҡа уҡырға индем. 2 йыл унан сыҡманым да тиерлек, шул тиклем оҡшай ине. Александр Бородянский курсында уҡыным. Драматургияла үҙемде һынап ҡарарға теләп, Театр эшмәкәрҙәре берлеге эргәһендә асылған Драматургия һәм режиссура үҙәге үткәргән бөтөн семинарҙарҙа ҡатнаштым. Пьесалар ҙа яҙылды, уларҙың береһе - "Гөлкәйҙең бәхете" РФ Мәҙәниәт министрлығының заман драматургияһына ярҙам итеү буйынса конкурсында еңеүсе булды, уны Салауат башҡорт драма театры ҡуйҙы. Мәскәүҙә "А-Я" балалар театрында барған "Мама меня любит" тигән спектаклгә бер мини-пьеса инеп китте. Республикала кино әле саҡ үҫешә башланы, әммә милли театр сәнғәте күптән формалашҡан. Театрҙа хәҙерге башҡорт тормошон кем күрһәтер икән тигән уй мине ныҡ борсой. Милли драматургтар ныҡ шәп яҙырға тейеш, үҙебеҙҙе раҫлау өсөн күберәк эшләргә кәрәк.

Ситкә китеп йәшәүгә килгәндә, үҙем өсөн бик ҡәҙерле пьеса бар, "Зәңгәр томандар артында" тип атала ул, пьеса байтаҡ ҡына конкурстарҙа Шорт-листарға керҙе, әле генә Badenweiler-2018 тигән халыҡ-ара драматургия конкурсында призер булды. Мәскәүҙә йәшәгәндә беҙ, Мәскәү башҡорттары, йыйылабыҙ ҙа, ныҡ һағынып киткән саҡтарҙа ошо йырҙы йырлай торғайныҡ. Пьесалағы геройҙар ҙа ҡайтыу тураһында хыяллана, бергә осрашҡан саҡтарында бар һүҙҙәре шул хаҡта ғына. Әммә улар ҡайтмаясаҡтар, сөнки ҡайтыуҙы аҙаҡҡа ҡалдыра килеү өсөн сәбәптәр бар - аяҡҡа баҫмағандар, кредиттар түләнмәгән, һ.б. Мин әле лә әйтә алмайым, мин ҡайттыммы Өфөгә, әллә тағы ла ситкә сығып китергә тура килерме?

➔ **Һеҙ зыялы ғаиләлә үҫкәнһегеҙ, атайығыҙ Рәшит Шәкүргә бөтөн башҡорт халҡы күҙ төбәп торған замандар ҙа булды. Ул ғаиләлә ниндәй атай?**

- Атайым да, әсәйем дә күп эшләнеләр. Хатта бер хикәйәлә ошо турала яҙғас, атайым быны күңеленә ауыр алғайны. Хәҙер үҙемдең улым, ҡалай эштә оҙаҡ булдың, ти. Бөтөн балаларға ла шулай тойолалыр ул. Хәтеремдә ҡалған, атайымдың алдында ултырам, ул яҙыша, мин ҡағыҙының ситенә яҙғылайым. Гөлдәр ҙә шулай атайҙың алдында ултыра торғайны. Атайым мине елкәһенә ултыртып, Матбуғат йортона алып бара торғайны. Нисә кеше осрай, барыһы ла, "Шәүрә, һаумы", тип өндәшә миңә. Шуға ла бәләкәй саҡтан, мине барыһы ла белә, тигән фекер ҡалған миндә. Бер шулай телеүҙәк эргәһендәге майҙанда Рәшиҙә Туйсина бейей. Миңә 3 йәштәр самаһы. Бер аяғымды алғараҡ баҫтым да: "Һаумы, Рәшиҙә Туйсина!" - тинем. "Һаумы, ҡыҙыҡай!" - ти ул миңә. "Мине белмәйһегеҙме ни, мин - Шәүрә!" - тием. Ике тапҡыр Зәйнәб Биишева менән шундай хәл булды. Атайым беҙҙең менән саңғыла ла йөрөнө, тауҙан да шыуҙы. Шул уҡ ваҡытта беҙҙең ғаиләлә һәр кем нимә мендәр мәшғүл ине, бушты-бушҡа ауҙарып йөрөгәнебеҙҙе хәтерләмәйем. Үткән быуаттың 90-сы йылдарында атайымдың "Аҡ тирмә"ләге сығыштарын тыңлай ҙа, ҡайтҡас, ул турала тағы һөйләшә инек. Уның өсөн хәүефләнә лә инем, йәштәр юҡмы ни шунда йөрөргә, тип әйткәнем дә булды. Ғөмүмән, атайымдың башҡаса булдыра алмай икәнен беҙ ғаиләлә аңлап ҡабул иткәйнек.

➔ **Өфөлә яратҡан урынығыҙ ниндәй?**

- Яуабым бер кемде лә аптыратмаҫ. Салауат Юлаев исемендәге баҡсаны яратам. Унан Ағиҙел аша һалынған күперҙе күҙәтеп тороу мауыҡтырғыс була торғайны. Аҙна һайын шул күперҙән баҡсаға йөрөнөк. Нью-Йоркка барғас, ундағы күперҙәргә иҫем дә китмәне. Америкалағы дуҫтар: "Былар донъялағы иң шәп күперҙәр", - тинеләр. "Беҙҙә улар тағы ла шәберәк", - тип кенә яуапланым. Ошо күперҙәрҙән, бигерәк тә поезда Өфөгә ҡайтып килгәндә, Салауат Юлаев һәйкәле күренә, бик тулҡынландырғыс та, романтик та күренеш. Бәләкәй сағымда Якутов паркындағы поезд ныҡ оҡшай ине, хәҙер улым да уны бик ярата, яҡын торғас, көн дә тиерлек барабыҙ шул поезды ҡарарға...

**Ләйсән НАФИҠОВА әңгәмәләште.**

***✓ Һеләүһенде күреп, йомошон ярып та һалды. Мендәргә терәлеп ҡырын ятҡан еренән, бөтөн кәүҙәһе менән һелкенеп, оҙаҡ хахылданы йәштәше, унан тамаҡ төбө менән генә екереп, шул тирәлә өйөрөлгән ҡатынын саҡырҙы.***




Урал тауҙарының артмаҡланып-артмаҡланып ятҡан үркәстәре араһындағы бер бөгәрҙә ҡышлай Абдрахмандың ауылы. Тәпәшәк ҡарағай өйҙәрҙе ҡалын ҡар тотошлайы менән тигәндәй ябып, йылы юрғанға урап ҡуйғандай. Ҡыйыҡтары ла шундай уҡ уртаға ярылған ҡарағайҙарҙан булмаһа, бынсама ҡарҙы күтәрер инеме икән? Ситтән ҡарағанда, бында тереклек барлығы аңғарылмаç та ине, көрт өйөмдәрен тишеп сығып, саф һауаға күтәрелгән төтөн бағаналары булмаһа.

Ошо һиллекте тау ҡабағынан күҙәтеп, күҙ алдындағы күренештәргә ҡапма-ҡаршы булған буранлы уйҙар солғанышында тора бей. Уны был күркәмлек тә, тынлыҡ та албырғата алмай. Тауҙар араһына инеп боçоп ҡына тыныслыҡ таба алмаçын да белә ул. Илгә яу килә. Әлегә уның еле генә иçә, әммә хәбәре артынан ҡырғыны ла оҙаҡ көттөрмәç. Бындайҙы үҙ яҙмышында кисермәһә лә, ата-бабалары ғүмерендә үткәргәнен ишеткәне бар. Был ырыу-ара ыҙғыштар, ҡаҙаҡ-ҡайсаҡтар менән бәрелештәр кеүек кенә булмаясаҡ. Баçҡынсылар килә. Ер-һыу, байлыҡ, мал талап, ҡан эсеп, әҙәм йәшен ҡойоп ҡаныҡҡан яттар юлланған был яҡҡа.

Уралға саҡлы килеп етерме улар? Башҡорттарға был яуға ҡаршы сығыу кәрәк булырмы? Әллә, ҡайһылар фаразлағанса, боролоп китерме? Башҡорт ерҙәренең далаларынан тыш, тау-урмандары һуғыш өсөн яйһыҙ булыуын иçәпкә алырмы дошмандар, әллә киреһенсә, гүзәллегенә ҡыҙырмы? Оло һыу буйҙарында ерләнгән үçәргән бейе Тоҡандан алынған мәғлүмәттәр буйынса, яу тап улар аша үтмәксе... Ҡаршы сығып та, унсама илдәрҙе, халыҡтарҙы баçып килгән ғәскәргә ҡаршы тора алырмы һуң улар? Был бары илде ҡырҙырыу ғына булмаçмы? Әгәр улар Ҡара диңгеҙ ярҙарынан боролоп китер булһалар, ҡаршы сыҡҡансы, киреһенсә, шул ерҙәр сигендә сәләмләп ҡаршы алып, ҡуйған талаптарын үтәп кенә ҡалыу хәйерлерәк булмаçмы?

Тоҡан ғәскәрҙе яу менән ҡаршы алыу яҡлы. Әлбиттә, ул шул сиктә ятҡан үҙ ерҙәре, үҙ халҡы өсөн борсолалыр. Ҡурҡалыр ҙа, бәлки. Тик уны ғәйепләп тә булмай. Хатта хәйерле булмаған фекер йөрөтһә лә. Шуға уны аңларға, борсолоуҙарын да тейешенсә ҡабул итергә тырыша Абдрахман.

Яу килеүе былтыр уҡ билдәле булғайны. Был хәбәр бығаса тырым-тырағай булышып, юҡ-бар сәбәп өсөн дә бер-береһенең алҡымынан алырға ынтылған бүреләр кеүек йәшәгән ырыуҙар араһында ниндәйҙер бәйләнеш ептәре һуҙҙы. Артыҡ һанлашмай, шулай уҡ артыҡ ҡонлашмай ҙа йәшәгәндәр, йәһәтләп, бер-береһенә яҡынайыу яғын ҡайғыртты. Был эштән үҙҙәре лә ситтә ҡалманы. Көҙ, ана, ҡыпсаҡтың Аҡбарыçы менән ҡоҙалашып ҡуйҙылар. Хәҙер ике яҡты ла бәйләр сәбәп булғас, бәлә-ҡазаны уртаға һалып һөйләшә алалар. Ҡыпсаҡтарға йәһәтләп берәй ул да табып бирһә Баҙыяны, яҡшы булыр ине, тегеләрҙең бәғере ирей төшөр ине, тип тә уйлай Абдрахман. Тик ҡатыны был хаҡта ләм-мим әле - өндәшмәй.

Тоҡан бейҙең ебәргән илсеһенең тел төбөндә лә туғанлашырға теләүе һиҙелә. Ундай уйы булһа, Тоҡан теләктәшлек итһә, ул ерҙәргә ҡыҙ һорап та барырҙар әле, кем белә...

Икенсе ҡатыны Хафизаның өйө тәңгәлендә туҡтап, ҡалтағайҙарын систе Абдрахман. Һуңғы көндәрҙә оло бисәһе Айымбикә ҡашында йәшәп торғайны, әллә олоғайыуы һиҙелә ҡатынының, әллә оҙайлы ҡыш йонсотто үҙен - мыжып, гел бәлә-ҡаза хәбәрен һөйләп, тәҡәтен ҡоротто. Ҡалҡынып-талпынып та бармай артыҡ, күберәк ялсыларын йомшауға һалыша. Ауырайып, һимереп тә китеүен мөрхәтһенмәй. Ҡыçҡаһы, ялҡып китте унан ире. Әле шуға үҙе алдында орсоҡ ише өйөрөлөп-сөйөрөлөүсән, йылдам Хафизаһы тупһаһына боролдо. Был ҡатыны алты бала табып, шуларҙың дүртәүһен имен-аман ир еткерһә лә, һаманғаса йәшлек дәртен, шаянлығын һаҡлап ҡала алған, һығылма билле, иркә ҡарашлы. Айымбикәһен артыҡ хис-тойғоһоҙ ғына, атаһы Толомғужаның Ҡансура менән ҡоҙалашырға ынтылыуын аяҡ аçтына һалып тапамауҙан, йолаға буйһоноп алғайны. Артыҡ сырайы яҙылмаç, йомоҡ, әммә инә бүре ише тоғро ҡатыны бер-бер артлы өс ул тапты. Инде өс балаға атай булып, алты-ете йәшлек ике олоһон эйәртеп һунарға сыҡҡанда, тау-таш араһында аҙашып, ҡайтыр юлын таба алмай йөрөп, хәлдән тайған күрше йәйләү ҡатын-ҡыҙын осратты. Ҡатындарҙың йәш булыуҙарына ҡарап, уларҙың аҙашыуына ла аптырамаһы Абдрахман. Был яҡтарҙы белеп тә бөтмәйҙәрҙер, Иҙелдең бөтөнләй түбән яғынан килә улар йәйләүгә. Илашып бөткән төркөмдө эйәртеп алып барып, асыҡлыҡҡа сығарып ебәрҙе. Ебәрҙе лә ҡарашы менән күҙҙән юғалғансы оҙатып ҡалды. Күҙҙән юғалтҡас та тора бирҙе әле шул урынында. Шаңҡып, үҙ халәтенә төшөнә алмай, балаларын да онотоп торҙо батыр. Нимә булды уға? Араларынан берәүһенә ҡараны ла ҡатты түгелме? Улай ярамағанын да аңлай, әммә эçе ҡояш аçтында оҙаҡ йөрөүҙән йөҙө ҡыҙарып, арыуҙан аяҡтарын саҡ һөйрәп килгән нәҙекәй ҡыҙ, әйтерһең, уны арбаны ла ҡуйҙы. Өç-башына, ҡыланыштарына ҡарап, кейәүҙә түгеллеген дә самаланы. Әгәр берәйһенең йәрәшелгәне генә булмаһа. Ҡатындар араһында тәпәшәгерәк йомороһо, Һеләүһендең ҡатынымын, тине. Абдрахманды сырамытып та, бәлки, әйткәндер. Һеләүһен менән йәштән таныш, ошо тирә йәйләүҙәр үткәрә торған яҙғы байрамдарҙа, йыйындарҙа осрашып, көс һынаша, көрешеп, ҡунаҡ булыша торғайнылар.

Абдрахманға оҙаҡ уйлап, икеләнеп ултырыу хас түгел. Ул хәл итә лә, башҡара ла ҡуя торған әҙәм. Дөрөç булһа ла, булмаһа ла, теләгәнен эшләй ул. Был юлы ла, иртән тороп, күрше йәйләүгә китте, Һеләүһенде күреп, йомошон ярып та һалды. Мендәргә терәлеп ҡырын ятҡан еренән, бөтөн кәүҙәһе менән һелкенеп, оҙаҡ хахылданы йәштәше, унан тамаҡ төбө менән генә екереп, шул тирәлә өйөрөлгән ҡатынын саҡырҙы. Тегеһе килә һалып, ире ҡашына сүгәләне.

- Кемдәр менән еләккә сыҡтың төнәгөн аҙашҡанығыҙҙа?

Ҡатын ҡунаҡҡа "йәлп" итеп ҡарап алып, бармаҡтарын бөктө:

- Сәйҙә, Хафиза, Ҡәҙриә килен, Әсмә еңгә, мин...

- Кем йәшел күлдәктә ине?

- Йәшел күлдәктә? Кем тип... Хафиза булды микән?

- Нисә йәш Хафизаға?

- Ун туғыҙ булып киткән, шикелле.

- Нишләп ултырған ул бығаса? - ире ҡулындағы һөйәген хәнйәре менән тунаған арала ҡатынынан һорау алды. Тегеһе йәһәт кенә яуаплап торҙо:

- Әсәләре мәрхүм булғас, атаһы менән ҡустыһын кем тәрбиәләһен? Былтыр бер-ике ерҙән һоратып та ҡарағайнылар, риза булманылар.

- Атаһын ҡарайым тип, мәңге тора алмаç бит инде. - Унан Абдрахманға төбәп әйтте. - Беҙҙәге көтөүсе Янһары ағайҙың ҡыҙы ул Хафиза. Теләһәң, үҙем барам.

Ошо һөйләшеүҙән һуң, оҙаҡҡа һуҙмай, барҙы ла алды Хафизаны. Айымбикәһенең былай ҙа ҡоңғорт бите ҡарайып, күҙҙәре боҙ һалҡынлығын бөрктө, әммә һүҙ менән ҡаршы сыҡманы. Ата-баба йолаһы булғас, бей затын дауам иттереп, әллә күпме халыҡҡа, ер-һыуға, мал-тыуарға хужа булып йәшәп ятҡан бай ҙа булғас ире, ике түгел, дүрт бисә алһа ла, бер хәл дә итеп булмай ине. Бары көндәшенең сығышына ғына екһенеүен белдерҙе:

- Көтөүсе балаһын тиң итмәһәң инде.

Сығыуға ыңғайлаған Абдрахман, ишек бауына тотонғас, боролоп, ҡатынына баштан-аяҡ күҙ йүгертте лә, тыныс, әммә ҡаты өндәште:

- Ауыҙыңдан башҡа бындай һүҙ сыҡмаç ул. Ә?

Айымбикә ҡарашын ситкә борһа ла, ризалашыуҙы хуп күрҙе:

- Йә.

* * *

- Әссәләмәғәләйкүм!

Урындыҡта йөн аялап ултырған ҡыҙы менән ҡатыны, Абдрахманды күреү менән, йылдам тороп, йүгермәләп киттеләр. Ҡатыны ҡаҙан аçтындағы ҡуҙҙарҙы өйөп, өçтөнә ҡыу ҡарағай ботаҡтарын һындырғылап һалды ла, төтәтә-төтәтә өрөп тоҡандырып ебәрҙе. Ҡыҙы урындыҡ биләп ҡабарып ятҡан йөндө урап алып ситкә шылдырып, урынына сағыу тирүгә, йөн баластар түшәне, мендәрҙәр ташланы. Атаһы урындыҡҡа терәлеүгә, көсәнеп тартып, уның болан тиреһенән тегелгән йөнлө итектәрен, сылғауҙарын систерҙе лә, ҡомған менән тас тотоп, тып итеп яңынан килеп баçты.

- Минең бисурамда көс хәтәр инде, аяғымды ҡуша йолҡоп ала яҙҙы, - тип көлә-көлә ҡулын сайҙы Абдрахман.

Ҡыҙының бындай шаяртыуҙарҙы яратмауын белһә лә, Хафиза иренә ҡуштанланы:

- Ҡуй инде, үҙең һаман малай итеп алып йөрөткәс.

Көнбикә бирешмәүен белдереп, эйәген сөйә биреп баçты. Аталы-әсәле был ҡыланыштан тағы ла күңеллерәк көлөштөләр.

- Шунан, ҡыҙым, Турысайҙы өйрәтеп буламы? - Абдрахман түшәктәр өçтөнә яйлап урынлашып, ҡатынының ит-май теҙгәнен күҙәтеп ултырҙы.

- Ыңғайлауын ыңғайлаған һымаҡ та, ҡулға ла килә, һыйпата ла, тик megmәй.

- Алла! Менеп тә ҡараныңмы әллә? - ир аптыраған була.

- Ырғып ҡарағайным, ҡуржырап, үрәпсеп китте-е!

- Ишетәһеңме, атаһы, өйөр айғырына һикергән. Шунан, тапап китһә, ул нимуйламаҡ кәрәк? Әйтһәңсе, тыйһаңсы өҙөп...

- Әсәң нимә тей, ана. Ҡабат улайтма, ҡырағай кейек менән һуғышып йөрөгән айғыр бит ул, бүренең башын йәнселтә тибә лә ҡуя. Унан өйөр башын өйрәтеү ҙә килешмәй, булһын ҡырағай.

Атаһын ашатып, уның күҙ ҡарашы аçтында бер аҙ иркәләнеп ултырғас, эңер ҡуйыра биреүгә, атаһы менән әсәһен ҡалдырып, күршеләге өләсәһе йортона йоҡларға китте ҡыҙ. Унда оло ағайҙарының бәләкәй ҡыҙҙары йыйылған. Шуларҙы юҡ-бар уйындар менән әүрәтеп, унан ятҡас, өләсәләренең әкиәттәрен тыңлап, төн юрғанын ябындылар. Ҡарға күмелгән мөһабәт Урал тауҙарының бер бөгәрендә генә оялаған кескәй ҡышлаҡ, әсәһенең ҡуйынындағы сабый кеүек, тау түшенә һырынып, йоҡоға талды.

* * *

Яҙ үҙ көсөнә инеп, битләүҙәрҙә йәшел үлән морон төртөү менән, йәйләүгә күсеп киттеләр. Башта бер нисә көн алдан эшселәр ебәрелеп, улар ялан кәртәләрҙе, тирмәләрҙе әҙерләне. Унан мал ҡыуылды, улар артынан ылауҙар эйәрҙе. Дүрт көн шау-шыу менән күсә торғас, урындарына барып етеп урынлашыуға тағы ла бер нисә көн китте. Эргә-тирә ер-һыуҙы байҡап сыҡтылар, үҙгәрештәр юҡмы, яттар килмәгәнме? Был эштәр башҡарылғас, эре мал салып, йәйләүҙе ҡотлап, ултырышып алдылар. Тағы ла бер аҙ баш-күҙ алғас, эргә-тирә йәйләүҙәргә, алыçтағыраҡтарға сапҡындар ебәрелеп, йыйын йыйып алыу хәбәре ебәрелде. Был ырыуҙарҙың бер-береһенең хәлен белеү, тәбрикләшеү, аралашыу тәртибе ине.

Ҡырлас ай яртылаш тулып, аяҡ өçтө баçып тороуға ҡунаҡтар килә лә башланы. Ҡунаҡ булышыуҙан бигерәк, илдә барған шөбһәле хәбәрҙәр тулҡынында булған ырыу башлыҡтары, был саҡырыуҙы кем башлар, тип көтөп кенә торалар ине. Иң беренсе ҙур ғаиләһен эйәртеп, Аҡбарыç ҡоҙалары килеп етте. Апаһын һағынған Көнбикәгә икеләтә байрам булды. Тик Баҙыян ауырлы булып, үтә лә хәлһеҙ һәм көйһөҙ икән. Ул тамағына аҙыҡ һайлап килештерә алмай, туҡтауһыҙ уҡшып, ҡоçоп йонсоно. Был хәлдәге апаһын күреп, еҙнәһен тағы ла нығыраҡ күрәлмәç булды ҡыҙ. Шул ҡупымға бала табам тип, ҡаҡ һөйәккә ҡалған дабаһаң!

Барыһы йыйылып бөтөп, инде ике-өс көндәй һыйлашҡас ҡына, иң алыçтағы үçәргәндәр килеп етә алды. Тоҡандан иң дөрөç хәбәрҙәр булырын белгәс, уны көтмәй ҙә мөмкин түгел ине. Ул бит Оло һыу буйынан килә. Ҡаҙаҡтарҙың да, урыçтарҙың да, башҡа халыҡтарҙың да яңылыҡтарын алып килә.

Быйылғы уйын-көлкө лә ғәҙәттәгесә булманы, шом барыбер үҙенекен итте, барыһы ла, ярыштарҙан бигерәк, аҡһаҡалдарҙың нимә хәл итерен ишетергә теләне. Ахырҙа, ирҙәр оло тирмәгә тупланып ултырҙы. Башта Тоҡанды тыңланылар. Унан, янғын кеүек гөлтөлдәп, бәхәс ҡупты. Һәр кем үҙ уйын әйтеп ҡалырға, һүҙен өçкә сығарырға тырышты. Олораҡтар өндәшмәүҙе хуп күрҙе, йәшерәктәр яғалашыуға барып еткәндә генә, екереп туҡтатты. Беренсе кис шулай ғауғалы булып, дөйөм фекергә килә алмайынса тамамланды. Икенсе көн дә шулай башланмаҡсы ине, Абдрахман, хужа булараҡ, теҙгенде үҙ ҡулына алды:

- Ағай-эне, ҡарыҡҡан ҡорт ише булмайыҡ әле! Аҡһаҡалдар һүҙен алға ҡуяйыҡ, шунһыҙ был йыйындан фәтүә

**✓ *Көнбикә үҙе генә күҙен сылатманы. Йәш түгеп кенә бер нәмә лә үҙгәртә алмаҫын белә ине ул. Ҡорҙа хәл ителгән икән, тимәк, был эште туҡтатыр көс юҡ.***



булмаясаҡ. - Унан һаман тынысլыҡ һаҡлаған ололарҙың иң абруйлыһы - бөрйән ырыуы аҡһаҡалы Томанға йөҙ борҙо. - Томан ағай, һин нимә уйлаһың?

Томан, дәрәжәһен белеп, һаҡалын семеткеләп ултырған ерене́н, ҡалҡына биреп яурындарын яҙҙы ла, үткер күҙҙәре өҫтөндәге саллана башлаған ҡаштарын йыйырып, һүҙ башланы:

- Һуғышҡа ҡалай ҙа әҙерләнергә кәрәк буласаҡ. Әммә ғәскәр менән сығырға түгел. Ҙур көстө артта ҡалдырып, яу менән килеүселәргә ҡаршы барырға. Теләктәшлек белдерһәк, улар беҙҙән күпме һыбайлы һорар? Биш меңлек? Ун? Бирербеҙ! Риза булырбыҙ, тик илгә индермәбеҙ. Инер булһалар, улар ғәскәр генә талап итмәҫ. Шуны булдырмау яғын ҡарар кәрәк. Унан, Тоҡан бей әйтеүенсә,ҡаҙаҡтар ҙа ярҙамға килмәксе.

Уның хәбәренән һуң, башҡалар бер тына шым булып торҙо ла берәр артлы һорауҙар яуҙырҙы:

- Яуҙың боролоп китерен кем белә? Бармы ундай хәбәр?

- Тоҡан бей әйтеүенсә, ғәскәр башҡорт иле аша уҙасаҡ!

- Ҡаҙаҡтарҙың беҙҙең менән булырына ышанаһығыҙмы?

- Баҫҡынсылар килешеүгә риза булмаһа, ул ғына ғәскәр ҡаршы тора алмаясаҡ бит, нинә төп көстө эстә ҡалдырабыҙ?

Аҡһаҡалдарҙың берене, Ҡазыхан, ҡулдарын күтәрҙе, тағы шым булдылар.

- Ҡаҙаҡтарға ышаныс юҡ, тик яу мәлендә беҙ улар ярҙамынан баш тартмайбыҙ. Заманында, уларға бәлә килгәндә, беҙ ҡалҡындыҡ, хәҙер улар бурысын ҡайтармаҡсы. Шулай булһын. Тоҡан бей алып килгән хәбәр буйынса, яу башҡорт иле аша үтмәксе, тик беҙҙең тағы ла төпкәрәк үтә алыусы кешеләребеҙ ҙә бар. Улар әйтеүенсә, яу дингеҙ яры буйлап үтеп китәсәк. Беҙ был хәбәрҙең икеһенә лә әҙер булырға бурыслы.

Батырҙар, бейҙәр, тархандар тағы шаулашты, төрлө фараздар менән баш ватты, ҡыҫҡырышып талашып, төкөрөк сәсеп, бәхәсләшеп алды. Унан тағы тындылар, тағы аҡһаҡалдарҙы тынланылар, тағы фекер төйнәнеләр. Иң ахырҙа, Томан, Абдрахманды албырғатып, шулай тип ҡуйҙы:

- Тоҡан бей, һин сик буйында, яу юлында ла иң беренсе һин буласаҡһың. Иң ауыры ла һиңә төшәсәк. Тик беҙгә һинең тоғро булыуың, һүҙеңдә тороуың кәрәк.

Уның тел төбө ҡайҙа алып барыуын яҡшы аңлап торһа ла, Тоҡан ҡаштарын өҫкә сөйөп, аптыраған тауыш сығарҙы, ҡапыл күҙҙәрен көсләп асып төбәлде.

Аҡһаҡал дауам итте:

- Аралар ышанысլы булһын өсөн туғанлашыуҙан да яҡшыраҡ юл юҡ икәне барыбыҙға ла мәғлүм. Шунлыҡтан, Абдрахман бей, Тоҡан бей менән арағыҙҙы нығытып ҡуйыу зарур.

Бейҙәр бер-берене́нә ҡарашып алды. Абдрахмандың был хаҡта уйлағаны ла булғанлыҡтан, ризалығын белдереп, баш ҡаҡты:

- Бындай хәйерле эш уң булыр.

Тик артабанғы ишеткәндәренән телһеҙ ҙә ҡалды.

- Абдрахман, Тоҡанға һинең ҡыҙҙы йәрәшеп ебәрәйек, алып китһен. Уның менән ебәрәсәк кешеләрҙе лә билдәләйек. Ошо бәләҡазаларҙы йырып сыҡһаҡ, оло туйы ла булыр.

Артабан нимәләр хаҡында һөйләшелгәнен ишетә лә, аңлай ҙа алманы Абдрахман. Тоҡандың ҡыҙын улдарының берене́нә алып бирәм, тип торғанда, берҙән-бер ҡыҙын ошо ташбаш ҡартҡа тоттороу түгелме? Ҡорға индерелгән өлкән улы Аллағол, тызырайып, атаһына ҡарап ҡалды. Ул да эштәрҙең былай әйләнеп китеүенән ҡәнәғәт түгел. Тик ҡапылдан, ҡаршы сығып, ғауға сығарыу ярамай ине, һәм Абдрахман, тешен ҡыҫып, йыйынды йомғаҡлап ҡуйҙы.

Артабан Абдрахмандың тирмәһендә сыр-сыу ҡупты. Хафиза, ғүмерҙә ҡыланмағанынса, ике усы менән башын ҡыҫып сүгәләп, үкһеп илап ебәрҙе. Хатта һәр ваҡыт сабыр булған өлкән байбисә Айымбикә лә, ҡулдарын күкрәгенә ҡаушарып, шаңҡып ҡалды. Ҡустылары ҡапылдан өндәшергә ҡыймайыраҡ торһа ла, Аллағол ярһыуынан бер урында тороп сыҙай алманы.

- Риза булмаҫ кәрәк, атай! Бындайға юл ҡуймаҫҡа кәрәк! Тоҡанға биш ҡыҙ биреп ебәргәндә лә, ышаныш булмаясаҡ! Атай!

Абдрахман алдындағы тулы туҫтағына төбәлеп, ауыр тын алып ултыра бирҙе.

- Һин өндәшмәһәң, мин барам! Тоҡанға биреп ебәрер ҡәрендәшем юҡ!

- Йә! - Атаһының ҡаты тауышы туҡтатты уны, - сыпранлама улай. Үҙем инәрмен иртәнсәк аҡһаҡалдар ҡашына.

Тик иртәнсәккә һөйләшеү ҙә бер нәмә лә бирмәне. Шулай булырын һиҙгәйне лә инде Абдрахман. Томан ҡарт ҡыҙын ук китә яҙҙы.

- Илде һаҡлап ҡалыу өсөн ут йотҡанда, һин, Абдрахман бей, үҙендекеләр өсөн генә йән атаһыңмы? Яу килер булһа, ундай ҡыҙҙарыбыҙҙы өйөрө-өйөрө менән ҡыуып алып китәсәктәр. Ни эшләрһең шунда?

- Улдарымдың берәйһенә Тоҡандың ҡыҙын алырбыҙ, тигәйнек бит.

- Улайтып йөрөр ваҡыт юҡ. Тоҡанды ҡулға килеп эләккәнендә короҡлап ҡалырға кәрәк. Уны һуңынан тотоп булмаясаҡ.

Быны үҙе лә аңлай бей. Тик балаһы өсөн йөрәге әрней. Әллә, бәлки, кәрәк тә булмаған туғанлыҡ өсөн ҡорбан итә бит ҡыҙын.

Был һөйләшеү иртәнге аш артында барһа, кискә салынаһы малдар айырып алынды, таңдан тороп әҙерлек башларға тейешле ялсылар йыйылды, ҡунаҡтар өсөн тирмәләр ҡоролдо. Бөтөн был эштәр менән Айымбикәнең үҙенә етәкселек итергә тура килде, Хафиза иһә илауҙан хәлһеҙләнеп йығылғайны. Уға ҡушылып, Баҙыян да буҫлыҡты. Көнбикә үҙе генә күҙен сылатманы. Йәш түгеп кенә бер нәмә лә үҙгәртә алмаҫын белә ине ул. Ҡорҙа хәл ителгән икән, тимәк, был эште туҡтатыр көс юҡ. Шулай тип уйлаһа ла, ниндәйҙер битарафлыҡ, хатта тынысլыҡ биләне үҙен. Әйтерһең, ул бына-бына нимәләр килеп сығырын, был бәләнән ҡотолорон белә. Еңгәләре үҙен әҙерләгәндә лә, никах уҡығанда ла, йәйләү ситендәге тирмәгә алып барып бикләп ҡуйғандарында ла ҡаршылыҡ күрһәтмәне, хатта артыҡ бошонманы ла кеүек. Кейәүҙе оҙата килгән еңгәләр ҙә артыҡ таушыу сығарманы, хатта саузалашмаһылар ҙа. Бей тотторған бүләктәргә риза булып, йәһәт кенә индереп яптылар ҙа киттеләр. Был хәл уларҙың да күңеленә хуш килмәй, үҙҙәрен хилаф эш ҡылып йөрөгәндәй тоялар ине, күрәһең.

Тоҡан, эскә үтеп, сыра менән генә яҡтыртылған ярымҡараңғы тирмәлә күҙе өйрәнгәс, улай-былай ҡаранып, кәләшен эҙләне. Унан, тирмә төбөндәге ҡараңғылыҡҡа боҫҡан аҡ һынды шәйләп, күпмәләр өҫтөнә үтеп ауҙарылды ла ҡыҫҡа йыуан аяҡтарын һуҙҙы. Арығайны ул, һитә балынан иҫереп тә өлгөргәйне. Уйламағанда кейәү булып китеү мәшәҡәттәре лә йонсотҡайны.

Артына ҡайҡая биреп, ҡыҙ яғына ҡараш һалды. Быны аңлаған кәләш, килә һалып, уның итектәрен тартып систерҙе. Ҡыҙҙың аяғын һалдырғанда, һыу алып килгәндәге хәрәкәттәрендә сағылған һығылмалыҡҡа, артыҡ ҡабаланмай, әммә йылдам ҡыбырлауына иғтибар итте Тоҡан. Ҡарашында ла артыҡ ҡурҡыу тойолмай. Башын эймәй, әйәген күтәрә төшөп, үтә ҡарай, әйтерһең, күрмәй ине. Булыр, тип уйланы, Тоҡан. Анау һауалы Абдрахмандың ҡыҙы лабаһаң, ҡанын һығып эскәндә лә сер бирмәйәсәк улар.

Бында килгәндә, аяҡтарын саҡ һөйрәп, бына-бына йығылып йоҡлап китер хәлдә ине ҡарт кейәү. Әле эргәһендә мәшәҡәтләнгән нәҙекәй һынды ҡарап ултыра торғас, уның ойоп барған ҡаны яйлап ҡына быҡырлап ҡайнап китте. Киң ҡулдаҡ эсендә йөрөгән йәш тәнден шыйғалаҡлығын тойғандай булды. Ҡаршыһындағы бынау нәфис муйын, юныլған йүкә ағасындай аҡ йөҙ, ҡоралай күҙҙәр уға булырға тора лабаһаң. Шул уйынан шәбәйеп китеп, туҫтаҡтан ҡымыҙ ҡойоп маташҡан кәләшенең алға төшкән бер толомонан тотоп тартты. Йәнәһе, шаяртты. Әллә хужалығын белдереүе булдымы. Толомо артынан ҡыҙ ҙа янына ҡолап китер, тип уйлағайны ла. Тик ни аралалыр усындағы толом һелкә тартып алынып, кире артҡа ташланды. Йылғырлыҡҡа, уның ҡулын һелкетә тартҡан көскә аптырағандай булды ла, бындай ҡыйыулыҡҡа йәне лә көйҙө. Һимеҙ бите тимгел-тимгел булып ҡыҙарып бүртенде, танау ярыҡтары киңәйеп тышылданы. Үҙ ҡатындарының берәйһе бындайҙы ҡылғанда, күптән тибелеп осор ине лә - сит ерҙә, бындай урында улай итеү ярамаҫ. Ярай, мәле етһен әле, өйрәтермен мин һине, тип эстән янап, кәләше һуҙған ҡымыҙлы туҫтаҡты ғына һелтәп ебәрҙе. Һауыт кейеҙҙәр өҫтөнә тәгәрәп китте. Уны алырға тип ынтылған ҡыҙҙы, беләгенән эләктереп, түшәктәр өҫтөнә атты. Уныһы түшәккә тейер-теймәҫтән, һеләүһен етеҙлеге менән кире ҡалҡынды ла тирмә ышығына һырынды. Тәбиғәте менән тупаҫ һәм ҡанһыҙ булған һәм ҡатын затын әҙәмгә һанламаған Тоҡанға кәләштең буйһонмауы бөтөн тәртиптәрҙән дә сығып киткәндәй күренеш ине, һәм ул, кәүҙәһенә хас булмаған етеҙлек менән тороп, ҡыҙ янына килде лә, баяғы толомон алып, усына урады. Сәсе артынан яҡынлаша барған йөҙгә ҡаҙалып ҡарап тора биргәс, биленләге һалып өлгөрмәгән хәнйәрен сығарып, толомдо төбөнән ҡырҡып ебәрҙе. Ҡапыл ысҡынған ҡыҙ артына ҡолап китте лә, тоҡосланып ҡалған сәс төбөн һәрмәп, ҡото осоуҙан ауыҙын асты, әммә тауышы сыҡманы. Тоҡан ҡулындағыларын ташлап, ултырған килеш артына шылышҡан ҡыҙҙың һыңар аяғынан эләктереп алып, үҙенә табан һөйрәне. Шул ыңғайы уның өҫтөнә ауып, нескә кәүҙәне бирән ҡорһағы менән иҙҙе.

**(Дауамы бар).**

МАТУР ХӘТИРӘ

# ТӘҘРӘНЕ ҠАЙЫРЫП...

## тарих үҙе ҡарай...

**"Башҡортостан" гәзитенән таптым был мәҡәләне. "Ғәлиәбану"ҙың яҙылыу тарихынан бигерәк, "Аҙнаның өс көнө ирҙәр өсөн тәғәйенләнһә, ике көнөндә ҡатын-ҡыҙҙар йөрөгән бында", тигән һөйләм уйға һалды. Нимә тураһында һүҙ барғанын, уҡығас, аңларһығыҙ.**

Тәҙрәне ҡайырып, тарих үҙе ҡарай... Һүҙем Баймаҡ районының Юлыҡ ауылы уртаһында тупып барған боронғо, әммә елдәр шауҡымына, ҡар-ямғырға бирешмәйенсә, тормош ауырлыҡтарын үҙ иңендә татып, ауылдаштары менән бергә ҡайғыларҙы күтәреп, уларҙың тормошон һис бер һүҙһеҙ генә күҙәтеп торған өнһеҙ ике ҡатлы йорт тураһында булыр.

*Таң әтәстәре ҡысҡыра,*
*Әллә таң ата микән?*
*Тәҙерәнән ҡарап тора,*
*Ғәлиәбану*
*һылыуым, иркәм,*
*Әллә ярата микән?*

Ошолайтып меңгөрҙәнем дә уйға ҡалдым... Был йыр - мөхәббәт йыры. Мөхәббәт ул - иман! Мөхәббәт ул - мәңгелек! Ер йөҙөнә күпме Ғәлиәбануҙар тыуҙы, күпме Хәлилдәр килеп китте. Ошо йырҙы күпме ғашиҡ йәндәр бер-берене́нә йырланы, күпме йәш йөрәк уны яңыртты һәм ул бөгөнгә тиклем беҙҙең күңелдәрҙә. Ошондай ҙа киң танылыу яулаған, оҙон ғүмерле пьеса булды Мирхәйҙәр Фәйзиҙең "Ғәлиәбану"ы. Ә беҙ уның тарихын, яҙылыу тарихын беләбеҙме һуң?

Күптәрҙең йөрәген яулаған был пьесаның тыуған урыны - Баймаҡ районындағы Юлыҡ ауылы. Бик боронғо ауыл. Ошо пьесаның авторы Мирхәйҙәр Фәйзиҙең Юлыҡҡа килеп юлығыуына шул яҡтарҙа алтын сығарыу эштәрен алып барыусы данлыҡлы Рәмиевтәр сәбәпсе була. Ул осорҙа Ирәндек буйҙарында алтын табыу прискылары булдырып, төбәктә башҡа бик ҙур хужалыҡ эштәрен йәйелдереп ебәргән атаҡлы Рәмиевтәр үҙҙәре Юлыҡ ауылына 1862 йылда килеп төпләнә. Мөхәмәтсадиҡ Рәмиев ике улын - Шаҡир һәм Закирҙы - эйәртеп, ҡатыны Гәүһәр менән Ырымбур далаларынан Юлыҡ ауылына күсенеп килә. Ауыл уртаһында таштан төҙөлгән ике ҡатлы йортта йәшәйҙәр. Йортонда тирә-йүнгә йән биреп торған берҙән-бер китапхана булдыра. 1919 йылда Закир Рәмиев, ошо китапханала эшләргә тип, Ырымбурҙан Мирхәйҙәр Фәйзиҙе алып ҡайта. Рәмиев сит илдәрҙән китаптар алдырта, китапхана заманына күрә бик бай була. Аҙнаның өс көнө ирҙәр өсөн тәғәйенләнһә, ике көнөндә ҡатын-ҡыҙҙар китап уҡырға йөрөй бында.

Ырымбур далаларынан килеп төшкән Мирхәйҙәр Фәйзиҙе Юлыҡ ауылының тәбиғәте хайран ҡалдыра. Оҙонтау уның иң яратҡан урыны була. Шишмәнән сыҡҡас та, сәскәле оҙон үр китә, ә тирә-яғы - урман, йәшел хәтфә, болонлоҡ. Ошо ерҙәр йәш егеттең уй-хисенә, йөрәк тибешенә бәйләнгән дә инде. Бәлки, хозур тәбиғәт ҡосағы уның ижадына тәьҫир иткәндер?

Был пьесаны яҙырға дәртләндергән тағы бер сәбәп бар. Ул - ауылдың иң оҫта гармунсыһы Вафа исемле йәш егет. Ул ваҡытта Юлыҡ ауылы егеттәрен Ырымбурға һалдатҡа ҡаралырға ебәрәләр. Ике йәш егет ошонда танышып, дуҫ булып китә. Фәйзи Вафаның өҙҙөрөп гармунда уйнауын бик ныҡ оҡшата, уның янынан китмәй. Һәм уны үҙенең пьесаһына төп герой итеп һайлай. Шулай итеп, "Ғәлиәбану" пьесаһы ярала...

Ауыл йәштәренән айырылып торған гармунсы егет Вафа Хәлилгә әүерелеп китә. Ә ябай ауыл ҡыҙы Гөлсирә уның һөйгән ҡыҙы Ғәлиәбануҙы уйнай.

Йылдар үтә тора, быуат алмашына... Уларҙың күптәре юҡ инде хәҙер. Гөлсирә оҙон ғүмерле була, ологая. Әммә шул әбейҙең урамдан бер үтеп китеүе үҙе бер йәм ине. Уның кеүек, йорт та ҡартайҙы... Әммә әле лә тора! Ауыл уртаһында таушалып, заман менән бергә ҡартайып туҙған йорт әле булһа текә, ғорур баҫып, шул замандың берҙән-бер тере шаһиты булып тора. Миңә ҡалһа, уның йәне бар кеүек... Тәҙрәне ҡайырып, тарих үҙе ҡарап торғандай! Тик әйтергә теле генә юҡ. Ул бит барыһына ла шаһит! Ауыл халҡының яҙмышына, үткәненә, бөгөнгөһөнә. Киләсәктә лә ул шулай торорға тейеш! Ул бит үҙе бер һәйкәл!

**Нурзиә ӘБДРӘШИТОВА,**
**Башҡортостандың халыҡ артисы.**
**Баймаҡ районы.**

✓ *Алдан килешеп, бер үк ваҡытта һөжүм итһәк, беҙҙең еңеү көн кеүек асыҡ. Беҙҙең ҡулда бығау булһа ла, һаҡсылар ҡоралланған булыуға ҡарамаҫтан да, еңеү беҙҙең яҡта буласаҡ.*



ИНТЕРНЕТТАН



# ИРТӘЛӘРҘЕ...

## матур кәйеф менән

■ Йөрәк сәләмәтлеген һаҡлау өсөн тәғәйенләнгән витаминдар һәм минераль өҫтәмәләрҙең организмға файҙаһы юҡ, ти ғалимдар. Һәр хәлдә, улар йөрәк өйәнәге, инсульт һәм йөрәк-ҡан тамырҙары системаһы проблемаларынан һаҡлай алмай. Алабама университеты ғалимдары 2 млн кеше ҡатнашлығында һынауҙар үткәргән. Витаминдар эсеү йөрәк һәм ҡан тамырҙары менән бәйле сирҙәрҙән үлеү хәүефен түбәнәйтмәгән. Әммә шул үк ваҡытта витаминдар етештереү өлкәһе көндән-көн сәскә ата. Яңынан-яңы өҫтәмәләр уйлап сығаралар, уларҙы шаштырып маҡтайҙар. 2024 йылға донъя индустрияһы 278 миллиард долларға етәсәк тип фараҙлана. Халыҡ араһында популяр булыуға ҡарамаҫтан, витамин өҫтәмәләре дөрөҫ тукланыуҙы алыштыра алмай.

■ Бөйөк Британия ғалимдары билдәләүенсә, ҡатын-ҡыҙҙарға ир-егеттәргә ҡарағанда оҙайлыраҡ йоҡо талап ителә. Бактиһәң, ҡатын-ҡыҙҙарҙың баш мейеһе бер юлы төрлө мәсьәләләрҙе хәл итеүгә һәләтле һәм көн дауамында көсөргәнешлерәк эшләй. Баш мейеләренең "катмарлы" булыуы сәбәпле, ҡатын-ҡыҙҙарға оҙағыраҡ йоҡлау талап ителә. Йоҡлаған саҡта мейенең хәтер, уйҙар, телмәр өсөн яуап биргән өлөшө хис-тойғолар тыуҙырған көсөргәнештән арынып, ял итә икән. Бығатиклем ғалимдар артыҡ йоҡлауҙың да зыян булыуы хаҡында белдергәйне. Йоҡо туймау йөрәк-ҡан тамырҙары системаһы эшмәкәрлегенә, ҡан баҫымына йоғонто яһай, ә артыҡ йоҡлау йөрәк сирҙәренә алып килә.

■ Кешелек һаман яман шешкә ҡаршы дарыу таба алмай. Америка ғалимдары яңы методика уйлап тапҡан, уның нигеҙендә ябай өрәм үҫемлеге ята. Табиптар фекеренсә, әрем 16 сәғәт эсендә яман шеш күҙәнәктәренең 98 процентын юҡҡа сығарырға һәләтле. Уның составында артемизин тигән матдә бар, әгәр ҙә уны тимер менән бергә ҡулланғанда, онкологик сирҙәрҙе дауалап буласаҡ. Әлеге мәлдә тикшеренеүселәр әремдән дарыу яһауҙы өйрәнеү өҫтөндә.

■ Күптәр мөһим ваҡиғалар алдынан стресс кисерә, был иһә уларҙың кәйефенә йоғонто яһай. Америка ғалимдары билдәләүенсә, иртән кәйефең ниндәй, көнөң дә шулай үтәсәк. Ә ниндәйҙер ваҡиғаны көтөү, йәиһә алда ҡатмарлы мәсьәләне сисеү талап ителһә, кеше мотлаҡ тулҡынланыу тоя. Һынауҙарҙа 240 кеше ҡатнашҡан. Иң йәш кешегә 25 булһа, иң олоһона 65 йәш була. Һәр кис һәм иртә белгестәр уларға бер генә һорау биргән: яңы көндән нимә көтәһең? Ике аҙна дауамында ҡатнашыусылар тестар тултырған, улар буйынса стресс кимәле, шулай уҡ хәтерҙең эшмәкәрлеге тикшерелгән. Бактиһәң, иртән тулҡынланыу тойғандар көндөҙ стресҡа бирешеп барған, уларҙың хәтерҙәре лә насарырыҡ булған. Иртән уянғас та кәйефте күтәрергә кәрәк, тип кәңәш итә белгестәр. Кемгәләр бының өсөн матур йыр тыңлап алыу, кемгәләр күнегеүҙәр яһау, кемгәләр тәмле итеп сәй эсеп алыу ҙа етә.

■ Төнөн йоҡлаған ерҙә ут яныптораһа, кешенең биологик ритмдары боҙола, сөнки йоҡо өсөн кәрәкле гормон мелатонин бүленеп сығыу кәмей. Был гормон етешмәһә, диабет, һимереү, хатта яман шеш башланыуы ихтимал, ти белгестәр. Ҡыҙыл һәм әфлисун төҫөндәге стеналар стресс кимәлен күтәрә, тире ҡысыи башлай. Был турала Корнелль университеты ғалимдары иҫкәртә. Стеналар ни тиклем сағыуыраҡ, кеше шул тиклем тиҙерәк ашай икән, шуға ла ашһыу бүлмәһе сағыу булмаһын, тиҙәр. Йоҡо бүлмәһенең стеналары зәңгәр булһа, яҡшыраҡ, шул саҡта йоҡо туясаҡ.

КИНӘЙӘНЕ КИҢӘЙТЕП...

**Ишеттегеҙме яңы банк тураһында? Дөрөҫөрәге, ул яңы банк түгел, ул әлмисаҡтан бирле бер туктауһыҙ эшләй. Төн уртаһында сәғәт уктары ун икелә осрашҡас, һеҙҙең иҫәпкә теп-теүәл 86400 һум аҡса күсә. Америкала шул күләмдә доллар күсә, тиҙәр... Әле беҙгә ул аҡса бирәмегенең исеме лә, курсы ла мөһим түгел, иң мөһиме, ул Ер шарындағы Әҙәм балаларының һәммәһенә лә күсә. Шул аҡсаны бер тәүлек эсендә тотоноп бөтөргә кәрәк, сөнки әлеге лә баяғы төн уртаһында ул аҡса юҡҡа сыға һәм уның урынына әлеге лә баяғы 86400 һум "кеҫәгә" төшөп тә ята. Хөрриәт! Ул аҡсаны нисек дөрөҫ тотонорға һуң? Бынығы инде һәр кемдең шәхсән эше, кем бирәү әйтмешләй, аҡсаларҙың еҫе юҡ һәм аҡса бер ваҡытта ла күп булмай. Уйланығыҙ, йәмәғәт, уйланығыҙ. Мин иһә күптән уйланам. Сөнки... ул беҙҙең иҫәпкә көн дә бушлай күсеп торған 86400 секунд ваҡыт бирәмеге... Бөгөн кешеләр араһындағы мөнәсәбәт күп осраҡта аҡса менән иҫәпләнгән мәлдә ваҡытты һумдар менән сағыштырып уйлау мейене көсөргәнешлерәк эшләтә. Секундтарға күсеп уйлап ҡарайыҡ әле, ваҡыт ҡәҙерлеме, әллә аҡса бирәмегеме? Ваҡыт үлсәме алдараҡ барлыҡҡа килгәнме, әллә аҡса бирәмегеме? Риторик һорау, тиер, күптәр. Ярай, улайһа аҡса менән иҫәпләшеү барлыҡҡа килеү тураһында кинәйәне иҫкә төшөрәйек. Аҡса менән иҫәпләшеү, туранан-тура булмаһа ла, кешенең ваҡытҡа ҡарата мөнәсәбәтен үҙгәртеүе көн кеүек асыҡ. Шулай итеп, тағы бер кинәйә.**

# НИМӘ ҠӘҘЕРЛЕ?



Ҡулдарына шымартылған таш тотҡан эшселәр яй ғына бер-береһенең артынан атлай. Дүрт шеренгалыҡ ҡолдар теҙеме саҡрымдан ашыу оҙонлоҡҡа һуҙылған. Таш сығарған урындан тәҙәлөп ятҡан ҡалаҡәлғәгә шул тиклем арауыҡ. Ҡайҙа ҡарама, һаҡсылар - һәр ун ҡолға берәү. Бер яҡ ситтә, шымартылған таштарҙан һалынған ун өс метрлыҡ бейеклектәге яһалма тау башында Кратий эш барышын дүрт ай буйына күҙәтеп ултыра. Уны бер кем дә борсомай, уйҙарын бүлмәй. Ҡолдар ҙа, һаҡсылар ҙа үҙ яҙмышына күптән күнгән, ысынбарлыҡты нисек бар, шулай ҡабул итеп өйрәнгәндәр, Кратийға иғтибар ҙа итмәйҙәр. Ә ул үҙ уйҙарына сумған. Дәүләт ҡороло-шон шундай итеп үҙгәртергә кәрәк: киләһе мең йыллыҡтарҙа ла Ер шарындағы барлыҡ кешеләр - ҡолдар ҙа, дәүләт башлыҡтары ла жрецтарға хеҙмәт итергә тейеш. Кратий дүрт ай дауамында тик шул турала ғына фекер туплай.

* * *

Тышҡы ҡиәфәте менән үҙен хәтерләткән икенсе берәүҙе ҡалдырып, Кратий тәхетенән аҫҡа төштө, париғын систе, өҫ кейемен алыштырып кейҙе. Һаҡсылар башлығына ҡулдарына бығау һалырға бойорҙо. Хәҙер ул башҡа ҡолдарҙан бер нәмә менән дә айырылмай ине. Жрец үҙ теләге менән Нард исемле иң йәш, көслө бер ҡолдоң эргәһенә баҫты. Ул күптән инде был егеттең башҡаларҙан айырылып тороуына иғтибар иткәйне. Нардтың ҡарашында ниндәйҙер аңлашылып етмәгән өмөт тойғоһо сағыла, башҡалар кеүек төшөнкөлөккә бирелеп, башын түбән эймәгән. Уның йөҙө ҡай саҡ үтә уйсан, ҡай саҡ аңлашылмаған тойғоларҙан балҡып китә. "Тимәк, был егеттең ниндәйҙер маҡсаты бар", тигән фекергә килгәйне Кратий. Әле уйҙарының дөрөҫлөгөн тикшереп ҡарарға булды.

* * *

Ике көн буйына ул Нардтты күҙәтте, ашаған ваҡытта ла, йоҡларға ятҡанда ла эргәһендә булырға тырышты. Өсөнсө көндә йоҡларға ятҡас та, Кратий, уфтанып, Нард ишетерлек итеп: "Был тормош ғүмер буйы шулай дауам итерме икән ни?" - тине.

Йәш ҡол ҡапыл тертләне, күршеһе яғына боролоп ятты. Уның күҙҙәрендә ярһыу осҡондар балҡый ине.

- Юҡ, былай оҙаҡ дауам итмәйәсәк. Минең аныҡ планым бар. Һин, бабай, шул маҡсатты тормошҡа ашырыуҙа минә ярҙам итәсәкһең, - тине ул шыбырлап ҡына.

- Ниндәй план? - тигән булды Кратий, иҫе китмәй генә иҫнәп.

Нард ярһып, ышаныслы итеп аңлата башланы.

- Һин дә, мин дә тиҙҙән азат кеше буласаҡбыҙ, ҡоллоҡтан ҡотоласаҡбыҙ. Иҫәпләп ҡарағаның бармы, бер ҡолға ун һаҡсы ҡуйылған. Беҙгә аш бешергән ун биш ҡатын-ҡолға ла бер һаҡсы. Алдан килешеп, бер үк ваҡытта һөжүм итһәк, беҙҙең еңеү көн кеүек асыҡ. Беҙҙең ҡулда бығау булһа ла, һаҡсылар ҡоралланған булыуға ҡарамаҫтан да, еңеү беҙҙең яҡта буласаҡ. Әмәлен тапһаң, бығауҙарҙы ла ҡорал урынына ҡулланып була. Һаҡсыларҙы ҡоралһыҙландырып, бығауҙарҙы уларға тағасаҡбыҙ.

- Эх, һин, йәш егет, - тине Кратий, көрһөнөп. - Һинең планың аҙағына тиклем уйланып бөтөлмәгән. Эйе, һаҡсыларҙы ҡоралһыҙландырып була. Әммә хаким иртәгә үк улар урынына яҡшыраҡ ҡоралланған яңы ҡәүем ебәрәсәк, баш күтәргән ҡолдарҙы ҡанға сумдырып яҙалаясаҡ.

- Юҡ, бабай, мин был турала яҡшылап уйлағанмын. Беҙ ғәскәр илдән ситтә булған ваҡытта һөжүм итәсәкбеҙ. Был ваҡыт етеп килә. Һиҙәһеңме, ғәскәрҙе яңы походҡа әҙерләйҙәр, өс айлыҡ аҙыҡ запасы туплайҙар. Тимәк, өс айҙан ғәскәр кәрәкле урынға барып етеп, һуғыш башлаясаҡ. Һөжүм ваҡытында ул хәлһеҙләнәсәк, әммә еңәсәк, баҫып алынған халыҡ иҫәбенә ҡолдар һанын арттырасаҡ. Беҙгә нәҡ өс айҙан, һуғыш башланған көндә һөжүм итергә кәрәк. Бындағы боларыш тураһындағы хәбәрҙе сапҡындар тик бер айҙан ғына алып барып еткерәсәктәр. Хәлһеҙләнгән армия кире әйләнеп ҡайтҡансы, тағы өс айҙан артыҡ ваҡыт үтәсәк. Дүрт ай эсендә ғәскәрҙе ҡаршы алыуға беҙ әҙер буласаҡбыҙ - беҙҙең ғәскәр хаким ғәскәренән кәм булмаясаҡ. Ҡоллоҡҡа төшкәндәр ҙә беҙҙең яҡҡа сығасаҡ. Мин барын да алдан уйланым, ҡарт.

- Дә, егет, һинең план буйынса, ысынлап та, һаҡсыларҙы ҡоралһыҙландырып, армияны ла еңергә була. Ә артабан ҡолдар ни эшләр ҙә, һаҡсылар, һалдаттар ни ҡыйратыр?

- Әлегә мин был турала төптән уйлағаным юҡ. Әммә ҡолдар ҡабат ҡол булыуҙан ҡотоласаҡ - быны мин яҡшы аңлайым. Элек ҡол булмағандар ҡолға әйләнер, моғайын, - тип, Нард уйының аҙағын ышаныслыһыҙ ғына тамамлай.

- Ә һин еңгәс, жрецтар кем буласаҡ, ҡолмо, әллә ирекләме?

- Жрецтармы? Мин был турала уйлағаным юҡ. Минеңсә, улар әлеге хәлендә ҡалырға тейеш, сөнки жрецтарҙы ҡолдар ҙа тыңлай, уларҙың һүҙенә хакимдар ҙа ҡолаҡ һала. Әлбиттә, уларҙы аңлауы ҡыйын, әммә уларҙан артыҡ зыян юҡ. Әйҙә, Аллалар тураһында һөйләһендәр, ә беҙ үҙ ғүмеребеҙҙе нисек матур итергә үҙебеҙ белербеҙ.

- Әлбиттә, матур тормошҡа бер ни ҙә етмәй, - тип яуаплай хәйләкәр жрец.

* * *

Әммә Кратий был төндә керпек тә ҡаҡмаған. Ул уйға баткан. "Әлбиттә, егеттең планы тураһында фирғәүенгә хәбәр итеп, уны язаға тарттырырға була, - тип фекер йөрөткән ул. - Әммә был ғына хәлде үҙгәртмәйәсәк, ҡол һәр саҡта ла ҡоллоҡтан азат булыу тураһында хыялланасаҡ. Нард кеүектәр яңынан тыуасаҡ. Тимәк, дәүләт эсендәге хәүеф бер ваҡытта ла бөтмәйәсәк".

Кратийҙың төп бурысы - ерҙәге бар халыҡты буйһондороп, ҡол итеү. Әммә ҡурҡытып, көс менән генә кешене мәңге ҡоллоҡта тотоп булмай. Һәр айырым кешегә, бөтөн халыҡтарға ла йоғонто яһағандай психологик алым уйлап табырға

✓ ***Кеше уйынан да көслөрәк нәмә юҡ был донъяла. Тик уйҙы һүҙгә әйләндерә белергә кәрәк. Шул саҡта ғына ул тарих ағышын үҙгәртерлек көскә эйә. Һүҙҙе ваҡытында әйтә белергә лә кәрәк.***



кәрәк. Кешеләрҙең аңын томалап, уларға ҡоллоҡтоң иң ҙур бәхет икәнен күңелдәренә мәңгелеккә һеңдерергә кәрәк. Үҙенән-үҙе үсешкән яңы программа уйлап табып, халыҡтарҙың үсешен Кратий теләгәнсә генә, хата юлдан ебәреп, ысынбарлыҡта аҙаштырыу зарур. Жрецтың фекерләү тиҙлеге арта барып, ул хатта ҡулдарындағы бығауҙарын да онота. Һәм ҡапыл, йәшен ялтлағандай, Кратийҙың аңында яңы программа хасил була. Әле ул уның асылына, фекеренең һәр өлөшөнә төшөнөп тә бөтмәй, әммә яңы программа шул хәтлем киң масштаблы булыуын, бөтөн Ер шарын солғап аласағын яҡшы төшөнә ул һәм үҙенең бөтөн ер йөҙөнә хужа буласағын асыҡтан-асыҡ тоя.

* * *

Аяҡ-ҡулы бығаулы килеш һәндерәлә ятҡан жрец үҙ аңының көсөнә үҙе һоҡлана. "Таң һарыһынан ҡолдарҙы эшкә ҡыуған ваҡытта мин һаҡсылар башлығына күҙ ҡыҫасаҡмын. Ул мине ситкә алып китәсәк һәм бығауҙарымды сисәсәктәр. Тыныс ҡына ултырып, мин яңы программаның һәр өлөшөн яңынан уйлап сығасаҡмын һәм кешелек донъяһы бөтөнләй икенсе юлдан китәсәк. Башҡа һыймаҫлыҡ уй бит был! Бары бер нисә һүҙ әйтәсәкмен... һәм бөтөн донъя минә буйһонасаҡ, минең уйым алдында баш эйәсәк. Аллаһы Тәғәлә, ысынлап та, кешегә Йыһандағы иң ғәйрәтле көс биргән. Кеше уйынан да көслөрәк нәмә юҡ был донъяла. Тик уйҙы һүҙгә әйләндерә белергә кәрәк. Шул саҡта ғына ул тарих ағышын үҙгәртерлек көскә эйә. Һүҙҙе ваҡытында әйтә белергә лә кәрәк. Иртәгә әйтмәһәм, һуң буласаҡ, сөнки ҡолдар баш күтәрергә әҙерләнә. Ысынлап та, Нардтың планы тормошҡа ашырлыҡ итеп уйланылған. Әммә мин бер кәлимә фекерем менән генә уны ла, уның тоҡомдарын да мәңгелеккә ҡол хәлендә ҡалдырасаҡмын". Шулай уйлай Кратий, үҙ фекеренән ҡәнәғәтлек тойғоһо кисерә.

* * *

Иртәнсәк Кратийҙың ымы буйынса һаҡсылар башлығы уның бығауҙарын сисә. Икенсе көнөнә үк жрецтар башлығы үҙе янына ҡалған биш жрецты һәм фирғәүендә саҡыра. Телмәрен ул былай башлай:

- Хәҙер минең ауыҙымдан сыҡҡан һүҙҙәрҙе бер кем дә яҙып алырға ла, башҡаларға һөйләргә лә тейеш түгел. Һеҙҙән башҡа мин уны бер кемгә лә һөйләмәйәсәкмен. Мин ерҙә йәшәгән бөтөн кешеләрҙе фирғәүенебеҙҙең ҡолона әйләндерәсәк асыл уйлап таптым. Быны күп һанлы ғәскәр менән дә, оҙайлы һуғыштар юлы менән дә эшләп булмай. Әммә мин уны бер кәлимә фекер менән тормошҡа ашырасаҡмын.

Артабан Кратий һәр һүҙенә баҫым яһап, телмәрен дауам итә:

- Минең һүҙҙәрҙән һуң ике көн дә үтмәҫ, был донъяның ҡырҡа үҙгәреүенә үҙегеҙ шаһит булырһығыҙ. Ҡарағыҙ, аяҡ-ҡулы бығаулы менәрләгән ҡол көн һайын таш ташый. Уларҙы бихисап һаҡсы һаҡлай. Беҙ быға тиклем ҡолдар һаны ни тиклем күп булһа, дәүләт тә шул тиклем көслөрәк була, тип уйлай инек. Әммә ҡолдар һаны артҡан һайын дәүләт өсөн уларҙың баш күтәреү ихтималлығы ла арта бара. Көндән-көн беҙ ныҡыраҡ ҡоралланған һаҡсылар һанын арттырырға мәжбүрбеҙ. Ҡолдар файҙалыраҡ эшләһен өсөн уларҙы яҡшыраҡ туйындырырға кәрәк. Шуныһы, улар ауыр физик эште башҡара алмаясаҡ. Әммә улар барыбер ялҡау, етмәһә баш күтәреү тураһында хыялланалар. Хәҙер һаҡсылар ҙа ялҡаулана бара. Ҡарағыҙ, уларҙың ҡулындағы ҡамсылар элекке кеүек шыйлап тормай. Әммә минең һүҙҙәрҙән һуң ҡолдар йүгереп йөрөп эшләйәсәк. Иң мөһиме - уларға һаҡсылар ҙа кәрәкмәйәсәк. Һаҡсылар иртәгәнән үҙҙәре ҡолға әйләнәсәк. Быны бер юл менән генә эшләп була. Бөгөн эңер төшкән мәлдә һәр кемгә фирғәүендең указын уҡып ишеттерергә кәрәк. Ул былай яңғырай: "Иртәнән башлап бөтә ҡолдарға ла тулы ирек бирелә. Тәҙөләш урынына алып килгән һәр таш өсөн ирекле кешеләргә бәрәр һум аҡса түләнәсәк. Аҡсаны аҙыҡ-түлеккә, кейем-һалымға, торлаҡҡа, ҡимммәтле һарайҙарға, хатта ҡаланың үҙенә алмаштырырға мөмкин. Иртәнән башлап һеҙ барығыҙ ҙа азат кешеләр".

Кратийҙың телмәрен тыңлап бөткәс, жрецтарҙың иң олоһо былай ти:

- Кратий, һин иблис тоҡомонан. Һинең уйың ерҙә йәшәгән халыҡтарҙың булмышын ҡара һөрөм кеүек ҡаплаясаҡ.

- Ярай, мин демон булайым. Киләсәктә Кратий уйлап тапҡанды демократия тип атаясаҡтар, - ти ул.

* * *

Указдың йөкмәткеһен эңер төшкәс, ҡолдарға уҡып ишеттерәләр. Улар үҙ ҡолаҡтарына үҙҙәре ышанмай, шаҡ ҡата. Күптәр төнө буйы йоҡламай, алдағы бәхетле тормош тураһында уйлана, яңы пландар ҡора. Икенсе көнөнә жрецтар менән фирғәүен шымартылған таштарҙан өйөлгән яһалма тау башына менеп, ни булырын күҙәтә. Улар шаҡ ҡатырлыҡ күренештең шаһиты була. Ирек алған меңәрләгән ҡол бер-береһен тапай-тапай, йүгереп йөрөп таш ташый. Хәллерәктәре хатта икешәр таш күтәргән. Кисәге һаҡсылар ҙа, ҡолдар менән буталып, таш ташыуға күскән. Бығауҙарҙан ҡотолоп, үҙҙәрен ирекле тойған ҡолдар тиҙерәк күберәк аҡса туплап, бәхетле тормош ҡорорға тырыша. Кратий ҙур ҡәнәғәтлек тойғоһо кисереп, уйхыялының нисек тормошҡа ашыуын тағы бер нисә ай күҙәтә. Уйлағаны юш килеүгә ҡыуана ул. Әммә үҙгәрештәр ул уйлағандан да артығыраҡ булып сыға. Йүнселерәктәр төркөмдәргә бүленеп, ташты арбаларға тейәп ташый башлай. Уларҙың хатта ялға туҡтарға, тамаҡ ялғарға ла ваҡыты юҡ. Шуға күрә аҡса хаҡына һыу ташып эсереүселәр, аш бешереүселәр барлыҡҡа килә. Табиптар ҙа хәҙер үҙ ярҙамын тик аҡса иҫәбенә башҡара, имгәнгәндәргә элеккеләй ярҙам ҡулы һуҙа. Юлдағы хәрәкәтте яйға һалыусылар барлыҡҡа килә. Тиҙҙән, тәртип булһын тип, ирекле ҡолдар үҙҙәренә яңы түрәләр, судьялар һайлай башлай. Ирекле кешеләр өсөн был тормошта йәшәүҙең мәғәнәһе үҙгәрә. Йөкмәткеһе лә үҙгәрә, әммә асылы шул килеш ҡала.

Меңәр йылдар дауамында тиргә батып, элекке ҡолдар йүгерә-атлай таш ташый... Уларҙың тоҡомдары мәғәнәһеҙ йүгереүҙе һаман да дауам итә...

ШУЛАЙ ИТЕП...
**Йәмәғәт, башта әйтелгән 86400 һанын иҫләйһегеҙме? Нимә ҡәҙерле, аҡсамы, әллә ваҡытмы? Ғүмүмән, ваҡытты аҡса бәрәмегә менән үлсәп буламы? Ваҡыт - аҡсамы, ысынлап та? Әллә...**

**Исмәғәм ИСМӘҒИЛЕВ**
**әҙерләне.**

---

СӘЛӘМӘТ БУЛ!



# ИЛЛЕ ЙӘШТӘН ҺУҢ...

## Еләк-емеш файҙаһы

Постменопауза ваҡытында 6 ай дауамында 60 мг изофлавондар булған таблеткалар ярҙамында фитоэстерогендар ҡабул иткән ҡатын-ҡыҙҙар когнитив функцияларҙың һәм күңел торошонон яҡшырыуын билдәләй. Изофлавондар үҙәк нервы системаһына эстрогендарға (ҡатын-ҡыҙҙарҙың енси гормоны) оҡшаш тәьҫир яһай, тип иҫәпләнә. Атап әйткәндә, уларҙың мейеләге өйрәнеүгә һәләт һәм хәүеф кеүек функцияларға тәьҫире тураһында мәғлүмәттәр бар. Хайуандарҙа үткәрелгән тәжрибә күрһәтеүенсә, когнитив функцияларға фенол кислоталарының, бигерәк тә антиоксиданттарға, елһенеүгә, гипоксияға ҡаршы тороуға булышлыҡ итеүсе, ҡандың ойоуын түбәнәйтеүсе, баш мейеһе эшмәкәрлеген яҡшыртыусы, Альцгеймер сире һәм ишемия ваҡытында функцияларҙың тайпылышын кәметеүсе, мейенең глюкозаны ҡулланыуын арттырыусы ферула кислотаһының йөғонтоһо асыҡ күренә. Фенол кислоталары алма, груша, айва, виноград, манго, ҡайын еләге, ҡара көртмәле, мүк еләге, ҡыҙыл көртмәле, ҡәбеҫтә, татлы борос, томаттар, ҡуҙғалаҡ, сельдерей, чабер, ирәүән, портулак, сәй, кофе, шоколад, май бирә торған үҫемлектәрҙең орлоҡтары, баҡса, ҡурай еләктәрендә, ҡыҙыл виноград һутында бар. Ниһайәт, ҡайны бер продукттарҙа серотонин - ҡәнәғәтлек медиаторы булыуы асыҡлана. Серотонин сығанағы булып банан, ананас, әстерхан сәтләүеге, авокадо, томаттар тора.

## 40 йәштән һуң нисек итеп фигураны һәм тиренең шымалығын һаҡларға?

Тиренең торошон иҫәпкә алып туҡланырға кәрәк, йәғни туҡланыу рационына уның структураһына һәм функцияларына ярҙам иткән аҙыҡ компоненттарын индереү зарур. Ашаған ризығыбыҙ - тиренең яҡшы торошо өсөн талап ителгән төп биологик актив матдәләрҙең төп сығанағы ул. Уларҙың күпселеге организмда синтезланмай, ә ғәҙәти рационда күләме етерлек түгел. Һеҙөмтәлә тире микронутриенттар дефициты кисерә һәм был ваҡытынан алда ҡартайыуға килтерә: тургор (күҙәнәк һәм туҡымаларҙың һыуға туйынып тығыҙланып тороуы), һығылмалылыҡ түбәнәйә, һырҙар барлыҡҡа килә, тире тәҫһеҙләнә. Шулай итеп, тиребеҙ нимә ярата? Беҙ организм үҙе синтезлай алмаған һәм бары тик ризыҡ аша ғына алған омега-6 һәм омега-3 май кислоталары тураһында аңлаттыҡ. Уларҙың дефициты тиренең сәләмәтлеге һәм йәшлегенә кире йөғонто яһай: ул ҡорой һәм сирышҡа әйләнә, үҙенең һаҡланыу сифаттарын, тығыҙлығын юғалта, һырҙар барлыҡҡа килә. Бынан тыш, омега-3 ялҡынһыныуға һәм аллергияға ҡаршы һөҙөмтәгә эйә.

## Ҡоро тире һәм һынып торған сәстәр

А витамины мал сығанаҡлы ризыҡтарҙа бар һәм организмда үҫемлек ризыҡтары бай булған бета-каротиндан яһалыуы мөмкин. Был витамин тире өсөн бик мөһим, уны хатта "матурлыҡ витамины" тип атайҙар. Рационда ул етерлек булмағанда тире ҡорой, сәстәр һыныусанға әйләнә, тиҙ ҡойола. Хатта сабыртма, ҡоро ҡауаҡ һ.б. тире ауырыуҙары ҡуҙәтелеүе мөмкин.

**С. КУЗИНА.**
**(Дауамы бар).**

---

БЕЛМӘҺӘҢ - БЕЛ!

# ҠЫЯР ҺУТЫ ЭС,
## ҡан баҫымың көйләнер

**Ҡыяр күптәрҙең яратып ашаған йәшелсәһе. Күпселек осраҡта ҡыяр салат һәм ҡышҡылыҡҡа төрлө консервалар эшләү өсөн ҡулланыла. Ә шул уҡ ваҡытта ул тәмле генә түгел, ә файҙалы ла икәнлеген барыһы ла белмәй. Бигерәк тә ҡыяр һуты кеше организмын кәрәкле матдәләр менән байытырға һәләтле.**



Ҡыяр 93-94 процент һыуҙан тора. Ләкин ул ябай һыу түгел, ә организм метаболизмын яҡшыртыусы структураланған шыйыҡса. Нәҡ "дөрөҫ" һыу организмдағы күпселек алмаштырыу процесын нормалләштерә, һыу балансыһын оптималь кимәлдә булыуын контролдә тота һәм төрлө ағыулы матдәләрҙең һәм токсиндарҙың сығарылыуына булышлыҡ итә. Шулай уҡ ҡыяр файҙалы витаминдарға ла бай. Мәҫәлән, унда PP, биотин, В төркөмөнә ҡараған витаминдар һәм күп булмаһа ла аскорбин кислотаһы, ретинол һәм токоферол бар. Тағы ла ҡыяр үҙендә эфир майы һәм организмда артыҡ май йыйылмаһын өсөн кәрәкле тартрон кислотаһын да туплай. Ҡыярҙа шулай уҡ күкерт, йод, кремний һәм фосфор, тимер, кальций, магний, хлор һәм калий минералдары күп.

Барлыҡ был матдәләр ҡыяр һутында бар һәм шуға күрә уны ҡулланыу файҙалы, тип белдерә белгестәр. Ҡыяр һутын йөрәк, бауыр ауырғанда, ҡан баҫымы йыш үҙгәргәндә эсергә мөмкин. Шулай уҡ үҙәк көйгәндә, ашағандан һуң ҡукрәктә ауырлыҡ һәм яныу тойғанда, аппетит юғалғанда ла ҡулланырға була.

Тик ҡыяр һутын эшләгәндән һуң тиҙ арала эсеү мөһим һәм һаҡларға ярамай. Шулай уҡ һут эшләү өсөн йәш һәм боҙолмаған ҡыярҙарҙы ғына ҡулланырға кәрәк.



## 30 ИЮЛЯ ПОНЕДЕЛЬНИК, ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.50 "Жить здорово!" [16+]
10.55 Модный приговор.
12.00 Новости.
12.15 "Время покажет". [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
17.00 "Время покажет". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.15 Премьера. "Видели видео?"
19.00 "На самом деле". [16+]
19.55 "Пусть говорят". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Алхимик". [12+]
23.30 Т/с Премьера. "Тайны города Эн". [12+]
0.35 "Время покажет". [16+]
1.35 Модный приговор.
2.35 "Мужское / Женское". [16+]
3.00 Новости.
3.05 "Мужское / Женское". [16+]
3.40 "Давай поженимся!" [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00 Вести.
11.40 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
13.00 "60 минут". [12+]
14.00 Вести.
14.40 Местное время. Вести-Башкортостан.
15.00 Т/с "Склифосовский. Реанимация". [12+]
17.00 Вести.
17.40 Местное время. Вести-Башкортостан.
18.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
19.00 "60 минут". [12+]
20.00 Вести.
20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 Т/с "Чёрная кровь". [12+]
1.25 Т/с "Батюшка". [12+]
3.25 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]

### БСТ

**7.00 Сәләм. [12+]**
**10.00 Т/с "Огуречная любовь". [12+]**
**11.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**11.45 Учим башкирский язык. [0+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00 Күңелем моңдары. [12+]**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 Новости (на баш. яз.).**
**14.45 Весело живем. [12+]**
**15.00 Наука 102. [12+]**
**15.30 "Книга сказок". [0+]**
**15.45 "Борсаҡ". [0+]**
**16.00 Гора новостей.**
**16.15 "Перекличка". [6+]**
**16.30 Новости (на рус. яз.).**
**16.45 Современник. [12+]**
**17.00 Наши годы. [12+]**
**17.30 Орнамент. [6+]**
**17.45 "Красная кнопка". [16+]**
**18.30 Новости (на баш. яз.).**
**18.45 Бизнес-проба. [12+]**
**18.55 Спорт на БСТ.**
**21.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Интервью. [12+]**
**22.30 Новости (на баш. яз.).**
**23.00 Автограф. [12+]**
**23.30 Весело живем. [12+]**
**0.00 Х/ф "Красный отель". [16+]**
**2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "Мою жену зовут Морис". [12+]**
**5.15 Весело живем. [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.).**

## 31 ИЮЛЯ ВТОРНИК, ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.50 "Жить здорово!" [16+]
10.55 Модный приговор.
12.00 Новости.
12.15 "Время покажет". [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
17.00 "Время покажет". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.15 Премьера. "Видели видео?"
19.00 "На самом деле". [16+]
19.55 "Пусть говорят". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Алхимик". [12+]
23.30 Т/с Премьера. "Тайны города Эн". [12+]
0.30 "Время покажет". [16+]
1.35 Модный приговор.
2.35 "Мужское / Женское". [16+]
3.00 Новости.
3.05 "Мужское / Женское". [16+]
3.40 "Давай поженимся!" [16+]
4.57 -

### РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00 Вести.
11.40 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
13.00 "60 минут". [12+]
14.00 Вести.
14.40 Местное время. Вести-Башкортостан.
15.00 Т/с "Склифосовский. Реанимация". [12+]
17.00 Вести.
17.40 Местное время. Вести-Башкортостан.
18.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
19.00 "60 минут". [12+]
20.00 Вести.
20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 Т/с "Чёрная кровь". [12+]
1.15 Т/с "Батюшка". [12+]
3.15 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]

### БСТ

**7.00 Сәләм. [12+]**
**10.00 Т/с "Огуречная любовь". [12+]**
**11.00 Следопыт. [12+]**
**11.30 Новости (на рус. яз.).**
**11.45 Бизнес-проба. [12+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00 Күңелем моңдары. [12+]**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 Новости (на баш. яз.).**
**14.45 Весело живем. [12+]**
**15.00 Дорога к храму. [0+]**
**15.30 Йырлы кәрәҙ. [6+]**
**15.45 Бауырһаҡ. [0+]**
**16.00 Гора новостей.**
**16.15 "Семәр". [0+]**
**16.30 Новости (на рус. яз.).**
**16.45 Современник. [12+]**
**17.00 Дознание. [16+]**
**17.30 Орнамент. [6+]**
**17.45 Учим башкирский язык. [0+]**
**18.00 Бай баҡса. [12+]**
**18.30 Новости (на баш. яз.).**
**18.45 Криминальный спектр. [16+]**
**18.55 Хоккей. Кубок ХК "Салават Юлаев".**
**21.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Интервью.**
**22.30 Новости (на баш. яз.).**
**23.00 "Песня года". [12+]**
**23.30 Весело живем. [12+]**
**0.00 Х/ф "3 дня на убийство". [12+]**
**2.30 Бәхетнамә. [12+]**
**3.15 Спектакль "Оль-ля-ля!". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.).**

## 1 АВГУСТА СРЕДА, ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.50 "Жить здорово!" [16+]
10.55 Модный приговор.
12.00 Новости.
12.15 "Время покажет". [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
17.00 "Время покажет". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.15 Премьера. "Видели видео?"
19.00 "На самом деле". [16+]
19.55 "Пусть говорят". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Инквизитор". [16+]
23.25 Т/с Премьера. "Тайны города Эн". [12+]
0.25 Д/ф "Ивар Калныныш. Роман с акцентом". [12+]
1.30 "Время покажет". [16+]
2.30 "Мужское / Женское". [16+]
3.00 Новости.
3.05 "Мужское / Женское". [16+]
3.30 "Давай поженимся!" [16+]
4.20 Контрольная закупка.

### РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00 Вести.
11.40 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
13.00 "60 минут". [12+]
14.00 Вести.
14.40 Местное время. Вести-Башкортостан.
15.00 Т/с "Склифосовский. Реанимация". [12+]
17.00 Вести.
17.40 Местное время. Вести-Башкортостан.
18.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
19.00 "60 минут". [12+]
20.00 Вести.
20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 Т/с "Чёрная кровь". [12+]
1.25 Т/с "Батюшка". [12+]
3.25 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]

### БСТ

**7.00 Сәләм. [12+]**
**10.00 Т/с "Огуречная любовь". [12+]**
**11.00 Наука 102. [12+]**
**11.30 Новости (на рус. яз.).**
**11.45 Криминальный спектр. [16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00 Тәмле. [12+]**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 Новости (на баш. яз.).**
**14.45 Весело живем. [12+]**
**15.00 "100 имен Башкортостана". [12+]**
**15.30 "Городок АЮЯ". [0+]**
**15.45 "Ал да гөл". [6+]**
**16.00 Гора новостей.**
**16.15 "Физра". [6+]**
**16.30 Новости (на рус. яз.).**
**16.45 Замандаш. [6+]**
**17.00 Д/ф "История Государства Российского". [12+]**
**17.30 Орнамент. [6+]**
**17.45 Учим башкирский язык. [0+]**
**18.00 Башҡорттар. [6+]**
**18.30 Новости (на баш. яз.).**
**18.45 Дорожный патруль. [16+]**
**18.55 Хоккей. Кубок ХК "Салават Юлаев".**
**21.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Интервью.**
**22.30 Новости (на баш. яз.).**
**23.00 Бала-саға. [6+]**
**23.45 Весело живем. [12+]**
**0.00 Х/ф "В последний раз". [16+]**
**2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**3.15 Спектакль "Не улетайте, журавли". [12+]**
**4.45 Весело живем. [12+]**
**5.00 Үткән ғүмер. [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.).**

## 2 АВГУСТА ЧЕТВЕРГ, ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.50 "Жить здорово!" [16+]
10.55 Модный приговор.
12.00 Новости.
12.15 "Время покажет". [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
17.00 "Время покажет". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.15 Премьера. "Видели видео?"
19.00 "На самом деле". [16+]
19.55 "Пусть говорят". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Инквизитор". [16+]
23.25 Т/с Премьера. "Тайны города Эн". [12+]
0.25 Д/ф "Полярное братство". [12+]
1.30 "Время покажет". [16+]
2.30 "Мужское / Женское". [16+]
3.00 Новости.
3.05 "Мужское / Женское". [16+]
3.35 "Давай поженимся!" [16+]
4.25 Контрольная закупка.

### РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00 Вести.
11.40 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
13.00 "60 минут". [12+]
14.00 Вести.
14.40 Местное время. Вести-Башкортостан.
15.00 Т/с "Склифосовский. Реанимация". [12+]
17.00 Вести.
17.40 Местное время. Вести-Башкортостан.
18.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
19.00 "60 минут". [12+]
20.00 Вести.
20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 Т/с "Чёрная кровь". [12+]
1.25 Т/с "Батюшка". [12+]
3.20 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]

### БСТ

**7.00 Сәләм. [12+]**
**10.00 Т/с "Огуречная любовь". [12+]**
**11.00 Д/ф "Моя планета - Башкортостан". [12+]**
**11.30 Новости (на рус. яз.).**
**11.45 Дорожный патруль. [16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00 Күңелем моңдары. [12+]**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 Новости (на баш. яз.).**
**14.45 Весело живем. [12+]**
**15.00 У дачи. [12+]**
**15.30 Байтус. [6+]**
**15.45 "Ҡош юлы. Балалар". [6+]**
**16.00 Гора новостей.**
**16.15 Йырлы кәрәҙ. [0+]**
**16.30 Новости (на рус. яз.).**
**16.45 Интервью. Выборы-2018. [12+]**
**17.00 Д/ф "Горькая ягода Ольги Воронец". [12+]**
**17.45 Современник. [12+]**
**18.00 Үткән ғүмер. [12+]**
**18.30 Новости (на баш. яз.).**
**18.45 Интервью.**
**19.15 Күңелем моңдары. [12+]**
**19.30 Башҡорттар. [6+]**
**20.15 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.30 Барбекю со звездой. [12+]**
**20.45 Криминальный спектр. [16+]**
**21.00 Уфимское "Времечко".**
**21.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Интервью.**
**22.30 Новости (на баш. яз.).**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Х/ф "Мёбиус". [16+]**
**2.30 Бәхетнамә. [12+]**
**3.15 Спектакль "Весело живем". [12+]**
**5.15 Весело живем. [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.).**

## 3 АВГУСТА ПЯТНИЦА, ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.50 "Жить здорово!" [16+]
10.55 Модный приговор.
12.00 Новости.
12.15 "Время покажет". [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
17.00 "Время покажет". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.15 Премьера. "Видели видео?"
19.00 "На самом деле". [16+]
19.55 "Поле чудес". [16+]
21.00 Время.
21.30 Премьера. Международный музыкальный фестиваль "Жара". [12+]
23.55 Х/ф Премьера. "Полной грудью". [16+]
1.40 Х/ф "Сицилийский клан". [16+]
4.00 Модный приговор.
5.00 "Мужское / Женское". [16+]

### РОССИЯ

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00 Вести.
11.40 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
13.00 "60 минут". [12+]
14.00 Вести.
14.40 Местное время. Вести-Башкортостан.
15.00 Т/с "Склифосовский. Реанимация". [12+]
17.00 Вести.
17.40 Местное время. Вести-Башкортостан.
18.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
19.00 "60 минут". [12+]
20.00 Вести.
20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 "Петросян-шоу". [16+]
23.50 "Весёлый вечер". [12+]
1.50 Х/ф "Я или не я". [12+]

### БСТ

**7.00 Сәләм. [12+]**
**10.00 Д/ф "Женя Белоусов. Все на свете за любовь". [12+]**
**10.45 Учим башкирский язык. [0+]**
**11.00 Автограф. [12+]**
**11.30 Новости (на рус. яз.).**
**11.45 Криминальный спектр. [16+]**
**12.00 Спектакль "Караул, тещу украли!" [12+]**
**13.30 Күңелем моңдары. [12+]**
**14.30 Новости (на баш. яз.).**
**14.45 Бала-саға. [6+]**
**15.30 "Сулпылар". [0+]**
**15.45 Шәп арба. [6+]**
**16.00 "Выше всех". [6+]**
**16.15 "Зеркальце. [6+]**
**16.30 Новости (на рус. яз.).**
**16.45 Замандаш. [6+]**
**17.00 Д/ф "Моя планета - Башкортостан". [12+]**
**17.30 Орнамент. [6+]**
**17.45 Барбекю со звездой. [12+]**
**18.00 "Йома". [0+]**
**18.30 Новости (на баш. яз.).**
**18.45 Учим башкирский язык. [0+]**
**18.55 Хоккей. Кубок ХК "Салават Юлаев".**
**21.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Наука 102. [12+]**
**22.30 Новости (на баш. яз.).**
**23.00 "Байыҡ-2018". [12+]**
**0.00 Х/ф "Падение Римской империи". [16+]**
**3.45 Спектакль "Пролетая над гнездом кукушки". [12+]**
**6.15 Весело живем. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.).**

## 4 АВГУСТА СУББОТА, ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Новости.
6.10 Ералаш.
6.40 М/с "Смешарики. Новые приключения".
6.55 Х/ф "Единичка". [12+]
9.00 Играй, гармонь любимая!
9.45 Слово пастыря.
10.00 Новости.
10.10 Д/ф Премьера. "Какие наши годы!" [12+]
11.10 Д/ф "Теория заговора". [16+]
12.00 Новости с субтитрами.
12.20 "Идеальный ремонт".
13.30 Д/с "Открытие Китая".
14.10 "На 10 лет моложе". [16+]
15.00 Большой праздничный концерт к Дню Воздушно-десантных войск.
16.50 "Видели видео?"
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.15 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым.
19.50 "Сегодня вечером". [16+]
21.00 Время.
21.20 "Сегодня вечером". [16+]
23.00 "КВН". Премьер-лига. [16+]
0.30 Х/ф "Планета обезьян: Революция". [16+]
2.55 Модный приговор.
3.55 "Мужское / Женское". [16+]
4.50 "Давай поженимся!" [16+]
5.35 Контрольная закупка.

### РОССИЯ 1

5.15 Т/с "Семейные обстоятельства". [12+]
7.10 "Живые истории".
8.00 Россия. Местное время. "Говорит и показывает Уфа". [12+]
9.00 "По секрету всему свету".
9.20 Сто к одному.
10.10 "Пятеро на одного".
11.00 Вести.
11.20 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.40 "Измайловский парк". Большой юмористический концерт. [16+]
14.00 Х/ф "Память сердца". [12+]
18.00 "Привет, Андрей!" [12+]
20.00 Вести.
20.50 Х/ф "Заклятые подруги". [12+]
0.50 Х/ф "Родная кровиночка". [12+]
2.50 Т/с "Личное дело". [16+]

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**7.45 Новости (на баш. яз.).**
**8.00 Х/ф "Клад". [6+]**
**10.00 "У дачи". [12+]**
**10.30 "Большой чемодан. [6+]**
**11.15 "100 имен Башкортостана". [12+]**
**11.45 Орнамент. [6+]**
**12.00 Тәмле. [12+]**
**12.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.00 "Близкий праздник в далекой стране". [6+]**
**13.15 Учим башкирский язык. [0+]**
**13.30 "Бай". [12+]**
**14.00 "Дарю песню. [12+]**
**16.00 "Байыҡ-2018". [12+]**
**16.55 Хоккей. Кубок ХК "Салават Юлаев".**
**19.30 Новости (на баш. яз.).**
**20.00 Весело живем. [12+]**
**20.15 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.30 Шәжәрә-байрам! [12+]**
**21.00 "100 имен Башкортостана". [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Следопыт. [12+]**
**22.30 Итоги недели (на баш. яз.).**
**23.15 "Башҡорт йыры-2018". [12+]**
**0.00 Х/ф "Помпеи". [12+]**
**1.45 Итоги недели (на баш. яз.). [12+]**
**2.30 Спектакль "Шәүрәкәй". [12+]**
**4.30 Весело живем. [12+]**
**5.00 Автограф. [12+]**
**5.30 Д/ф "Млечный путь". [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.).**

## 5 АВГУСТА ВОСКРЕСЕНЬЕ, ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Новости.
6.10 Д/с "Россия от края до края". [12+]
7.00 Бокс. Бой за титул чемпиона мира. Сергей Ковалев - Элейдер Альварес. [12+]
8.40 "Здоровье". [16+]
9.40 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
10.00 Новости.
10.10 Д/ф "Валентина Леонтьева. Объяснение в любви". [12+]
11.15 Честное слово с Юрием Николаевым.
12.00 Новости с субтитрами.
12.15 Д/ф "Анна Герман. Дом любви и солнца". [12+]
13.25 Т/с "Анна Герман". [12+]
18.20 "Клуб Веселых и Находчивых". [16+]
21.00 Воскресное "Время".
22.00 Премьера. "Звезды под гипнозом". [16+]
23.50 Х/ф "Копы в юбках". [16+]
2.00 Модный приговор.
3.05 "Мужское / Женское". [16+]
3.55 "Давай поженимся!" [16+]

### РОССИЯ 1

4.55 Т/с "Семейные обстоятельства". [12+]
6.45 "Сам себе режиссёр".
7.35 "Смехопанорама" Евгения Петросяна.
8.05 Утренняя почта.
8.45 Местное время. Вести-Башкортостан. События недели.
9.25 Сто к одному.
10.10 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
11.00 Вести.
11.20 Т/с "Чужая жизнь". [12+]
20.00 Вести.
22.00 "Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
0.30 "Действующие лица с Наилей Аскер-заде". [12+]
1.25 Д/ф "Балканский капкан. Тайна сараевского покушения". [12+]
2.25 Т/с "Право на правду". [12+]

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**7.45 Новости (на баш. яз.).**
**8.00 М/ф "Фиксики". [0+]**
**9.00 "Йома". [0+]**
**9.30 Бай баҡса. [12+]**
**10.00 "Перекличка". [6+]**
**10.15 "Выше всех". [6+]**
**10.30 "Ал да гөл. [0+]**
**10.45 "Книга сказок". [0+]**
**11.00 Байтус. [6+]**
**11.15 "Сулпылар". [0+]**
**11.30 "Ҡош юлы. Балалар". [6+]**
**11.45 Алтын тирмә. [0+]**
**12.30 Итоги недели (на баш. яз.).**
**13.15 Учим башкирский язык. [0+]**
**13.30 Үткән ғүмер. [12+]**
**14.00 "Дарю песню. [12+]**
**15.30 Башҡорттар. [6+]**
**16.00 Дорога к храму. [0+]**
**16.30 Концерт Загира Исанчурина. [12+]**
**18.00 Х/ф "Война Богов: бессмертные". [16+]**
**20.00 Моя Республика. [12+]**
**20.15 Имею право. [12+]**
**20.30 Лидеры региона. [12+]**
**21.00 Дознание. [16+]**
**21.30 Итоги недели (на рус. яз.).**
**22.15 "Красная кнопка". [16+]**
**23.00 Свидание с джазом. [12+]**
**0.00 Х/ф "Война Богов: Бессмертные". [16+]**
**2.00 Спектакль "Чайка". [12+]**
**4.15 Д/ф "Млечный путь". [12+]**
**5.00 Историческая среда. [12+]**
**5.30 Д/ф "История Государства Российского". [12+]**
**6.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**6.45 Учим башкирский язык. [0+]**

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# "ҠЫҘЫЛ КИТАП"ҠА ИНДЕРЕЛГӘН ЙӘНЛЕКТӘР




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**29-сы һандағы сканворд яуаптары. Горизонталь буйынса:** Старт. Боланут. Мәтрүшкә. Йомшаҡ. Тәңре. Әнис. Аласыҡ. Унан. Евпатория. Улъя. Урта. Айыу. Мәрүәр. Әсҡәт. Ҡауҙы. Ағым. Уҫаҡ. Шүмән. Әбәк. Әрем.

**Вертикаль буйынса:** Тилермән. Меңъяпраҡ. Егет. Ата. Баяр. Ғәйрәт. Үгәй. Тәлгәш. Уҡмаш. Уяу. Үпкә. Әпсен. Урам. Тауыҡ. Әҫпе. Йылантамыр. Утрау. Шанс. Ҡырҡъяпраҡ.

ЙӘШЕЛ ДАРЫУХАНА



# МУЛЛАЯН ҮЛӘНЕ

**Муллаян үләненең (герань луговая) бөтә төрө лә бер үк дауалау сифатына эйә. Уларҙың бөтәһе лә шеште ҡайтарыу, йоғошһоҙландырыу, ауыртыуҙы баҫыу, ҡанды туҡтатыу сифаттарына эйә. Дауалау маҡсатында был үләндең япраҡтары, сәскәләре, тамыры ҡулланыла. Улар менән яңы барлыҡҡа килгән яман шеш, һөйәктәр һыныуын, гастрит, энтерит, өҫкө тын алыу юлдары ауырыуҙары, аҙыҡ менән ағыуланыу, дизентерия, йоҡоһоҙлоҡ, эпилепсия, ревматизм һәм подагра, стенокардия һәм тахикардия ауырыуҙарын дауалайҙар.**

**Шизофрения.** 2 стакан ҡайнар һыуға 2 балғалаҡ муллаян үләнен алырға. 8-10 сәғәт төнәтергә (төнгөләккә ҡуйырға). Һәр 2-3 сәғәт һайын 1 ҡалаҡ ҡабул итергә (ауырыуҙың энергетик майҙанын тәҙәтә, йоҡоһон яҡшырта, ҡуҙғыусанлыҡты баҫа).

**Полиартрит, ревматизм, подагра, остеохондроз.** Үрҙә килтерелгән төнәтмә ошо уҡ ауырыуҙарҙы дауаларға ярҙам итә. Курсты ауырыуҙың хәле яҡшырғансы үтергә. Төнәтмә менән бер юлы ауырыуҙың һыҙлаған быуындарына сылатҡыстар ҙа яһарға мөмкин.

**Стенокардия.** 5 ҡалаҡ кипкән муллаян үләненә 300 мл ҡайнар һыу ҡойорға, 2-3 сәғәт төнәтергә, һарҡытырға. Көнөнә 4-5 тапҡыр ашағанға тиклем 1-2 ҡалаҡ ҡабул итергә.

**Бөйөрҙөң таш ауырыуы.** 10 г (2 балғалаҡ) киптерелгән ҡоро тамырға бер стакан һыу ҡойорға, һүрән утта 7-8 минут ҡайнатып алырға, 1 сәғәт төнәтергә, баштағы күләменә еткәнсе ҡайнар һыу ҡойорға. Көнөнә 4-5 тапҡыр ашар алдынан 2 ҡалаҡ ҡабул итергә. Был төнәтмәнең ҡиммәте шунда, ул таштарҙы иретә.

**Ҡан төкөрөү, балаяткынан ҡан китеү, геморройҙан ҡан ағыу.** Уларҙы тиҙерәк туҡтатыу өсөн 2-3 сәғәт һайын 20-30 тамсы яңы үлән һутын ҡабул итергә кәрәк. Әгәр танауҙан ҡан килһә - танау тишегенә үлән һутында сылатып алынған мамыҡ ҡуйырға. Әгәр яңы үлән булмаһа, үлән тамырынан ҡаты төнәтмә яһарға мөмкин. Быны өсөн 1-2 ҡалаҡ үләнде бер стакан һыу һалып 5-7 минут ҡайнатып алырға. Һыуынғансы төнәтергә, ҡан туҡтағансы һәр 2-3 сәғәт һайын 1-2 ҡалаҡ ҡабул итергә.

**Онкология.** Бөтә төрлө яман шеш ауырыуы ваҡыттарында ла үләндең һыуыҡ төнәтмәһен ҡабул итәләр: 1 ҡалаҡ үләнде 2 стакан һыуынған ҡайнар һыуға һалып 8 сәғәт төнәтергә, көн дауамында эсергә.

**Рим ӘХМӘДОВ яҙмаларынан.**

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1439 һижри йыл.*

| Июль-Август (Зөлҡәғиҙә) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 30 (17) дүшәмбе | 3:54 | 5:24 | 13:30 | 19:49 | 21:19 | 22:49 |
| 31 (18) шишәмбе | 3:56 | 5:26 | 13:30 | 19:48 | 21:18 | 22:48 |
| 1 (19) шаршамбы | 3:57 | 5:27 | 13:30 | 19:46 | 21:16 | 22:46 |
| 2 (20) кесе йома | 3:59 | 5:29 | 13:30 | 19:44 | 21:14 | 22:44 |
| 3 (21) йома | 4:01 | 5:31 | 13:30 | 19:42 | 21:12 | 22:42 |
| 4 (22) шәмбе | 4:03 | 5:33 | 13:30 | 19:40 | 21:10 | 22:40 |
| 5 (23) йәкшәмбе | 4:01 | 5:34 | 13:30 | 19:38 | 21:08 | 22:38 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

ҺЫЙЛАМАҒА ҺЫЙЫҢ БУЛҺЫН!



### Грушаларҙан турама

**2 груша, 100 грамм сыр, 1 татлы борос, 1 помидор, 3 ҡалаҡ майонез, 1 ҡалаҡ ҡаймаҡ, тоҙ һәм шәкәр.**

Грушаларҙы әрсеп, һаламлап турарға. Шул рәүешле туралған сыр, борос, помидор менән бергә бутап, майонез, ҡаймаҡ менән болғатып, тоҙ һәм шәкәр өҫтәргә.

### "Наҙлы" турамаһы

**1 баш һуған, 2 алма, 4 йомортҡа, 6 ҡалаҡ майонез, 150 грамм сыр.**

Һуғанды турап, ҡайнар һыу менән бешекләргә. Йомортҡаларҙы бешергәндән һуң, таҙартырға, бер йомортҡаның һарыһын алып ҡалырға, ҡалғандарын ҡырғыс аша үткәрергә. Алма һәм сырҙы ла ҡырғыстан үткәрергә кәрәк. Тәрилкә төбөнә тәүҙә һуған, өҫтөнә сырҙың яртыһын һалып, майонез һөртөргә. Майонез өҫтөнә алма, тағы майонез, йомортҡа, майонез һалырға. Ҡатламдарҙы ҡабатларға. Тураманың өҫтөнә майонез һөртөп, ваҡланған йомортҡа һарыһы менән биҙәп ҡуйырға.

### "Йәйгор" турамаһы

**3 татлы борос (1 ҡыҙыл, 1 һары, 1 йәшел), 100 грамм сыр, һарымһаҡ теше, йәшел тәмләткестәр.**

Боросто нәҙек итеп турарға, сырҙы ҡырғыстан ҡырырға һәм икеһен бергә болғатырға. Майонезға иҙелгән һарымһаҡ өҫтәп, салаттың өҫтөнә һалырға.

ҺАЙ, БАШҠОРТ АШТАРЫ!

# ТАЛҠАН

**Башҡорт халҡының тормош-көнкүрешенә яраҡлы файҙалы ла, туҡлыҡлы ла, шифалы ла ашамлыҡтары бик күп. Яҙлауҙарға, йәйләүҙәргә, хатта көҙләүҙәргә күсеп йәшәгән, фәҡәт ҡышҡылыҡҡа ғына ултыраҡ тормошона ҡайтҡан башҡорт тиҙ боҙолмай торған ризыҡ етештереү ысулдарын белгән. Бынан тыш, оҙон-оҙаҡ хеҙмәт иткән, ихтилалдарға күтәрелгән, алыҫ-алыҫҡа һунарға сығып киткән ир-егеттәргә лә тиҙ генә әҙерләй торған, еңел үҙләштерелгән, шул уҡ ваҡытта кәрәк саҡта дарыу урынына ла файҙаланырлыҡ аҙыҡ кәрәк булған. Шуның өсөн дә халҡыбыҙҙың ғәжәп шифалы ризыҡтары бихисап. Ярай әле, милли аҙыҡтарҙың күбеһен әҙерләү ысулын хәтерләгән инәйҙәребеҙ бар.**



Талҡандың шифалы яғына килгәндә иһә, башҡорт милли аҙыҡтарының бик күбе профессиональ медицина яғынан тикшерелмәгән. Әле билдәле булғандарынан ҡымыҙ, солоҡ балы ғына тикшереү үткән.

Дауалау үҙенсәлеге тураһында тәгәйен генә әйтә алмайым, сөнки, әйтеп үтеүемсә, тикшерелмәгән. Ә инде ҡулланыусыларҙың фекеренә ҡолаҡ һалыуыбыҙ насар булмаç. Бер йылы Өфөлә талҡан етештерә башланыҡ та, төрлө сәбәптәр арҡаһында туҡтап ҡалдыҡ. Шул саҡта килгән хаттарҙың йөкмәткеһенә иғтибар итегеҙ:

"...Мин шәкәр диабетынан оҙаҡ йылдар яфаландым. Тик һеҙҙең талҡанығыҙ менән генә дауаландым. Магазиндарҙа, аптекаларҙа һатылған талҡан минә килешмәй, тәме лә икенсе. Минең хәлемә инегеҙ, минең өсөн генә эшләп ебәрегеҙ әле".

"...Әсәйем ҡаты ауырый. Бөтөн дарыуҙарға ла аллергия. Тик талкан менән генә йәшәй".

"...Елкәмә тоҙ ултырып, йәмһеҙ булып йөрөй инем. Талҡан ашағас, бөттө. Аяҡ һыҙлауҙарым басылды".

"...Хәлһеҙ инем. Ҡайһы ерем ауырта, тип тә әйтә алмай торғайным. Талҡан менән аяҡҡа баҫтым".

Ошондай фекерҙәр бихисап.

Ә милли аҙыҡтарыбыҙ тураһында халыҡта шундай фекерҙәр уҡығаным бар. Сәсән-шағир Шафиҡ Тамъяни (1858-1936) "Башҡорт бабаларының тарихы" тигән әҫәрендә былай тип яҙа:

*Бабалар эре булған оҙаҡ йәшәп,*
*Ҡарттары һикһән йәштә*
*ҡурмас ашап.*
*Шул батыр бабаларҙан тыуған булһа,*
*Балаһы насар булһын кемгә оҡшап?*

Яҙыусы Әнүр Вәхитовтың "Ир ҡанаты" тигән әҫәрендә йүнһеҙ бер әҙәм атты шәп ҡыуып, яңы сигенә еткерә. Ауған атҡа ат ҡараусы ҡарт андыҙ эсерә, ҡурмас ашата. Күрәһең, ҡыҙҙырып ашаған ҡурмас туҡлыҡлы ғына түгел, ә шифалы ла инде. Талҡан етештереү менән шөғөлләнеүсе эшҡыуарҙар күренгеләй башланы һуңғы ваҡытта. Ейәнсура районының Ибрай ауылында етештерелә ул. Бында талҡанды боронғоса етештереү ысулына аҙ ғына үҙгәреш индерелгән - бойҙай төүҙә шыттырыла. Бында етештерелгән талҡандың үҙенсәлеге тағы шунда: ауылда боронғо традицион оҫталыҡ һаҡланған һәм бар нәмә ихлас күңелдән башҡарыла. Күңел йылылығы менән әҙерләнгән аҙыҡтың тәнгә сихәте йоғошлораҡ. Бөтөн эш ҡул менән эшләнә. Ҡуплап машинаға һалып, нисек етте шулай ҡыҙҙырылмай.

Ысынлап та, талҡан файҙалы ризыҡ. Белгән кеше уны ҡуплап ала. Тағы бер үҙенсәлеге шунда: талҡан - ул ризыҡ. Хатта файҙаһы теймәй тигән сүрәттә лә бер генә зыяны ла юҡ. Уға боҙолмаһын өсөн дә, төҫөн матурлау өсөн дә бер ниндәй ҙә өҫтәмәләр ҡушылмай. Барыһы ла тәбиғи.

**Мәрйәм БУРАҠАЕВА.**

# ЙӘЙГЕ БӘЛЕШТӘР

**Йәйгеһен емеш-еләк мул саҡта төрлө бәлештәр бешерергә була. Еләк-емеш бәлеше өсөн ҡамырҙың төрлөһөн ҡуллана алаһығыҙ. Асыҡ бәлештәр өсөн ҡара ҡарағат, көртмәле, ҡара бөрлөгән яҡшы. Сейә, еләк, ҡурай еләген йышыраҡ ҡамырға өҫтәп бешерәләр. Түбәндә йәйге бәлештәрҙең бер нисә өлгөһөн тәҡдим итәбеҙ.**



## Сейә бәлеше

150 г маргаринды 150 г он менән ыуып алығыҙ һәм уға 80 г шәкәр, 150 г әремсек өҫтәп, тиҙ генә ҡамыр баҫығыҙ. Полиэтиленга төрөп, ярты сәғәткә һыуытҡыска алып ҡуйығыҙ.

Был ваҡыт эсендә бәлештең эслеге әҙерләнә. 500 г сейәне кәстрүлгә һалып, 100 г шәкәр өҫтәйһең һәм талғын утҡа ҡуйбыҙ. Һыу өҫтәмәһәң дә була, сейәнең һуты былай ҙа күп бүленәсәк. Айырым һауытта 10 г желатинға 50 г һыуыҡ һыу өҫтәп, 10-15 минутҡа ултыртып ҡуябыҙ. Сейә ҡайнап сыҡҡас, уға желатинды өҫтәп, яҡшылап болғатабыҙ һәм һалҡын урынға алып ҡуябыҙ.

Ҡамырҙы 1 см ҡалынлығында йәйеп, формаға һалабыҙ, бер нисә урындан сәнскеләп менән тишәбеҙ. Йылытылған мейестә 180 градуста 15-20 минут бешерәбеҙ. Әҙер ҡамырға сейәләрҙе һөҙөп һалабыҙ һәм һыуытҡыскa ҡуябыҙ. Сейәнең бүленеп сыҡҡан һутын да һыуытып, ул желеға әйерелә башлағас та, бәлештең өҫтөнә йәйеп сығабыҙ. Һут йылы булмаҫҡа тейеш, юғиһә ул ҡамырҙы еүешләйәсәк.

## Көртмәле бәлеше

180 г онға 1 семтем тоҙ, 130 г шәкәр өҫтәп, болғатырға. 50 г майҙы өҫтәп, ыуырға. Бер стакан ҡамырҙы ситкә алып ҡуйығыҙ. Ҡалғанын майлы табаға һалып, ҡул менән тигеҙләгеҙ. Мейесте 180 градусҡа йылытырға. Ҡалған ҡамырға ярты балғалаҡ сода, 100 г ҡаймаҡ, 1 йомортҡа,1 балғалаҡ ванилин, 200 г көртмәле (туңған булһа, яҡшыраҡ, уны иретеп тормайынса бәлешкә һалалар) өҫтәп, болғатырға һәм алдағы ҡамыр өҫтөнә һалырға. 35 минут бешерергә.

## Ҡурай еләге бәлеше

100 г аҡ майға 6 ҡалаҡ он өҫтәп ыуырға, 1 йомортҡа, 1 семтем тоҙ өҫтәп, ҡамыр баҫырға, ярты сәғәткә һыуытҡысҡа ҡуйырға. 200 мл 20 процентлы һөт өҫтөн ҡайнатып сығарырға, уттан алырға. 1 семтем ванилин, 200 г аҡ шоколад өҫтәп, туҡырға. 4 йомортҡа һарыһын йылап ошо массаға өҫтәргә, болғарға. Ҡамырҙы йәйергә, формаға һалырға, 180 градуста 10 минут бешерергә. Бешкән ҡамырға ҡурай еләген теҙеп сығырға, өҫтөнә әҙер кремды һалырға, тағы ла 25-30 минутҡа мейескә ҡуйырға.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә әйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# БИСӘҢ МАТУР БУЛҺА,

## байың үсле була

Икәү булып ятығыҙ, өсәү булып торoғоҙ.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Кеше ике төрлө юл менән генә күтәрелә ала: йә үҙенең ыҡлығы, йә башҡаларҙың ахмаҡлығы ярҙамында.

**(Жан де Лабрюйер).**

Һәр саҡ аҡыллы булып күренергә тырышыуҙан да ахмаҡыраҡ теләк юҡ.

**(Франсуа Ларошфуко).**

Башҡаларҙы буйһондорорға теләһәң - үҙеңдән башла.

**(Вовенарг, француз фәлсәфәсеһе).**

Йәшлек бер ваҡытта ла тормошҡа ашмаçтай нәмәләр тураһында хыяллана, ҡартлыҡ бер ваҡытта ла тормошҡа ашмаған нәмәне хәтергә ала.

**(Гектор Манро).**

Ғүмер юлың ҡасан да булһа өҙөлөрөнән ҡурҡма, ғүмер юлыңдың башлана алмай ҡаңғырыуыунан ҡурҡ.

**(Д. Ньюмен).**

Һин өс юл аша аҡылға ирешә алаһың: тәжрибә юлы - быныһы иң әсеһе; башҡаларға оҡшатыу юлы - быныһы иң еңеле; уйланыуҙар юлы - быныһы иң изгеһе.

**(Ҡытай мәҡәле).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер ҡарт ейәне менән урам буйлап килә. Бына улар бер өй тапҡырына етә. Өй янында бер малай ҡойма йүнәтеп йөрөй. Уйнарға сығыр алдынан ошо эште башҡарыуҙы атаһы ҡушҡан икән. Малай бер ҙә эш рәте белмәй, йә сүкешен яңылыш тота, йә таҡтаһы төшөп китә, йә ҡаҙауы тынлашмай. Бына бер мәл ул яңылыш сүкеше менән ҡулына һуға. Ауыртыныуҙан әрнеп ҡысҡырып ебәрә малай һәм сүкешен ергә бәрә. Үҙе яҡлау йә ярҙам эҙләгәндәй, уйнап йөрөгән иптәштәренә күҙ һала. Был хәлде күҙәтеп килеүсе бабайҙың ейәне тиҙ генә әлеге малайға ярҙамға ташлана, сүкешен алып, ҡойма таҡтаһын ҡағып та ҡуя. Ләкин олатаһы уға эшләп бөтөргә бирмәй, ул ҡаҡҡан ҡойманы яңынан аҡтарып сығара. "Ниңә улай итәһең, олатай? - ти ейәне аптырап. - Һин бит минә һәр саҡ кешеләргә ярҙам итергә өйрәттең..." "Мин һине изгелеккә өйрәттем, ә ике йөҙлөлөккә түгел, - ти олатай. - Малай өсөн эш эшләп, һин уны ҡойма йүнәтергә өйрәнеүҙән азат итеп кенә ҡалманың. Ул бит һәр эштә түҙем булырға кәрәк икәнен дә үҙләштереп өлгөрмәне. Һин үҙеңдең "изге" эшең менән был малайҙың тормошон боҙа яҙҙың..."**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираçты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**

«Печатник» ЯСЙ типографияһында баçылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаçары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 27 июль 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4077
Заказ - 1312/07